ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

31-6 ғинуар - февраль (һыуығай - шаҡай) 2025

№4 (1148)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ринаттың данлы яу юлы



6

Яҡтылыҡ сығанағыбыҙ - тарихыбыҙҙа



8-9

Яңы хыял бөрөләнде...



11

Әллә дөрөҫ, әллә уйҙырма был... солоҡто айыуҙан һаҡлауҙың боронғо ысулдары



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға ваҡытынан алда, 1 февралдән, 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы 971 һум 70 тин. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ОҪТАЛАР ҠАЛАҺЫ БУЛАБЫҘМЫ?



**Башҡортостандың баш ҡалаһы ағас, таш эшкәртеү һәм биҙәү буйынса донъя оҫталары ҡалаһы статусы алыуға ғариза тапшырҙы. Ике яҡлы ҡарар ҡабул ителеү осрағында Өфө Рәсәйҙә шундай кимәлдәге беренсе ҡалаға әйләнеүе мөмкин. Был турала Өфө мэрияһының ситуациялар үҙәгендә AISBL (WCC-AISBL) Бөтә донъя оҫталар советының жюри ағзалары менән матбуғат конференцияһында билдәле булды.**

(Дауамы 5-се биттә).

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## ЙЫЛ БИЛДӘҺЕ - ҺҮРӘТТӘ

**Башҡортостан вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов үҙенең телеграм-каналында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам йылы логотибын күрһәтте.**

"Логотип республикаһың яугирҙар һәм уларҙың ғаиләләре хаҡында онотмауы, хәстәрлек күреүе тураһында танылып торған символ булырға тейеш", - тип билдәләне Руслан Хәбибов.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, уҙған йылдың октябрендә "Каршылыҡтарҙы емереп" форумы барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2025 йылды МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеү йылы тип иғлан итте.

- Бөгөн Махсус хәрби операция шарттарында ҡаты яраланған яугирҙарға ярҙам итергә кәрәк. Уларҙы тулы ҡанлы тормошҡа яраҡлаштырыу өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләү мөһим. Шуға күрә киләһе йылды Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам итеү йылы тип иғлан итәбеҙ, - тине Радий Хәбиров.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## БАЛАЛАРҒА ТӘМӘКЕ ҺАТМА!

**Дәүләт Думаһы балаларға тәмәке изделиелары һәм никотинлы продукция, уны ҡулланыу яйламалары йәки етештереү маҡсатында сеймал һатҡан өсөн яуаплылыҡты ҡәтғиләштереүсе закон ҡабул итте.**

Граждандар өсөн штрафтар 300 мең һумға тиклем (әле - 60 мең), вазифалы кешеләргә - 700 мең (әле 300 меңгә тиклем), юридик шәхестәр өсөн 2 миллионға тиклем (әле 600 мең) ҡалған. Думала билдәләүҙәренсә, былтыр үткәрелгән тикшереүҙәрҙә никотинлы продукцияның 43 проценты һатыуға маркировка талаптарын тейешенсә үтәмәгән хәлдә сығарылған. Шулай уҡ башҡа төрлө закон боҙоуҙар, бигерәк тә мәғариф учреждениеларына яҡын урындарҙа сауҙа итеү осраҡтары асыҡланған. Һәҙәмтәлә был өлкәлә ҡәтғи көйләүҙе талап иткән саралар ҡабул ителде лә инде.

## АҠСАЛАТА ЯРҘАМ

**Президент Владимир Путин Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына бер тапҡыр бирелә торған 80 мең һумлыҡ түләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.**

Был хәҙә дәүләт башлығы 15 ғинуарҙа Рәсәйҙең "Еңеү" ойоштороу комитеты ултырышында белдерҙе. Ветерандарҙан тыш, тыл хеҙмәтсәндәренә һәм блокадалы Ленинградта йәшәүселәргә, концлагерь тотҡондарына һәм Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ПВО объекттарында, диңгеҙ һәм авиация базаларында эшләгән, оборона ҡоролмалары төҙөгән граждандарға 55 мең һум түләнә. Президент шулай уҡ Рәсәй Обороны министрлығының Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың барыһына ла төбәктең, ҡаланың йәки муниципалитеттың почетлы гражданы исемен биреү тураһында башланғысын хупланы.

## ТАШЛАМАЛЫ АВИАБИЛЕТ

**Рәсәй Транспорт министрлығының Рәсәй авиакомпанияларында эске рейстарҙа балалар өсөн авиабилеттарға 50 процент ташлама тураһындағы бойороғо үҙ көсөнә инде.**

Уға ярашлы, авиакомпаниялар оҙатыусы менән осоусы 2 йәштән 12 йәшкә тиклемге Рәсәй гражданлығы булған балаларға ташлама бирергә тейеш. Эске рейстарҙа ике йәшкә тиклемге балаларға бер оҙатыусы менән айырым урынһыҙ билетҡа 100 процент ташлама бирелә. Халыҡ-ара рейстарҙа ташлама 90 процент тәшкил итәсәк. Балалар өсөн авиабилеттарға ташламалар яһау тураһында Рәсәй Президенты Владимир Путин тура бәйләнеш барышында белдергәйне.

12+

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЕТЕШ ЙӘШӘЙЕК!



**Аҡса эшләү, ғаиләһен матди йәһәттән яҡшы тәьмин итеү һәр бер ир-аттың бурысы. Атай-әсәйем бала саҡтан ошо хаҡиҡәтте беҙҙең аңға һеңдереп үҫтерҙе. Атайым, һүҙҙәрен үҙенең эше менән дәлилләп, беҙгә, өс малайға, өлгө күрһәтте: ул гелән ниндәйҙер эш менән булыр ине, бер ҡасан да ҡул ҡаушырып ултырманы. Һөҙөмтә - бала сағыбыҙ етеш тормошта үтте, йыш ҡына сәйәхәт иттек, етмәһә, улар һәр бер балаһын фатир менән тәьмин итте.**

Бындай мөхиттә үҫкән малайҙар, әлбиттә, хәҙер үҙҙәре лә һәр ваҡыт эш өҫтөндә. Минең дә, төп эшемдән тыш, өҫтәмә килем килтергән шөғөлөм бар - ҡатламлы мебель (складная мебель) эшләйем. Унын менән ваҡытым булғанда, илһам килгәндә булышам һәм, әйтергә кәрәк, яратып башҡарам. Һәм бөгөнгө көндә, бәләкәй майҙанлы фатир-студиялар күсемһеҙ милек баҙарында ҙур һорау менән файҙаланған саҡта, әлеге шөғөлөм бик тә актуаль килем сығанағы булып тора. Ҡатламлы өҫтәл, ултырғыс һәм карауат урынды экономиялай, торлаҡты компактлыраҡ итергә мөмкинлек биреүе менән әһәмиәтле, шуға күрә уға һорау ҙур. Шулай уҡ бындай мебель йыш күсеп йөрөүселәр өсөн дә уңайлы - тиҙ генә йыйып алдың да күсеп киттең, бының өсөн үҙеңдең еңел машинаң да ярап ҡала.

Өфө янындағы ауылдарҙың береһендә үҙ йортобоҙҙа йәшәйбеҙ. Йорт янында үҙемдең эшмәкәрлегем өсөн махсус оҫтахана эшләп алдым да, ваҡытым булғанда, шунан сыҡмайым. Эшемә бик ентекле ҡарайым һәм шуға күрә етештереү процесы ла бик үк тиҙ түгел. Заказ ҡабул итеп алғанда уҡ клиенттың ниндәй мебель күрергә теләүен яҙып алам, унан мебель дизайнын проектлайым һәм клиентҡа күрһәтәм. Артабан буласаҡ ултырғыс, өҫтәл йәки карауаттың деталдәрен эшләйем һәм йыя башлайым. Мебель өсөн тик яҡшы сифатлы материал ҡулланам. Минеңсә, күп, ләкин насар мебель эшләгәнсе, берәү, әммә сифатлыны етештереү мөһим. Ниндәй өлкәлә абруй яулау, бейеклеккә күтәрелеү өсөн ауыр, ә бәҫте төшөрөү, кеше араһында ихтирамыңды юғалтыу бик еңел.

Уңыштың сере бөтә эште лә күңелемде биреп башҡарыуҙа, тип уйлайым. Ул ваҡытта эш тә алға бара һәм аҡса ла килә. Бәлки, минең шөғөлөм кемдеңдер күңеленә ятыр һәм өҫтәмә килем сығанағына әйләнер. Барыһы ла үҙебеҙҙең ҡулда. Тырышайыҡ һәм етеш йәшәйек.

**Әлфир ӘҒЗӘМОВ.**
**Өфө районы.**

БЫЛ АЙҘА...

# "ҠЫШ - ҠЫШ ИНДЕ...

## үҙе баш, үҙе хаким"



**Бына бит, ҡыш бауыры оҙон тип бошона инек: ни аралалыр уның ике айы үтеп тә китте, йыл календары буйынса ҡыштың өсөнсө - һуңғы айын башларға торабыҙ, бисмиллаһ! Тик ҡыуанырғамы быға, әллә бошонорғамы...**

Ваҡыт йүгерә генә, тик ҡайҙа ашыға ул - белгән юҡ. Географ, геофизик, астроном һәм башҡа төр фән әһелдәре яҙыуынса, Ер шары "аҙымдарын" ҡыҙыулата бара: быйыл ҡыш ул йүгергән төҫлө лә булып китте хатта: алдағы ике айҙа таң атып өлгөрмәй, ыңғайы бер эңер төшә һалып, күҙ бәйләнеп аптыратты. Ғинуарҙың икенсе яртыһынан ғына көн яҡтыһы бер аҙға булһа ла арта төшкәне һиҙелде: ай башында Өфөлә көн оҙайлығы 7 сәғәт тә 21 минут булһа, 1 февралдә ҡояш яҡтыһы 8 сәғәт 48 минут буйы беҙҙе иркәләйәсәк; ай ахыры 28 февралдә инде көн оҙайлығы 2 сәғәт самаһына артасаҡ! Кешенең биоритмы, кәйеф торошо барыбер ҙә эңер ҡараңғылығына ҡарағанда, ҡояш нурына, көн яҡтыһына нығыраҡ бәйле: әҙәм балаһына йоҡонан тороуҙары, эшкә барыуҙары еңелләшә, бала-саға ла мәктәп һәм баҡса-ясли яғына күндәмләшә төшә.

Әммә был айҙың атамаһын онотоп, иҙерәп китеү ҙә ярамаҫ: шаҡай тип юҡҡа атамаған уны халыҡ. Ҡыштың иң һыуыҡ селләһе, әсе елле мәле лә иҫәпләнә ул. Етмәһә, үҙенән алдағы "ағаһы"на төрттөрөп: "Мин ғинуар урынында булһам, һыйыр мөгөҙөн һындырыр инем", - тип теш ҡайрай тиме әле? Ярай ҙа, үҙе әйтмешләй, көнө ҡыҫҡа. Шулай итеп, был айҙың беҙҙе яҙға бер тотам яҡынлатыуы хаҡына ыжғыр һыуығына ла, ел-бурананына ла түҙергә тура килә. Шағирәбеҙ Айһылыу Ғарифуллина яҙыуынса, "Ҡыш - ҡыш инде, ни тиһәк тә - үҙе баш, үҙе хаким. Зәмһәрир һыуыҡтарынан барыбер йылы таптым!" Ысынлап та, йырҙа йырланғанса, көн торошоноң яманы булмаҫ; булған хәлдә лә үтер ҙә китер, тик ана шул һәр миҙгелдән күңелгә йылы табып, яҡшыға, изгегә өмөт тотоп йәшәүҙә лә түгелме ғүмер асылы? Әле бигерәк тә мөһим был: йыл артынан йыл тыуған һайын, һәр яңы ай башланған һайын, илебеҙгә, йорт-еребеҙгә именлек, тыныслыҡ көҫәйбеҙ, уны тыныбыҙ менән тартып алыр дәрәжәләбеҙ.

Әйткәндәй, был айҙа Махсус хәрби операция башланыуға **(24)** теүәл өс йыл тула. Бөгөн бөтәһе лә - беҙҙең илдә генә түгел, хатта Көнбайышта ла, Украинала ла халыҡ, 2025 йылда бына-бына хәрби конфликтты туҡтатыусы һөйләшеүҙәр башланыр, тип көтә. Бәғзе берәүҙәр был башланғысты әллә бер ҡатлылыҡтан, әллә аңһыҙлыҡтан яңы һайланған АҠШ президенты Дональд Трамп йөҙөндә күрә: йәнәһе, текә холоҡло "ағай" килә лә, бөтәһен дә өгөтләп, килешеү өҫтәле артына ултырта. Эйе, "ултырттылар" инде төп башына унан алдараҡ бер тапҡыр - ҡаршы яҡтар тарафынан бер генә пункты ла үтәлмәгән Минск "килешеүе" тип атала ул. Аҙаҡ Германия менән Францияның ул саҡтағы лидерҙары әйтеп ысҡындырыуҙарынса, "килештереүсе" яҡтар Украинаға армия туплау, иҡтисадын нығытыу һәм был илде баштан-аяҡ ҡоралландырыу өсөн ваҡыт ҡына оторға теләгән. Шуға күрә лә Трамп Украина көрсөгөн туҡтатыр һәм кешелекте өсөнсө донъя һуғышы хәүефенән аралап ҡалыр, тип был кешелә төп ҡотҡарыусыны күрергә теләү дөрөҫмө?

Ысынын ғына әйткәндә, МХО-ның тамамланыу ихтималлығы тураһындағы мәсьәлә бер ниндәй өсөнсө тарафҡа ла, аныҡ ҡына датаға ла хатта бәйле түгел, ә туранан-тура Рәсәйҙең үҙ алдына ҡуйған маҡсаттарына бәйле. Өсөнсө тараф тигәндән, РФ Президенты ярҙамсыһы, Хәүефһеҙлек советының даими ағзаһы Николай Патрушевтың фекеренсә, Украина мәсьәләһе буйынса фәҡәт Рәсәй менән АҠШ араһында ғына һөйләшеүҙәр булыуы мөмкин. "Бер ниндәй Лондон да, Брюссель менән дә һөйләшәһе һүҙ юҡ",- ти ул "Комсомольская правда" гәзитенә интервьюһында. Украинаға килгәндә инде, ти Патрушев, быйылғы йылда был илдең, "ғөмүмән, юҡҡа сығыуы ла ихтимал". Украина көрсөгөн көйләү мәсьәләһе донъяның байтаҡ ҡына лидерҙары һәм сәйәсмәндәрен борсой һәм уларҙың ҡайһы берҙәре (Венгрия менән Словакия премьерҙары Орбан һәм Фицо, мәҫәлән) был өлкәлә арашсылыусы ролен башҡарырға теләк белдерә, ләкин Украина яғы был ярҙамдан баш тарта.

РФ сит ил эштәре министры Сергей Лавров белдереүенсә, Трамп менән һөйләшеүҙәр булған хәлдә лә, Аҡ йорт, шул иҫәптән АҠШ-тың Украиналағы махсус илсеһе Кит Келлог был конфликттың сәбәбенә - тәүсығанағына төшөнөргә тейеш. Һәм, ғөмүмән, һөйләшеүҙәр башланған сүрәттә лә Рәсәй яғынан еңеүгә өлгәшкәнгә тиклем хәрби хәрәкәттәр туҡтатылмауы ихтимал. Билдәле булыуынса, МХО башланғандан алып Украинаның 200-ҙән ашыу торатҡ пункты РФ Ҡоралды Көстәре ҡарамағына күсте. Тик былтырғы йылда ғына ла 4,5 мең кв. км биләмә азат ителде. Бөгөн Рәсәй армияһының хәрәкәт тиҙлеге тәүлегенә 30 кв. км тирәһе. Яңы йылдың тәүге көндәрендә генә лә бер ни-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың Белорет ҡалаһына "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" тигән маҡтаулы исем бирелеүе мөмкин. Был хаҡта хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, Белорет хакимиәтенең тейешле мөрәжәғәте республиканың Дәүләт Йыйылышына ебәрелгән. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, Белорет властарынан килгән мөрәжәғәтте яҡын арала ҡарарға йыйыналар.

✓2024 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан йәшәү сифаты буйынса Стратегик башланғыстар агентлығы рейтингында тәүге ун төбәк иҫәбенә инде. Радий Хәбиров Хөкүмәттә уҙған оператив кәңәшмәлә 2021 йылда республиканың ошо рейтингта - 40-сы, 2022 йылда 25-се урында тороуы, ә 2023 йылда тәүге тапҡыр иң яҡшы егерме төбәк иҫәбенә инеүе тураһында әйтте. Был күрһәткестәр объектив, сөнки рейтинг республика халҡының аноним һорауҙарына яуаптары нигеҙендә төҙөлгән һәм социумдың ысын хәлен сағылдыра, тип билдәләне Радий Хәбиров һәм республика халҡының йәшәү сифатын яҡшыртыу буйынса эште дауам итәбеҙ, тип өҫтәне.

✓Февралдә Дәүләт Думаһы 9-сы кластан һуң йомғаҡлау аттестацияһы ҡағиҙәләрендәге үҙгәрештәрҙе ҡарарға әҙерләнә. Белдереүҙәренсә, әгәр сығарылыш уҡыусыһы техникумда йәки колледжда уҡыуын дауам итергә уйлаһа, рус теленән һәм математиканан ғына имтихан биреп, ике өҫтәмә фән буйынса дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын тапшырмаҫҡа тәҡдим ителә. Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Ростов һәм Төмән өлкәләрендә, Төньяҡ Осетия - Аланияла пилот проекты башлана. Әгәр был тәжрибә һөҙөмтәле булһа, артабан уны тотош илгә таратыу планлаштырыла.

✓Башҡортостан ирекмәндәре пляждарҙы мазуттан таҙартыу өсөн Анапаға юлланды. Делегация 30 активистан тора, улар 2 аҙна бөтә илдән йыйылған ирекмәндәр менән бергә Ҡара диңгеҙ ярын таҙартырға тейеш. "Делегация составында студенттар ҙа, йәштәр сәйәсәте өлкәһе хеҙмәткәрҙәре лә, битараф булмаған граждандар ҙа бар. Кешеләр уҡыу һәм эш процесын туҡтатмаҫ өсөн ваҡыттарын үҙҙәре бүлә. Ошо көндәрҙә делегация өсөн уҡыуҙар ойошторолдо һәм инструктаж үткәрелде", - тип һөйләне республика Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәте етәксеһе Римма Бикмурзина.

✓Йәш эшҡыуар Арыҫлан Байғусҡаров дүрт йыл элек Аҡъяр ауылында "Күстәнәс" икмәкханаһы асҡан. Арыҫлан Хәйбулла районы тормошонда, социаль проекттарҙа һәм хәйриә акцияларында әүҙем ҡатнаша, ауыл халҡы өсөн яңы эш урындары булдыра. 2024 йылдың йәйендә эшҡыуар кафетерий асҡан. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарын үҫтереү муниципаль программаһы сиктәрендә уға кәрәкле ҡорамалдар һатып алыуға бәйле сығымдарҙың бер өлөшө ҡайтарылған.

**✓ *Трамп үҙенең тәүге телмәрендә Америка территорияһына сит илдәрҙән законһыҙ инеүҙе туҡтатырға һәм илдәге миллиондарса мигранттарҙы ҡыуып сығарырға вәғәҙә бирҙе.***



сә тораҡ пункт, шул иҫәптән мөһим оператив әһәмиәткә эйә булған Курахово - Донбастың көньяҡ-көнбайыш өлөшө азат ителде. Был Рәсәй ғәскәрҙәренә Донбасс Республикаһының көнбайыш сигенән ары хәрәкәт итергә мөмкинлек бирә.

РФ оборона министры Андрей Белоусов белдереүенсә, Рәсәй Ҡоралл Көстәре теләһә ниндәй хәлдәргә, шул иҫәптән, яҡындағы ун йыллыҡта Европала НАТО менән хәрби конфликт ихтималлығына ла әҙер булырға тейеш. Бының өсөн иһә яһалма интеллект һәм күп мәғлүмәттәрҙе эшкәртеү, робот техникаһы, мәғлүмәттәрҙең юғары тиҙлекле һәм һаҡлаулы тапшырылышы, квант иҫәптәре һәм коммуникация тармаҡтарының үҫешен тәьмин итеү кеүек мәсьәләләр бик мөһим бурыс булып тора. Шул уҡ ваҡытта оборона министры В.Путиндың ҡушыуы буйынса Пилотһыҙ системалар ғәскәрен булдырыуҙың күҙҙә тотолоуы хаҡында хәбәр итте. Әлеге ваҡытта РФ диңгеҙ Стратегик ядро көстәрендә "Борей-А" "Кенәз Пожарский" яңы һыу аҫты атом кәмәһе проекты буйынса дәүләт һынауҙары булып үтте. Бынан тыш, һауа-космос оборонаһы системаһы мөмкинлектәрен арттырыу маҡсатында ракетаға ҡаршы оборона мәсьәләләрен үтәүсе С-500 зенит-ракета системаһы менән ҡоралланған беренсе полк ойошторолдо. Былтыр, килешеү буйынса, Ҡораллы Көстәр составы 427 меңдән ашыу хәрби хеҙмәткәр менән тулыланды.

Рәсәй Ҡораллы Көстәрендә барған былдай үҫеш, үҙгәреш һәм яңынан-яңы стратегик проекттарҙың барыһы тураһында ла һөйләп-яҙып бөтөү өсөн күп ваҡыт кәрәк булыр ине. Ҡыҫҡаһы, Рәсәй армияһы быуын нығыта, үҫешә, ҡеүәте арта. Был айҙағы иң билдәле һәм ҡаһарманлыҡ сағылышы булған бөтөн халыҡ байрамы - Ватан һаҡсылары көнө **(23)** айҡанлы еңел булмаған, ләкин яуаплы һәм почетлы хеҙмәттә уяу тороусы ил улдарына именлек, иҫәнлек һәм тыныс күк йөҙө теләйек.

Был айҙа тағы ла Рәсәй фәне, Ҡышҡы спорт төрҙәре **(8)** көндәре, Граждандар авиацияһы, Аэрофлот, Стоматолог **(9)** көндәре, Дипломатия хеҙмәткәре **(10)**, Фәндә ҡатын-ҡыҙҙар халыҡ-ара көнө **(11)**, Бөтөн донъя радио **(13)**, Компьютерсылар, Халыҡ-ара китап бүләк итеү көндәре, Бәрәкәт кисе **(13-14)**, Интернационалист яугирҙар, Халыҡ-ара яман шеш менән сирле балалар **(15)** көндәре, РФ Хәрби-Диңгеҙ Флотының разведка **(16)** көнө, Бөтөн донъя мәрәхәмәтлек **(17)**, Тотороҡло туризм **(17)**, РФ Транспорт полицияһы **(18)**, Орнитолог, Диңгеҙ һөтимәрҙәрен һаҡлау **(19)** көндәре, Бөтөн донъя социаль ғәҙеллек **(20)**, Халыҡ-ара туған тел **(21)** көндәре, Енәйәт ҡорбандарын халыҡ-ара яҡлау **(22)**, Ватанды һаҡлаусылар **(23)** көнө, БР Дәүләт флагы **(25, 1992)**, РФ Махсус операция көстәре **(27)** көнө билдәләнә.

**Шаҡайҙа тыуғандар:**

**1 -** прозаик, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Халыҡтар Дуҫлығы ордены кавалеры, Ш.Бабич исемендәге республика йәштәр һәм М.Ҡашғари исемендәге V халыҡ-ара хикәйәләр конкурсы лауреаты **Фәрзәнә Фәтих ҡыҙы Аҡбулатоваға - 65 йәш** (1960).

**2 -** дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1995-2005 йылдарҙа БР мәҙәниәт министры, БР Премьер-министры урынбаҫары, 1, 2, 5-се саҡырылыш БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатовҡа - 65 йәш** (1960).

**3 -** хирург, БДМУ проректоры, кафедра мөдире, медицина фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн" 2-се дәрәжә һәм Салауат Юлаев ордендары кавалеры, Фән һәм техника өлкәһендә БР дәүләт премияһы лауреаты **Мәжит Әхмәт улы Нартайлаҡовҡа - 65 йәш** (1960).

**5 -** дәүләт эшмәкәре, педагог, тел белгесе, педагогика фәндәре кандидаты, 1985-1988 йылдарҙа БР мәғариф министры, БАССР мәктәбенең атҡаҙанған уҡытыусыһы **Сәбилә Ғәйзулла ҡыҙы Сөләймәноваға - 85 йәш** (1940).

**8 -** журналист, "Ватандаш" журналының баш мөхәррире, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты **Рәшиҙә Рәфҡәт ҡыҙы Мәһәҙиеваға - 60 йәш** (1965).

**11 -** мәҙәниәт эшмәкәре, Халыҡ ижады республика үҙәгенең директор урынбаҫары, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Нәфисә Булат ҡыҙы Тулыбаеваға - 60 йәш** (1965).

**20 -** журналист, яҙыусы, Сибай мәғлүмәт үҙәге "Атайсал"гәзитенең баш мөхәррире, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты **Хәйҙәр Ниғәмәт улы Тапаҡовҡа - 70 йәш** (1955).

**20 -** хоккейсы, Өфөләге М. Азаматов исемендәге 3-сө спорт мәктәбе директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған физик культура хеҙмәткәре **Рәмил Ғәләүетдин улы Юлдашевҡа - 60 йәш** (1965).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ДРОНДАР ТЫНҒЫ БИРМӘЙ

**26 ғинуар һәм унан алдағы көндәрҙә (ваҡытынан алда) Беларусь республикаһы президентын һайлауҙар булып үтте. Йәкшәмбе көн ғәмәлдәге президент Александр Лукашенко өсөн 86,82 процент кеше тауыш бирҙе.**

• Беларусь республикаһының Үҙәк һайлау комиссияһы, һайлауҙар ойошҡан рәүештә, берҙәм һәм тыныс шарттарҙа үтте, тип белдерҙе. Лукашенконан башҡа ил президентлығына тағы дүрт кандидат - республиканың Либераль-демократик партияһы етәксеһе Олег Гайдукевич, депутат Анна Канопацкая, коммунистар лидеры Сергей Сыранков, шулай уҡ Хеҙмәт һәм ғәҙеллек партияһы етәксеһе Александр Хижняк дәғүә иткәйне. 1994 йылдан алып ил менән идара итеүсе ғәмәлдәге президент Александр Григорьевич Лукашенко үҙ посын һаҡлап ҡалды һәм бының шулай булыры билдәле ине инде. Кисеүҙә ат алмаштырмайҙар, тигәндәй, Беларусь халҡы дөрөҫ юл һайланы, сөнки бөгөнгө тотороҡһоҙ сәйәси-иҡтисади шарттарҙа үҙ илендә генә түгел, халыҡ-ара даирәләрҙә лә абруй менән файҙаланыусы, уйлап-үлсәп эш итеүсе, иле һәм халҡының тоғро патриоты, тәжрибәле сәйәсмән һәм хужалыҡсыл етәксе булып танылған Лукашенконан башҡа президентты күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Өҫтәүенә, республика халҡы Украина менән ил сиге биләмәләрендә күрше яҡтың ҡорал һәм ғәскәр менән тороуын да белә һәм хәлдең төрлө сценарийға үҙгәреп китеүенән хафалана. 2020 йылда пенсияға китәм, йәштәргә юл бирергә кәрәк, тип вәғәҙәләһә лә, бындай тынысһыҙ ваҡытта Лукашенконың ял итеп ятырға намыҫы етмәҫ ине барыбер.

• 26 ғинуарға ҡарата Махсус хәрби операция яңылыҡтарына килгәндә, 26-һына ҡарай төндә Украина ҡораллы көстәренең Рязангә һәм нефть эшкәртеү заводына һөжүмен дауам итеүе билдәле булды. Урындағы халыҡ шартлауҙар ишетә, нефть заводында янғын сыға. Төбәк губернаторы Павел Малков һауа һөжүменә ҡаршы оборона һәм РЭБ (радиоэлектрон көрәш) көстәренең дошман дронын юҡ итеүе, бәхеткә, бер кемдең дә зыян күрмәүе хаҡында хәбәр итә. РФ Оборона министрлығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, был төн эсендә Рәсәй күгендә 15 пилотһыҙ шартлатҡыс аппараты бәреп төшөрөлгән, шуларҙың һигеҙе - Рязандә, алтауһы - Курск, береһе Белгород өлкәләрендә. Бынан тыш, дошман диңгеҙҙән Ҡырымға һөжүм итә. 26 ғинуар иртәнсәк Ҡара диңгеҙ Флоты көстәре менән Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ-көнбайышында Ҡырым ярымутрауына йүнәлеүсе экипажһыҙ ике катер юҡ ителгән. Элекке кеүек үк, Украина көстәренең маҡсаты - Ҡырым күпере һәм беҙҙең караблдәр. Беҙҙең диңгеҙ пехотаһы егеттәре неонацистарҙы Курск еренән ҡыҫырыҡлай. Рәсәй көстәре хәҙер Никольский хуторы биләмәһендә алыша һәм был ерҙән боевиктарҙы бәреп сығарып, ошо урында позицияһын нығыта. Рәсәй һалдаттары һөйләүенсә, Украина Курск сиге һыҙығына Колумбия наемниктарының сираттағы төркөмөн ташлаған. Яу яланынан дезертирҙар ҡасмаһын өсөн, наемниктар артынан элекке "зэк"тар отряды һәм хатта штурмлаусы төркөм күҙәтә. Башҡа фронттарҙа, мәҫәлән, Днепропетровск өлкәһенә йүнәлеш тотоп, Курахово янында Рәсәй армияһы Украина ғәскәре тылына бәреп инә. Запорожье фронтында һиҙелерлек үҙгәрештәр юҡ, дошман был биләмәлә нигеҙҙә камикадзе-дрондар ҡуллана. Донецк фронтында беҙҙекеләр Ҙур Новоселка ҡасабаһын яуланы, унан тыш, хәҙер Торецк, Часов Яр, Суджа Рәсәй ғәскәрҙәре ҡарамағында. Курск өлкәһенең дүрт тораҡ пункты: Александрия, Леонидово, Рус Поречныйы һәм Кругленькое, шулай уҡ Донбастың Зеленое ауылы дошмандан азат ителгән.

• АҠШ президенты Дональд Трамп ниҙәр менән мәшғүл бөгөн? Известия порталы хәбәр итеүенсә, 26 ғинуарҙа Трамп Рәсәй лидеры Владимир Путин менән тиҙ арала осрашып һөйләшәсәге тураһында тағы бер тапҡыр ҡабатлаған. Инаугурациянан һуң АҠШ президенты Байдендың 78 указын ғәмәлдән сығарғайны һәм үҙе бер нисә указға ҡул ҡуйҙы. Артабан ул АҠШ-тың климат буйынса Париж килешеүенән, Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһынан сығыуы, үлем язаһын ҡайтарыуы, илдә сексуаль әҙселек хәрәкәтен (Рәсәйҙә тыйылған) тыйыуы хаҡында белдерҙе һәм 2021 йылда Капитолий штурмында ҡатнашып, төрмәлә ултырған 1500-ләп кешене ярлыҡаны.

Трамп үҙенең тәүге телмәрендә Америка территорияһына сит илдәрҙән законһыҙ инеүҙе туҡтатырға һәм илдәге миллиондарса мигранттарҙы ҡыуып сығарырға вәғәҙә бирҙе. Күп тә үтмәй, АҠШ-та законһыҙ йәшәүсе меңәрләгән мигрант ҡулға алынып, илдән һөрөлә. Илдә ситтән килгән 40 миллионға яҡын кеше йәшәй, уларҙың 11 миллионы - законһыҙ килгән мигранттар, шуларҙың күпселеге күрше Мексиканан. АҠШ-та законһыҙ йәшәүсе сит ил граждандарын депортациялау тураһындағы указға шулай уҡ Рәсәйҙең дә йөҙләгән гражданы эләккән. Илгә мигранттар килеп тулыуҙа Трамп бынан алдағы президент Джо Байденды ғәйепләй. Ғөмүмән, Трамп төрлө йүнәлештә һәм ҡыҙыу эшмәкәрлек башланы: ул илдәге нефть һәм газ запасын файҙаланып, энергетика реформаһын башлауы, АҠШ-ты етештереүсе сверхдержава һәм яһалма интеллект менән криптовалюта империяһына әүерелдерергә ниәтләүе хаҡында белдерә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Баймаҡ районынан МХО-ла ҡатнашҡан яугир алғы һыҙыҡта иҫ киткес хәлгә тарый. Унның ғүмерен хәрби билет эсендә ятҡан икона ҡотҡарған. Һалдат видеояҙмала кейемендәге пуля эҙен күрһәтә - снаряд кеҫә тәңгәлен тишеп ингән, әммә хәрби билет эсендә ятҡан икона аша үтә алмаған. "Шунан, Хоҙай юҡ, тип әйтегеҙ инде... Бына ошо икона пуляны үткәрмәгән", - тип күрһәтә һалдат видеояҙмала.

✓Әлшәй районында 20 йәшлек егет фажиғәле һәләк булған. Йәштәр тюбингты машинаға бәйләп шыуған. Ниндәйҙер мәлдә водитель ҡапыл тормозға баҫҡан, тюбингтағы егет автомобиль аҫтында ҡалған, тип хәбәр итте хакимиәт башлығы Наил Әбелғужин. "Машиналарға саналар һәм тюбингтар тағып йөрөү хәүефле генә түгел, штраф алыу ихтималлығы ла бар. Шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ: кеше үлеменә килтергән осраҡтарҙа водителдең енәйәт яуаплылығына тарттырылыуы мөмкин", - тип иҫкә төшөрҙө муниципалитет етәксеһе.

✓Педагогия вуздарының иң яҡшы студенттарына исемле стипендиялар тапшырыла. Улар Рәсәйҙең күренекле мәғариф эшмәкәрҙәре А. С. Макаренко, В. А. Сухомлинский, К. Д. Ушинский, Л. С. Выготский һәм Н. М. Карамзин хөрмәтенә булдырылған. Айлыҡ стипендияның күләме - 15 000 һум. Исемле 5 стипендияның һәр береһе өсөн бөтәһе 10-ар кеше һайлап алына. Стипендиялар йыл һайын конкурс нигеҙендә педагогия вуздарының уҡыуҙа, ғилми эшмәкәрлектә һәм йәмәғәт тормошонда уңыштарға өлгәшкән иң яҡшы студенттарына бирелә.

✓Рәсәйҙә ғаиләле студенттарға декрет пособиеһын ун һәм унан күберәк тапҡырға арттырырға тәҡдим ителде. Бындай башланғыс менән Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт министрлығы сығыш яһаны. Атап әйткәндә, пособиены төбәккә ҡарап 74,9 меңдән 235,4 мең һумға тиклем арттырырға һәм уны иҫәпләгәндә стипендияның күләмен түгел, ә МРОТ-ты иҫәпкә алырға тигән тәҡдим индерелде. Закон проектын яҙғы сессияла Дәүләт Думаһына индерергә йыйыналар.

✓Дәүләт Думаһының бер төркөм депутаттары күп балалы ғаиләләр өсөн түләүле юлдарҙан ташламалы хаҡҡа йәки бушлай йөрөргә рөхсәт итеүҙе күҙ уңында тотҡан закон проектын ҡарауға индерҙе. Тәҡдимдең социаль яҡтан әһәмиәтле булыуын нигеҙләп, башланғыс авторҙары "Рәсәй Федерацияһында автомобиль юлдары һәм юл эшмәкәрлеге тураһында" федераль закондың 41-се статьяһында льготалы йәки бушлай йөрөү хоҡуғы билдәләнеүен, шул уҡ ваҡытта ишле ғаиләләр өсөн был мөмкинлектең ғәмәлгә ашырылмауын билдәләй.

**✓ Былтыр беҙ 5 мең тоннанан ашыу тауар балы етештерҙек. Был иһә ил күләменең ундан бер өлөшө тиерлек һәм Волга буйы федераль округының өстән бер өлөшө тиерлек.**



ҠЫҪҠАСА

# ВИРУС ТАРАЛА

**Рәсәйҙә миҙгелле вируслы инфекциялар менән сирләү осраҡтарының артыуы күҙәтелә.** Роспотребнадзор хәбәр итеүенсә, бер аҙнала киҫкен респиратор вируслы инфекциялар менән ауырыусылар уҙған аҙнаға ҡарағанда 12,9 процентҡа күберәк. Башҡортостанда уҙған аҙнала ауырыу йоҡтороуҙың 18 мең осрағы теркәлгән, уларҙың 46 проценты - балалар. Республиканың санитар ведомствоһы мәғлүмәттәренә ярашлы, бер аҙнала сирләү осраҡтары 72,6 процентҡа артҡан. "Ауырыу йоҡтороу буйынса һандарҙы декабрь уртаһындағы һандар менән сағыштырырға мөмкин. Күҙәтеүҙәр күрһәтеүенсә, байрам алды аҙнаһында һәм Яңы йыл байрамдары көндәрендә сирлеләр аҙыраҡ. Ауырыуҙың таралыуына аденовирустар, бокавирустар, риновирустар, коронавирустар сәбәпсе. Бер үк ваҡытта грипп вирустары әүҙемләшә бара", - тип хәбәр итә Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы.

✓ **Башҡортостанда балалар баҡсаһы өсөн түләү артты.** Республика Хөкүмәтенең яңы хаҡтар тураһында ҡарарынан күренеүенсә, иң юғары хаҡ - Өфөлә - бер көнгә 185 һум, был 2024 йылға ҡарағанда 7 һумға ҡиммәтерәк. Икенсе урында - Өфө районы (182 һум). Өсөнсөлә - Стәрлетамаҡ (178 һум). Иң түбән түләү Әбйәлил районында билдәләнгән (138 һум). Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, балалар баҡсаһында түләү күләмен муниципаль берәмек хакимиәттәре билдәләй. Ул Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән билдәләнгән максималь күләмдән юғары була алмай. Башҡортостанда ғаиләләргә балалар баҡсаһы өсөн түләүҙең бер өлөшө компенсациялана. Бер балаға ул - 20 процент, икенсеһенә - 50 процент, өсөнсө һәм унан һуңғы балалар өсөн 70 процент тәшкил итә. Инвалид балаларҙың ата-әсәләре, етем балаларҙың законлы вәкилдәре, шулай уҡ мобилизацияланғандарҙың балалары түләүҙән азат ителә. Аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә 50 процент ташлама бирелә.

✓ **Башҡортостан мәктәптәрендә МХО-ла ҡатнашыусыларҙың балаларын көнөнә ике тапҡыр бушлай ашата башлайҙар.** Хөкүмәттең "Донецк Халыҡ Республикаһы, Луганск Халыҡ Республикаһы, Херсон һәм Запорожье өлкәләре, Украина территорияларында уҙғарылған Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балаларын тәьмин итеү тураһында" ҡарарына тейешле үҙгәрештәр индерелде. Быға тиклем ошо категорияға ҡараған уҡыусыларҙың, нисәнсе сменала уҡыуына ҡарап, көнөнә бер тапҡыр ғына бушлай иртәнге йәки төшкө аш алырға хоҡуғы бар ине. Бынан алдараҡ Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова белдереүенсә, әле Махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың ете меңдән ашыу балаһы балалар баҡсаһына бушлай йөрөй, 10 меңдән күберәк уҡыусы һәм колледж студенты бушлай ҡайнар аш менән тәьмин ителә, 5,5 меңдән ашыу бала ҡала ситендәге лагерҙарҙа ял иткән, алты меңдән ашыуы дөйөм белем биреү учреждениеларында түңәрәктәргә бушлай йөрөй.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШҠОРТ БАЛЫНЫҢ ДАНЫ



**23 ғинуарҙа Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында республикала тәүге "АпиГлобал" халыҡ-ара умартасылар конгресы үтте. Унда Рәсәйҙең 80 төбәгенән һәм 15 илдән умартасылар ҡатнашты.**

Республика Башлығы Радий Хәбиров пленар ултырышта сығыш яһағанда Башҡортостандың умартасылар форумын ойоштороу урыны итеп осраҡлы һайланмауы, беҙҙең "Башҡорт балы"ның бренды күптән республиканың билдәле визит карточкаһына әүерелеүе, күп йылдар инде тауар балы етештереү буйынса илдә беренсе урында тороуыбыҙ тураһында билдәләне. "Әле республикала 12 мең самаһы умартасы эшләй, 275 меңгә яҡын бал ҡорто ғаиләһе иҫәпләнә. Былтыр беҙ 5 мең тоннанан ашыу тауар балы етештерҙек. Был иһә ил күләменең ундан бер өлөшө тиерлек (Рәсәй буйынса 9,3 процент тирәһе) һәм Волга буйы федераль округының өстән бер өлөшө тиерлек (29 процент). Республикала умартасылыҡ тармағын үҫтереү өсөн күп эштәр башҡарыла, 2030 йылға тиклем комплекслы программа ҡабул ителде", - тине республика етәксеһе.

Радий Хәбиров яҡын арала хәл итеүҙе талап иткән биш мәсьәлә тураһында әйтеп үтте. Беренсеһе - сәнәғәт һәм тоҡомло умартасылыҡты үҫтереү. Икенсе бурыс - урта рус бал ҡорто тоҡомоноң башҡорт популяцияһы генотибын һаҡлау. Өсөнсө бурыс - боронғо башҡорт кәсебенә - тумәр-солоҡ умартасылығына ярҙам итеү. Тағы ла бер бурыс - умартасылыҡ продукцияһын һатыу баҙарын киңәйтеү. Иң яҡшы умартасыларыбыҙ етештергән продукция Рәсәйҙә генә түгел, донъя баҙарында ла ҙур һорау менән файҙалана, абруйлы конкурстарҙа даими рәүештә призлар менән бүләкләнә. Бишенсе бурыс - тармаҡ өсөн профессиональ кадрҙар әҙерләү. Бөгөн Башҡорт дәүләт аграр университетында студенттарға "Сәнәғәт умартасылығы" йүнәлеше буйынса белем бирәләр. Ауыл хужалығы колледждарында ла умартасылыҡ буйынса белгестәр әҙерләйҙәр.

Радий Хәбиров шулай уҡ республика умартасыларына яугирҙарға ярҙам күрһәткәндәре өсөн рәхмәт белдерҙе һәм: "Улар гуманитар ылау туплауҙа ҡатнаша, хәрбиҙәргә 5 тоннанан ашыу бал оҙатты. Республикабыҙ умартасыларының күбеһе, уларҙың улдары, ҡулдарына ҡорал тотоп, Тыуған илебеҙҙе һаҡлай", - тине.

# ЭШКӘ УРЫНЛАШҠАНДА...

**Быйыл Башҡортостанда тағы ла 18 яңыртылған кадрҙар үҙәге асыла, тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров телеграм-каналда.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылда Башҡортостан илдең 12 төбәге араһында халыҡ мәшғүллеге үҙәктәрен комплекслы яңыртыуҙың икенсе тулҡынына эләкте. "Был эште 2019 йылда "Демография" милли проекты буйынса башлағайныҡ. Ул ваҡытта беҙҙә ғәҙәти мәшғүллек үҙәктәренән ныҡ айырылып торған тәүге "Работа России" кадрҙар үҙәктәре барлыҡҡа килде. Бында яҡшы, заманса ремонт, фирма стиле, ә иң мөһиме - халыҡты эшкә урынлаштырыуға айырым ҡараш", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Былтыр республикала мәшғүллек үҙәктәрен комплекслы модернизациялау эштәре дауам итте. Бөгөн төбәктә 50 яңыртылған кадрҙар үҙәге иҫәпләнә. 2025 йылда тағы 18-ендә эштәр тамамлана. 2024 йылда мәшғүллек үҙәктәре хеҙмәткәрҙәренең 57 проценты Рәсәй Хеҙмәт министрлығы Бөтә Рәсәй хеҙмәт ғилми-тикшеренеү институтының профилле программалары буйынса уҡып сыҡты".Радий Хәбиров һыҙҙыренсә, яңыртылған кадрҙар үҙәктәре клиенттары хәҙер хеҙмәттәр комплексын алыу мөмкинлегенә эйә. Бурыс - кешенең эш эҙләү өсөн сарыф иткән ваҡытын ҡыҫҡартыу һәм, әлбиттә, эшкә урынлашыу кимәлен күтәреү.

# ТҮЛӘҮҘӘР АРТА

**Рәсәйҙә пенсияларҙы һәм социаль пособиеларҙы 2024 йылғы инфляция кимәленә тиклем, йәғни 9,5 процентҡа өҫтәмә индексациялау раҫланды. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин тейешле ҡарарға ҡул ҡуйған.**

Документҡа ярашлы, 2025 йылдың 1 февраленән өҫтәмә рәүештә 40-тан ашыу социаль пособие, компенсация һәм түләүҙәр арта. Атап әйткәндә, инвалид балаларҙы һәм бала саҡтан беренсе төркөм инвалидтарын ҡарау буйынса түләүҙәр, Әсәлек капиталы, Советтар Союзы Геройҙарына һәм Рәсәй Геройҙарына, радиациянан зыян күргән хәрби хәрәкәттәр ветерандарына һәм инвалид граждандарға айлыҡ аҡсалата түләүҙәр. Шулай уҡ страховка пенсияһына билдәләнгән түләүҙәр һәм бер пенсия коэффициенты хаҡы арттырыла. Февралдә пенсионерҙарға февраль өсөн арттырылған пенсия һәм ғинуар өсөн өҫтәмә аҡса түләнә. Был иһә йәмғеһе 39,3 миллионға яҡын кешенең страховка пенсияһын күтәрергә мөмкинлек бирә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2025 йылдың 1 ғинуарынан страховка пенсияһы, 2024 йылдағы инфляция кимәленә ярашлы, 7,3 процентҡа артты. Ғинуар урталарында Росстат 2024 йылда инфляцияның фактик кимәле тураһында мәғлүмәттәр бирҙе. Шунан һуң страховка пенсияларын инфляцияның фактик кимәленә тиклем индексациялау тураһында ҡарар ҡабул ителде.

# ТЫУҒАН ЯҠТЫ ТАНЫТАБЫҘ

**Башҡорт дәүләт педагогия университетында Рус география йәмғиәте Башҡортостан төбәк бүлексәһе Попечителлек советының сираттағы ултырышы уҙҙы.**

"Беҙҙең бүлексәлә, ысынлап та, ҡайһы саҡта уникаль проекттар тормошҡа ашырыла. Былтыр төбәк география йәмғиәтенең "Боронғо Урал легендалары" телепроекты (грант суммаһы - 3 миллион һум), "Студенттарҙың патриотик квесы" (722 мең һум) кеүек проекттары өсөн республика Башлығы гранттары тапшырылды. Рус география йәмғиәтенең девизы - "Рәсәйҙе яңынан, бергәләп асабыҙ" барыбыҙҙы ла илебеҙгә һәм уның төбәктәренә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырған мөһим проекттарҙы тормошҡа ашырырға дәртләндерә. Мәҫәлән, беҙ ЮНЕСКО эгидаһы аҫтында Рәсәйҙә һәм постсовет киңлегендә беренсе геопарк асыуға өлгәштек. Бөгөн "Янғантау" геопаркы әүҙем үҫешә. Былтыр беҙ "Салауат ере" тарихи-мемориаль паркын астыҡ. Икенсе геопарк - "Торатау" өсөн халыҡ-ара статус алыу өҫтөндә эшләйбеҙ. Бында ҙур эш башҡарылған: визит-үҙәк асылған, туристар өсөн уңайлы һәм хәүефһеҙ баҫҡыс төҙөлгән. Хәҙер Торатау республикала халыҡ күп йөрөгән урынға әүерелде", - тине үҙенең сығышында Радий Хәбиров.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Һунарсылыҡ менән шөғөлләнеү өсөн 2025 йылдың 1 сентябренән һунарсы билетына мотлаҡ имтихан тапшырырға кәрәк. Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итеүенсә, теоретик һорауҙар (һунарҙа хәүефһеҙлек талаптары, һунарға сикләүҙе белеү), шулай уҡ практик эштәр (ҡорал менән хәүефһеҙ эш итеү, урында йүнәлеште билдәләү) бар. "Һунар минимумы белемен тикшереү һунарсылар араһында яуаплылыҡ кимәлен арттырырға мөмкинлек бирә", - тине министр.

✓Башҡортостандың Яҙыусылар союзы рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Айгиз Баймөхәмәтов "Ҡаҙағстандың хөрмәтле яҙыусыһы" исеменә лайыҡ булды. Алматы ҡалаһында Ҡаҙағстан Яҙыусылар союзының 90 йыллығына арналған тантаналы сарала башҡорт яҙыусыһына награда тапшырҙылар. Ҡаҙағстандың Яҙыусылар союзы рәйесе Мереке Кулькенов һүҙҙәренсә, абруйлы исем Ҡаҙағстан рухиәте һәм әҙәбиәте үҫешенә тос өлөш индергән кешеләрҙең ижадын таныу булып тора.

✓Башҡортостандан һанлы программалы идара итеү станоктары операторы эштә буш ваҡытында онлайн-лотерея уйнап, 1 миллион һум аҡса отҡан. Ул 4 йыл ипотека түләй һәм хәҙер, яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, 30 йыллыҡ ипотека кредитының ваҡытын өстән бер өлөшкә ҡыҫҡарта ала, тип хәбәр иттеләр "Милли Лотерея" Рәсәй Финанс министрлығы ойоштороған Бөтә Рәсәй дәүләт лотереялары брендының матбуғат хеҙмәтендә.

✓Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығында 2024 йылда кешеләрҙең һыуҙа һәләк булыуының төп сәбәптәрен атанылар. Беренсе урында - рөхсәт ителмәгән пляждарҙа һыу инеү (35 кеше), икенселә - һыуға ҡолау (20), өсөнсөлә - балаларҙы ҡарауһыҙ ҡалдырыу (9). Дүртенсе урында иһә балыҡ тотҡанда бәхетһеҙ осраҡ һәм боҙ аҫтына төшөп китеү (6-шар) кеүек сәбәптәр. Бәләкәй караптарҙа булған хәл-ваҡиғалар (5) бишенсе урында тора. Һәләк булған 81 кешенең 45-е иҫерек килеш һыуға батҡан. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, былтыр 9 бала батып үлгән.

✓Аҙ килемле граждандар вкладтарҙы отошло шарттарҙа аса ала. Рәсәй Президенты "Банктар һәм банк эшмәкәрлеге тураһында" Федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһында законға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, социаль ярҙам сараларын алыусы граждандар дәүләт хеҙмәттәре порталы ярҙамында бер йылға процент иҫәпләү гарантияланған бер социаль банк вкладын аса ала. Бындай вкладтың максималь күләме - 50 мең һум. Социаль вклад буйынса процент ай һайын түләнә.

*✓ Беҙҙең урындағы туризм ғына түгел, шулай уҡ башҡа төбәктәрҙән һәм илдәрҙән килгән кешеләр республикабыҙ тураһында беләсәк. Сөнки беҙҙә башҡорт балы һәм нефть кенә түгел, оҫталар ҙа күп, - тине Гүзәл Кәримова.*



*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ОҪТАЛАР ҠАЛАҺЫ БУЛАБЫҘМЫ?



**(Башы 1-се биттә).**

Артабан Бөтә донъя оҫталар советының жюри ағзалары баш ҡаланың туристарҙы йәлеп итерлек төрлө урындарында, оҫтаханаларында булып, үҙҙәренең фекерҙәре, кәңәштәре менән уртаҡлашты:

"Был статус ошо йүнәлешкә айырым иғтибар бүлгән, оҫталыҡ үҫешкән ҡалаларға бирелә. Әлбиттә, уны тапшырыу Өфөнөң туристик потенциалын күтәреүгә булышлыҡ итәсәк. Мәҫәлән, Үзбәкстандағы Кокандта, донъя оҫтаханалары ҡалаһы статусы алғандан һуң, һуңғы биш йыл эсендә туристар һаны биш тапҡырға артыуы күҙәтелә - әгәр элек беҙгә 5 мең кеше килһә, хәҙер уларҙың һаны 25 меңдән ашыу. Шул рәүешле, күберәк ҡунаҡханалар, кафе, рестарандар төҙөлә башланы. Шулай уҡ оҫталар араһындағы бәйләнеш нығый, улар үҙҙәренең эшен популярлаштырыу, тәжрибә менән уртаҡлашыу һәм өйрәнеү өсөн Ҡытайға, Һиндостанға һәм донъяның башҡа илдәренә барыу мөмкинлеген ала", - тип белдерҙе Үзбәкстандан Азиз Муртазаев.

Италиянан WCC Европа төбәге вице-президенты, халыҡ-ара жюри ағзаһы, доктор Фатина Сайкали фекеренсә, ойошманың глобаль миссияһы - дөйөм мәҙәни ҡиммәттәрҙе нығытыу. "Бөгөнгө визитҡа тиклем мин Өфө тураһында бер нәмә лә ишетмәгәйнем, әммә хәҙер бөтә дуҫтарыма уның хаҡында һөйләргә тейешмен. Комиссияның маҡсаты - һеҙҙең милли үҙенсәлектәрегеҙҙе һәм традицияларығыҙҙы яҡшыраҡ аңлау", - тип билдәләне ул.

Көньяҡ Африка Республикаһынан WCC Африка төбәге вице-президенты Надя Меер Өфөгә визитынан оҫталыҡ сәнәғәтенең хәле тураһында тулы мәғлүмәт алырға өмөтләнә. "Әгәр баш ҡала донъя оҫталары ҡалаһы статусы алыуына өлгәшһә, был беҙҙең мәҙәниәттәрҙе һәм кешеләрҙе яҡынайтыр. Элегерәк беҙ Көньяҡ Африкалағы БРИКС саммитында Рәсәй делегацияһы менән хеҙмәттәшлек иттек", - ти Надя Меер.

Кувейттан WCC милли берекмәһе ағзаһы, оҫталыҡтар буйынса белгес, Али әл-Нажадтың билдәләүенсә, Өфөнөң ғаризаһы рәсми рәүештә оҫталарҙы хуплауҙы таныу билдәһе. "Был уларҙың үҫешенә, алға китешенә ярҙам. Әгәр ҡала был статусҡа эйә булһа, һеҙҙең оҫталарҙың эше милли һәм халыҡ-ара кимәлдә киңәйәсәк", - тип аңлатты спикер.

"Ағиҙел" предприятиеһы директоры, Өфөнән WCC милли берекмәһе ағзаһы Гүзәл Кәримова фекеренсә, ҡаланың шундай статус алыуы баш ҡалаға һәм бөтә Башҡортостанға бик күп нәмә бирәсәк.

- Беҙҙең урындағы туризм ғына түгел, шулай уҡ башҡа төбәктәрҙән һәм илдәрҙән килгән кешеләр республикабыҙ тураһында беләсәк. Сөнки беҙҙә башҡорт балы һәм нефть кенә түгел, оҫталар ҙа күп, - тине Гүзәл Кәримова.

Әйткәндәй, 1964 йылда барлыҡҡа килгән Бөтә донъя оҫталар советы коммерцияға ҡарамаған ойошма, ул оҫталарға киң танылыуға өлгәшергә булышлыҡ итә. Советтың эшмәкәрлеге Африка, Азия-Тымыҡ океан төбәге, Европа, Латин Америкаһы һәм Төньяҡ Американы үҙ эсенә ала. Ойошманың миссияһы - оҫталарҙың мөмкинлектәрен киңәйтеү һәм донъя оҫталығының бай мираҫын һәм традицион оҫталығын һаҡлау.

**Иван ВАВИЛОВ.**

*ИҒТИБАР!*

# КҮҘ ҺАЛ

**Рәсәйҙә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың ҡаһарманлығына арналған "Бөйөк Еңеүгә 80 йыл" телеграм-каналы булдырылды. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә хәбәр итә.**

Унда фронтта булған хәлдәр һәм тылдағы тормош тураһында мәғлүмәт, алыштар һәм геройҙар тураһында ҡыҙыҡлы факттар, сканер аша үткәрелгән фронт хаттары һәм ветерандарҙың хәтирәләре, шулай уҡ тематик викториналар һәм иҫтәлекле датаға арналған сараларҙың анонстары баҫыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республикала Еңеүҙең 80 йыллығы уңайынан төп тантаналар 2025 йылдың 9 майында үтә. Саралар Совет майҙанында Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов һәйкәленә һәм Еңеү паркының мемориаль комплексында Мәңгелек утҡа сәскәләр һалыуҙан башлана. Тантаналарҙа ветерандар, хәрби-патриотик клубтарҙың тәрбиәләнеүселәре, ирекмәндәр һәм патриотик ойошмаларҙың активистары, махсус хәрби операция яугирҙары ҡатнаша.

Өфөлә Еңеү көнөнөң төп сараһы - Октябрь проспектында хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм хәрби техника парады. Смотрҙа Өфө территориаль гарнизоны хәрбиҙәре, хәрби хәрәкәттәр ветерандары, уҡыу йорттары курсанттары һәм кадеттарының ҡатнашыуы көтөлә. Шулай уҡ "Үлемһеҙ полк" акцияһы һәм тантаналы йыйылыш була. Бынан тыш, иҫтәлекле даталар һәм Бөйөк Ватан һуғышының мөһим ваҡиғалары сиктәрендә саралар ойошторола: 23 февраль - Ватанды һаҡлаусылар көнө, 22 июнь - Хәтер һәм ҡайғы көнө.

*"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ*

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## Сөләймәнова Сәбилә Ғәйзулла ҡыҙы

С.Ғ. Сөләймәнова - партия һәм дәүләт эшмәкәре, педагогия фәндәре кандидаты, юғары мәктәп уҡытыусыһы. Ул 1940 йылдың 5 февралендә Башҡорт АССР-ының Баймаҡ районы Темәс ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған, атаһы Бөйөк Ватан һуғышында һәләк була.

1954 йылда, ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Темәс педагогия училищеһына уҡырға инә. 1956 йылда Белорет педагогия училищеһына күсерелә һәм уны 1958 йылда тик "бишле" билдәләренә тамамлай.

Ике йыл Баймаҡ районының Ишмырҙа ете йыллыҡ мәктәбендә рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. 1960 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. 1965-1966 йылдарҙа Темәс урта мәктәбендә рус теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта. 1966-1970 йылдарҙа Сибай педагогия училищеһында уҡытыусы булып эшләй. Рус теле һәм әҙәбиәтенән башҡа Сәбилә Ғәйзулла ҡыҙы рус телен уҡытыу методикаһы, таҙа яҙыу, тасуири уҡыу тигән предметтарҙы ла алып бара, уҡыусыларҙың педагогик практикаһына етәкселек итә.

1970 йылдан башлап РСФСР Мәғариф министрлығы Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институтының Башҡортостан филиалында ғилми хеҙмәткәр вазифаһын башҡара. Филиалда эшләү осоронда Сәбилә Ғәйзулла ҡыҙы башланғыс кластарҙа рус телен уҡытыу буйынса ике монография сығара, беренсе тапҡыр балалар баҡсаһы, әҙерлек кластары, I - III кластар өсөн программалар, дидактик материалдар, дәреслектәр эшләүсе авторҙар коллективына етәкселек итә.

1981 йылда ул Мәскәүҙә башҡорт мәктәптәрендә рус телен уҡытыу проблемалары буйынса кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай.

1983 йылда КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетына фән һәм уҡыу йорттары бүлеге мөдире урынбаҫары итеп эшкә күсерелә.

1985 йылдың ғинуарында Башҡорт АССР-ының мәғариф министры итеп тәғәйенләнә һәм ошо яуаплы вазифаны 1988 йылға тиклем башҡара, Башҡорт АССР-ының 11-се саҡырылыш Юғары Советы депутаты итеп һайлана.

1988-1991 йылдарҙа Сәбилә Сөләймәнова Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡытыусы булып эшләй. 1991-2001 йылдарҙа БДУ-ның Сибай институтында уҡытыу методикаһы кафедраһында мөдир һәм уҡытыусы була. 2001-2003 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының методик үҙәгендә бүлек етәксеһе вазифаһында эшләй.

Маҡтаулы исемдәре һәм бүләктәре: ВЛКСМ Үҙәк Комитетының Маҡтау грамотаһы (1965); РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы (1976); Башҡорт АССР-ы мәктәбенең атҡаҙанған уҡытыусыһы (1980); Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы (1995).

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә мәктәпкәсә белем биреү өлкәһендә "Йыл педагогы" конкурсының ҡала этабына йомғаҡ яһалды. Конкурста 21-се балалар баҡсаһының музыкаль етәксеһе Зөлфиә Нәсибуллина һәм 194-се балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Нәргизә Ҡәйүпова еңеү яуланы. Өфөнөң Мәғариф идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, еңеүселәр Башҡортостандың баш ҡалаһы исеменән "Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" республика конкурсында ҡатнаша.

✓Аделина Заһиҙуллина Мәскәүҙә ҡатын-ҡыҙҙар араһында Бөтә Рәсәй ярыштарының беренсе этабы чемпионы булды, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Спорт министрлығынан. Турнирҙа көмөш һәм бронза миҙалдарҙы Курск спортсылары Виталина Анащенкова менән Полина Козаева бүлеште. Гран-при серияһының икенсе этабы февраль аҙағында Мәскәү өлкәһенең Химки ҡалаһында ойошторола.

✓Башҡортостан спортсыһы Максим Яншаев, һуҡырҙар спорты биатлоны буйынса Рәсәй кубогының икенсе этабында еңеп, дүртенсе тапҡыр ил чемпионы исемен яуланы. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Максим Яншаев һәм әйҙәүсе спортсы Александр Потапов ирекле стилдә - алтын, спринтта иһә бронза миҙал алды (10 саҡрым).Һуҡырҙар спорты биатлоны кубогының икенсе этабы Ижевскиҙа үтте.

✓Өфөнөң 450 йыллыҡ юбилейы йылында ҡаланың почетлы гражданы, легендар композитор Рим Хәсәнов республиканың баш ҡалаһына арналған яңы йыр (музыкаһы һәм һүҙҙәре) яҙған. "Һулда Ҡариҙел, унда Ағиҙел" йырын Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы Светлана Атанғолова башҡара. Йыр өфөләрҙең күңеленә хуш килде, социаль селтәрҙә популярлыҡ яулай бара. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә уны ярты миллиондан ашыу кеше ҡараны.

✓Өфөнән 62 йәшлек табип мутлашыусылар тоҙағына эләккән һәм аҡсаһыҙ ҡалған. Уға телеграмда билдәһеҙ контакттан "Фотола һин түгелме?" тигән хәбәр һәм фотоны асып ҡарау өсөн һылтанма ебәргәндәр.Ҡыҙыҡһыныуын еңә алмайынса, табип һылтанмаға баҫҡан. Унан һүрәтте ҡарау өсөн ҡушымтаны күсереп алыуҙарын һорағандар. Һөҙөмтәлә мутлашыусылар уның банк иҫәбенә инеү мөмкинлегенә эйә булған һәм тиҙ түләүҙәр системаһы аша бөтә аҡсаһын билдәһеҙ иҫәпкә күсергән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Алғы һыҙыҡта Ринатҡа уҡ атыу оҫталығы үҙенең һәм хеҙмәттәштәренең ғүмерен ҡотҡарырға ярҙам итә. Бер заданиела ул дошман квадрокоптерын уҡ менән атып төшөрә.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Һаралйын, урман тәкәһе**
**(Бекас)**



Барҡылдаҡтан ҙурыраҡ, оҙон тура суҡышлы сәпсәү. Ҡорһағы аҡ, үҙе көрән-ерән төҫтә, арҡаһында буй һыҙаттар бар. Елкәһе ҡара.

"Жвяк" тип шым ғына тауышланып осоп китә. Ҡош туйы мәлендә ҡойроғонон ҡаурыйҙары менән һарыҡ баҡырған тауыштар сығарып оса, осоуы үҙе бер тамаша: йә атылып өҫкә менә, түңәрәктәр яһай. Яҙғы төндәрҙә уның ошо тауышын урман эсендәге һаҙлыҡтарҙа йыш ишетергә була. Шулай уҡ түңгәккә баҫып, йә ағасҡа, йә ергә ултырып та һайрай: "тек-тек-тек", "теку-теку-теку".

Беҙҙең материктың байтаҡ өлөшөндә һәм Төньяҡ Американың ҙур ғына өлөшөндә йәшәй.

Урман, шулай уҡ ҡамыш менән ҡапланмаған ҡуйы үләнле һаҙлыҡтарҙы үҙ итә. Еүеш яландарҙа, йылға-күл ярҙарында оя ҡора. Ағиҙел буйы, Тиҙ Танып, Дим, Бәләбәй ҡалҡыулығы һаҙлыҡтарында йыш осрай. Дала һәм урманлы дала өҫтөнлөк иткән райондарҙа күренгәне юҡ. Урал аръяғында Урал һәм Уй йылғалары башланған ерҙәрҙә, Әбйәлил, Учалы райондары күлдәрендә оя ҡороп йәшәй. Беҙҙең ғалимдар һаралйынды шулай уҡ Саҡмағош районының Чарлаҡ күлендә, тағы ла Кушнарен, Учалы, Өфө райондарында теркәгән.

Апрель башында осоп ҡайта. Пар яһайҙар, әммә бөпкә сығарыу - инә ҡоштоң иңендә. Ояһын ҡыуаҡлыҡтар араһында йәшерен ҡора, аяҡ аҫтынан ҡапыл осоп киткән ҡош шул һаралйын үҙе инде. Кеше ояһы тирәһенән киткәнсе бик борсолоп, тауышланып осоп йөрөй.

4 йомортҡа һалып баҫа. Бөпкәләр июндең башында сыға. Ата ҡош инә ҡош менән бер рәттән бөпкәләрен эйәртеп йөрөй, ашата. Өлкән ҡоштар йәй уртаһында йәнөн ҡоя, шуға ла йәшерен йәшәү рәүеше алып бара. Өс аҙналыҡ ҡоштар осорға һәләтле. Йылы яҡтарға йәй аҙағында, көҙ башында осалар. Туҡталып барған ерҙәрендә туптарға тупланалар. Ҡайһы берҙәре ер тыңғансы йылы яҡҡа ҡуҙғалмай. Беҙҙең континенттың йылы киңлектәрендә һәм Африкала ҡышлайҙар.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# РИНАТТЫҢ ДАНЛЫ ЯУ ЮЛЫ

**Төньяҡ амурҙары, Шайморатов вариҫтары… Был һүҙҙәр илебеҙҙә һәм унан ситтә йәшәгән һәр кемгә таныш. 1812 йылғы Ватан һәм Бөйөк Ватан һуғышында даны бөтә донъяға таралған башҡорт атлыларының шанлы яу юлын бөгөн Махсус хәрби операция зонаһында хеҙмәт иткән яҡташтарыбыҙ дауам итә. Тап шундай һалдаттарҙың береһе - А. Доставалов исемендәге ирекле батальондың штурм ротаһы командиры, депутат, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы ағзаһы Ринат ҠОЛТОМАНОВ.**



Ринат Ҡолтомановты республикабыҙҙа күптәр "Томан" позывнойлы хәрби булараҡ белә. Ул оҙаҡ йылдар башҡорт ОМОН-ында һәм Ҡаҙандағы СОБР-ҙа хеҙмәт итә, хаҡлы ялға сыҡҡас, Стәрлетамаҡта хәрби-патриотик берекмәлә йәштәрҙе хәрби эшкә өйрәтә, Ишембай районы хакимиәтенең спорт бүлеген етәкләй. Махсус операция башланғас, шунда уҡ хәрби хеҙмәтен дауам итергә ҡарар ҡыла. Ринат тәүге башҡорт батальондарының береһе составында алғы һыҙыҡҡа юллана.

-Мин бөтә киҫкен шарттарға әҙер инем һәм Махсус хәрби операция зонаһында нимә көткәнен аңлағайным. Юғары физик әҙерлек мине бер нисә тапҡыр үлемдән ҡотҡарҙы. Бынан тыш, алғы һыҙыҡта айыҡ аҡыл һәм тәртип мөһим. Рота командиры итеп тәғәйенләнгәс, иң тәүҙә эште һалдаттар араһында тәртип урынлаштырыуҙан башланым, - ти Ринат.

Тәүге көндәрҙә уҡ Ринат Ҡолтоманов етәкселегендәге взвод ут аҫтына эләгә. "Томан"дың грамоталы эш итеүе һөҙөмтәһендә шәхси состав бер юғалтыуһыҙ хәрби заданиенан сыға.

- Запорожье йүнәлешендә бер посадкаға оборонаға ҡуйҙылар. Әҙерләнеп, окоп ҡаҙа башлағас, беҙҙең позициялар өҫтөнән 2-3 дрон осоп үтте. Һөжүм итмәйҙәр, шартлаҡыс та ташламайҙар. Баҡтиһәң, Украина нацистары беҙҙең ҡайҙа урынлашҡанды һағалап торған. Икенсе көндө беҙҙең посадкаға снарядтар яуа башланы. Был ҙур юғалтыуҙарға килтерәсәген аңлаһам һәм егеттәргә техника менән бергә артҡа сигенергә ҡуштым. Ә үҙем позицияла ҡалдым. Бәхеткә күрә, ошо ваҡытта Донбасс отряды менән осрашыу насип булды. Улар беҙгә ярҙам күрһәтте. Минең Башҡортостандан икәнемде белгәс, шунда уҡ командирҙарына алып киттеләр. Ул беҙҙең яҡташыбыҙ булып сыҡты, матур итеп ҡаршы алды. Берләшеп, ҡатмарлы заданиеларҙы бергәләп үтәнек, һуңынан беҙҙең взводты көлгә әйләндерергә маташҡан дошманға яуап ҡайтарҙыҡ, - тип хәтерләй тәүге яу көндәрен Ринат Ҡолтоманов.

Алғы һыҙыҡта Ринатҡа уҡ атыу оҫталығы үҙенең һәм хеҙмәттәштәренең ғүмерен ҡотҡарырға ярҙам итә. Бер заданиела ул дошман квадрокоптерын уҡ менән атып төшөрә.

- 2022 йылда квадрокоптерҙар улай уҡ юғары технологиялы түгел ине. Бер оскос беҙгә яҡынлай башлағайны, мин уны уҡ менән атып төшөрҙөм. Көнбайыш каналдарында, МХО-ла, башҡорт уҡсылары һуғыша, тигән репортаждар таралды. Был тарих хаҡында хатта Ҡытай телеканалдары ла һөйләне. Был мәғлүмәт тулҡыны Рәсәй һалдаттарының Махсус хәрби операция бурыстарын үтәү өсөн барлыҡ алымдарҙы һәм бөтә көсөн ҡулланыуын тағы бер тапҡыр раҫланы, - ти Ринат.

"Томан"дың фекеренсә, бөгөн енеүгә ынтылыш илебеҙҙең һәр гражданының күнелендә булырға тейеш.

- Барыбыҙға ла билдәле, хәрби хәрәкәттәр "таҫма" аръяғында ғына бармай, дошман интернет селтәрҙәре аша һәр кешенең аңына үтеп инергә маташа. Был мәғлүмәти-психологик һуғыш илебеҙҙе эстән емереү өсөн алып барыла. Хатта республикабыҙҙағы эске сәйәсәтте тотороҡһоҙландырырға маташыу ҙа ошонан килә. Мин мәғлүмәти баҫымға ҡаршы тороу, берҙәмлекте, енеүгә ышанысты нығытыу өсөн социаль селтәрҙә видеояҙмаларым менән уртаҡлашам. Был үҙемдең дә, һалдаттарҙың да рухын күтәрә.

Хәрби хәрәкәттәр барышында "Томан" яралы иптәшен ҡотҡарыуы менән дә дан ала. Ринаттың әйтеүенсә, башҡорт яугирҙары ҡыйыулығы, ныҡлығы менән айырылып тора.

- Башҡорт яугирҙары иң киткес батырлыҡ күрһәтә. Улар ата-бабалары, милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың, Рәсәй Геройы Миңлеғәле Шайморатовтың иҫтәлегенә лайыҡлы. Окоптарҙа хеҙмәттәштәр эс серҙәре менән уртаҡлашҡанда, алдынғы позицияларҙа бергә задание үтәгәндә ысын дуҫтарға әйләнә. Улар ныҡ берҙәм. Тап шундай егеттәр бөгөн Ватан һағында тора.

Махсус операция барышында хәрби заданиеларҙа күрһәткән ҡыйыулығы һәм батырлығы өсөн Ринат Ҡолтоманов генерал Шайморатов, Батырлыҡ ордендары, "Ҡаһарманлыҡ өсөн" һәм "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" миҙалдары менән бүләкләнгән.

- Яҡын киләсәктә Еңеү беҙҙеке булыр тип ышанам. Беҙ барыбыҙ ҙа баш командующий - илебеҙ Президенты янында берләшергә тейешбеҙ. Бөгөн халыҡтар татыулығы мөһим, - ти "Томан".

Әңгәмә барышында Ринат Ҡолтоманов Ишембайға "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" исеме бирелеүенә ҡарата фекерен белдерҙе.

- Ул беҙҙең рухты күтәрә, тыуған ерең, илең мәнфәғәтенә тағы ла ныҡыраҡ эшләргә дәртләндерә. Президент ҡарары - тарихи ҡаһарманлыҡҡа баһа, әммә ул киләсәккә йүнәлтелгән. Йәш быуын ата-бабаларыбыҙҙың батырлығына лайыҡлы итеп йәшәргә, тинләшергә тейеш, - ти Ринат.

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**
**"Башинформ".**

## ҠАЙҒЫ ЛА БАР…

**Башҡорт журналистикаһы ҙур юғалтыу кисерҙе. Махсус хәрби операция барышында хәрби задание үтәгәндә журналист, Бөрө районының "Победа" гәзите баш мөхәррире Винер Йыһаншин һәләк булған.**

Винер Йыһаншин 2024 йылдың октябрендә Оборона министрлығы менән контракт төҙөнө. МХО-ға юлланыр алдынан журналист "Башинформ" хәбәрсеһенә, Ватанды һаҡлау - һәр ир-егеттең бурысы, тигәйне. "Был минең конституцион һәм кешелек бурысым. Бөгөн был нацистар Курскиға баҫып инде, иртәгә минең өйгә килеүҙәре бар, беҙгә уларҙы ҡыуып сығарырға кәрәк. Бөрө егеттәренә, МХО хәрбиҙәренә күп ярҙам иттем, гуманитар ярҙам йыйҙым. Шулай уҡ гәзитебеҙҙәге "Патриот" рубрикаһында ҡаһарман яугирҙар, ирекмәндәр тураһында күп яҙҙым. Ир-егеттең һүҙҙәре уның эштәренә тап килергә тейеш", - тигәйне Винер Фларис улы.

Винер Йыһаншин 1964 йылдың 1 ғинуарында Борай районының Ғүмәр ауылында тыуған. 1990 йылда Ҡарағанда дәүләт университетының "Филолог. Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" белгеслеге буйынса уҡып сыға. 1997 йылда Бөрө районының "Победа" гәзите редакцияһына хәбәрсе булып эшкә килә. 2016 йылда "Победа" гәзитенең баш мөхәррире итеп тәғәйенләнә. 2005 йылдан Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы Журналистар союзы ағзаһы.

## ХАТТАР ҠЫУАНДЫРА

**"Хан" позывнойлы МХО яугиры Баймаҡ районынан мәктәп уҡыусыһына көтөлмәгән бүләк ебәргән. Был хаҡта район хакимиәте хәбәр итә.**

Күсей ауылынан 6-сы класс уҡыусыһы Асия Игебаева МХО зонаһында хеҙмәт итеүсе яҡташтарына хат яҙған. Мәктәп уҡыусыһының хаты "Хан" позывнойлы һалдаттың ҡулына барып эләгә. Алтынсы класс уҡыусыһының ихлас теләктәшлек һүҙҙәре хәрби кешегә бик ныҡ тәьҫир итә һәм ул ҡыҙға рәхмәт билдәһе итеп бүләк ебәрергә ҡарар ҡыла."Был ваҡиға беҙҙең һалдаттар өсөн ярҙамдың ни тиклем мөһим булыуын тағы бер тапҡыр раҫланы. Берҙәмлек, халыҡ ярҙамы тойғоһо яугирҙар өсөн көслө этәргес булып тора", - тип хәбәр иттеләр Баймаҡ районы хакимиәтенән. Хакимиәттә шулай уҡ гуманитар ярҙам йыйыуҙы дауам итеүҙәре хаҡында иҫкәрттеләр. Посылкалар М.Шайморатов исемендәге штабта ҡабул итеlә, ул киләһе адрес буйынса урынлашҡан: Баймаҡ ҡалаһы, Әлибаев урамы, 53-сө йорт.

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Генерал Перовский үҙенең ҡул аҫтындағылар менән мөнәсәбәттәрендә үҙен уларҙан шул тиклем йыраҡ тота, хеҙмәттән тыш ваҡытта уға бер кем дә бер нәмә лә һөйләргә баҙнат итмәй. Ғорур һәм яҡынайып булмай торған етәксе булараҡ, ул ниндәйҙер бер айырым хөрмәт һәм башҡаларҙың үҙенә буйһоноусанлығын ҡаҙана, был уның шәхесен ололап, изгеләштереп ҡарауға тиклем барып етә.

Перовскийға буйһонған генералдар губернатор ғали йәнәптәренең ниндәйерәк кәйефтә булыуын уның иң яҡын хеҙмәтселәренән ул үҙ бүлмәһенән сыҡмаҫтан алда уҡ белешә торғайнылар. Уның камердинеры Николай Татаринов, һуңынан дворян йыйылышы экономы, үҙе менән булған бер ваҡиға хаҡында былай тип һөйләгән: бер көндә ул хужаһының кейемдәрен алып биреп тороу өсөн генерал кабинетына инә. Перовский уны, битенә резеда помадаһын һөрткән өсөн, инәһе-атаһынан һалдырып, иң ҡаты рус һүҙҙәре менән ҡаршылай. Перовский үҙе бер ҡасан да хушбуй ҙа, помада ла ҡулланмаған. Перовский үҙенең адъютанттарына, айырым поручениелар буйынса чиновниктарына, хатта генералдарына, әгәр улар уға яҡын кешеләр иҫәбендә булһа, һәр саҡта ла һин тип өндәшкән, уларҙы дөйөм ябай рус һүгенеү һүҙҙәре менән әрләгән. Улар барыһы ла, губернаторҙың ҡыҙыу холҡон белгәнгә күрә, быны түҙемле рәүештә үткәреп ебәргән, әгәр кем дә кем, асыуы килеп, уға ҡаршы әйтһә, ул кеше уның күҙ алдынан юғалырға тейеш икәнлеге хаҡында туранантура бойороҡ алыр ине.

Перовскийҙың улы Алексейға ла ошондай уҡ нәҫелдән килгән холоҡ хас була, ул артиллерия училищеһында уҡыған сағында директорға ҡарата тупаҫ һәм әҙәпһеҙ мөнәсәбәттә булған өсөн, рядовой һалдат итеп, Кавказға һөргөнгә ебәрелә. Алексейҙың миңә шәхсән үҙе һөйләгәне иҫемдә: ниндәйҙер бер әҙәпһеҙлеге өсөн училищела уны нәҙек сыбыҡ менән шундай рәхимһеҙ яралар, һөҙөмтәлә уны дауаханаға һалалар. Ул атаһына ауырып китеүе хаҡында яҙа, унығы килеү менән үк улынан ниндәй сир менән ауырыуы хаҡында һорай. Йәш Перовский, ни булғанын йәшерергә теләп, ниндәйҙер бер сир хаҡында әйтә. "Алдашаһың! - ти уға атаһы. - Артыңды асып күрһәт!" Ҡарай ҙа әйтә: "Бер ни ҙә булмаған, тейешенсә кәрәгенде алғанның". Һуңынан йәш Перовский офицер чины алғансы хеҙмәт итә, әммә асыулы сағында хеҙмәтсеһен үлтергән өсөн һалдатлыҡҡа ебәрелә.

Ашлыҡ сәсеү өсөн ер эшкәртеүҙе индереү бер Ырымбур губернаһында ғына түгел, Пермда ла көслө ризаһыҙлыҡ тыуҙыра, ә ундағы губерна начальствоһы халыҡты тынысландырыу сараларын күрмәй. Тиҙ арала һәм тәүәккәл саралар күреү зарурлығы хаҡында Перовский эске эштәр министрлығына тәҡдимдәр яҙа, шуның һөҙөмтәһендә батша ғали йәнәптәре был эште уның ҡарамағына тапшырыу хаҡында бойороҡ бирә.

Перовский унда ла халыҡты тынысландырыуға өлгәшә, Ырымбурҙан Пермға курьер итеп ебәрелгән казак урядниктары һөйләүенсә, ундағы халыҡ хәрби губернатор сығарған ҡарарҙар һәм күрһәтмәләр менән бик ҡәнәғәт булып, шәхсән уның үҙен күрергә шул тиклем ныҡ теләй, хатта ҡарттар ҙа, ат ҡыуыусы сифатында нарочныйҙарҙы алып барған арбаларҙың кузлаларына ултырып бара. Урындағы властар Перовский исеме алдында ҡалтырап тора, улар үҙҙәренең гонаһтары өсөн бик хәүефләнә.

Перовскийҙың төбәк менән тәүге идаралығы ваҡытында ҡырғыҙҙар (ҡаҙаҡтар. - **Тәрж. иҫк.**), Урал йылғаһы буйындағы казак станицаларына йыш ҡына һөжүм итеп, уларҙың малдарын ҡыуып алып китә. Уларҙың иң йылғырҙары Һаҡмар йылғаһы ашаһындағы башҡорт ауылдарына тиклем барып етә. Линияның бик ҙур территорияны биләүе һәм унда йәшәүсе халыҡтың аҙ булыуы арҡаһында казактар ҡырғыҙҙарҙың барса үтеп инеү урындарын билдәләй алмай, ә былары, борон-борондан ошонда йәшәгәнлектән, ҡыуып алып кителгән малдары менән арғы яҡҡа сығып була торған йылға кисеүҙәрен һәйбәт белә, шулай уҡ үҙҙәренең шайкаларының рус ҡүҙенә салынмаған йәшеренеп ҡалыу урындары ла була.

Ошондай осраҡтарҙа ғәйепләләргә яза биреү маҡсатында далаларға казактарҙың хәрби отрядтары ебәрелә, ҡайһы саҡта уларға артиллерия бирелә һәм хатта аттарға һыбай ултыртылған пехота ла ҡушыла. Һуңғылары бик һирәк осраҡтарҙа, барымтасылар шайкаһы башында үҙенең ҡыйыулығы менән дан тотҡан һәм халыҡ хөрмәтенә лайыҡ булған, далала киң билдәле батыр торғанда ғына ебәрелә. Бындай осраҡтарҙа ҡырғыҙҙар шайкаһындағы барымтасылар һаны 2 - 3 мең кешегә тиклем етә. Уларҙың бәләкәйерәк отрядтары линия аша башҡорттарҙың да малдарын ҡыуып алып китһә, батырҙар етәкләгән ҙур шайкалар, бер-береһенә ҡарата шәхси үсле булып, дошманлашҡан ырыуҙарҙың күрһәтеүе буйынса, йә иһә рус хөкүмәтенә тоғро ҡалған үҙ ҡырғыҙҙарын да талай.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# ӨФӨ-II ҠАЛАСЫҒЫНА - 1500 ЙЫЛ



**Инде нисәмә йылдарға һуҙылған тикшеренеүҙәр раҫлаһа ла, Урта быуаттарға ҡараған Башҡорт (Өфө-II ҡаласығы) ҡалаһының йәше 1500 йыл менән билдәләнеүе, уның ысынлап булыу-булмауы ҡайһы бер тарихсыларҙа шик тыуҙыра һәм һаман да бәхәстәргә нигеҙ булып тора. Ләкин гәрәп һәм Европа авторҙары хеҙмәттәрендә һәм карталарында билдәләнгән Башгирт, Башкерти ҡалаларының булыуын бер кем дә инҡар итә алмай. Беҙҙең гәзит биттәрендә Өфө-II ҡаласығы тарихы тураһында күп яҙылды. Әммә ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тиҙәр. Шул ҡараштан сығып, түбәндә Өфө-II ҡаласығы тураһында тарихсы Салауат Хәмиҙуллиндың ошо тема буйынса аныҡ мәғлүмәттәр менән дөйөмләштерелгән яҙмаларынан өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.**

### Кем тәүге тикшереүсе?

Өфө-II ҡаласығын тәү тапҡыр 1956 йылда ошо территорияға беренсе шурфтар һалыусы Петр Ищериков асҡан, тип иҫәпләнә. Пробалы ҡаҙыныу эштәрендә ул ваҡытта әле генә Пермь университетын тамамлап ҡайтҡан йәш ғалим Нияз Мәжитов та ҡатнаша. Ул үҙенең йондоҙло сәғәтен 50 йыл көтә һәм көтөп ала - тап ярты быуаттан һуң ғына Зәки Вәлиди һәм Пушкин урамындағы кварталдарҙы реконструкциялау башлана. Тап Н. Мәжитов, Башҡорт дәүләт университетының профессоры һәм академигы, тәүгеләрҙән булып иртә мәҙәни ҡатламдар V быуат менән билдәләнә, тип белдерә, йәғни Өфө ярымутрауы территорияһындағы биләмә 1500 йыл самаһы элек барлыҡҡа килгәнлеген бихисап сығанаҡтар һәм документтар, археологик табыштар менән раҫлай. Бигерәк тә Мәскәү белгестәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Евразия яландарының урта быуат археологияһы төркөмө мөдире Игорь Кызласовтың эксперт билдәләмәһе баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә булды: "Монументаллеге һәм туктауһыҙ йәшәү ваҡыты буйынса ҡаласыҡтың бөтөн Көнсығыш Европала тиңе юҡ", - тине ул.

**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

Фронт командованиеһы Бранденбургты штурмлау өсөн өҫтәмә көстәр бүлә - 77-се уҡсы корпустың 260-сы дивизияһы һәм ике артиллерия бригадаһы һөжүм итеүселәргә ярҙамға килә. Уларҙың командирҙары, көнәшләшеп алып, штурм планын төҙөй. Бранденбургтың көнсығыш өлөшөн дошмандан 260-сы уҡсы дивизияһы таҙартһа, көнбайыш яғында 16-сы гв. атлы дивизияһы алышҡа инә. Немецтарҙың көслө ҡаршылыҡ күрһәтеүенә ҡарамаҫтан, совет яугирҙары берҙәм һәм ҡеүәтле һөжүм һөҙөмтәһендә 1 майҙа Бранденбургты ала. Ҡала ҡырыйындағы урамдарҙа ла, һәм уны штурмлағандағы алыштарҙа 16-сы гвардия атлы дивизияһы тарафынан дошмандың 300-ҙән артыҡ һалдат һәм офицеры, 6 орудиеһы, 14 пулеметы юҡ ителә. 30 төҙөк самолет, артиллерия батареяһы, 16 зенит установкаһы, 124 автомашина, төрлө хәрби мөлкәт менән тулы складтар ҡулға төшөрөлә. 310 һалдат һәм офицер әсиргә алына. 16-сы гв. атлы дивизияһының юғалтыуҙары: 11 кеше һәләк була, 36 кеше яралана. Фаустпатрондар тейеп, бер Т-34 танкы яндырыла.

2 майҙа 16-сы гв. атлы дивизияһына Бранденбургтан 40 саҡрым төньяҡтараҡ урынлашҡан Премниц ҡалаһын алыу бурысы ҡуйыла. 62-се гв. атлы полкы Премницҡа яҡынлаша. Разведка ҡалала шартлатҡыс матдәләр заводы булыуы, уны немецтар шартлатырға әҙерләүе хаҡында хәбәр итә. Шулай уҡ химия заводы һәм текстиль фабрикаһы цехтарына миналар ҡуйып ҡалдырыла. Яугирҙар тәүҙә заводтарҙы шартлатыу өсөн һуҙылған сымдарҙы табып, киҫеп өҙә. Шунан һуң реактив артиллерия залпы яңғырай. Эскадрондар, көслө "ура" тауыштары аҫтында немец позицияларының тылынан атакаға ташлана. Фолькештурмсылар, паникаға бирелеп, ҡасып бөтә, ә өйҙәргә аҡ флагтар эленә. Химия заводында эшләгән рус кешеләре күрһәтеүе буйынса барса инженер-техник персонал, лабораториялар һәм техник документация һаҡ аҫтына алына. Шул уҡ көндә 60-сы гв. атлы полкы, ҡыҫҡа ғына бәрелештән һуң, Дюберитц тораҡ пунктын ала. Премниц һәм Дюберитц өсөн алыштар барышында дошман ҙур ғына юғалтыуҙарға дусар була: уның 400-гә яҡын һалдаты һәм офицеры һәләк була, 23 кеше әсиргә төшә. Шартлатҡыс матдәләр заводынан һәм текстиль фабрикаһынан башҡа, 136 автомашина, 160 тимер юл вагоны трофейға алына. 5 майҙа дивизия оборонанан сығарыла һәм Дюберитц-Притцербе районында туплана.

Корпустың 14-се һәм 15-се гв. атлы дивизиялары апрель аҙаҡтарында - май баштарында Ратенов ҡалаһы өсөн алыштарҙа ҡатнаша. 3 майҙа, артәҙерлектән һуң, ошо дивизияларҙың полктары Ратеновтың көнбайыш кварталдарын штурмлай. Алыш бик көсөргәнешле була. Иң алда, орудиелар һәм танкылар утына ышыҡланып, штурмлау төркөмдәре алыша, улар артынан - штурмлаусыларға булышлыҡ итеүселәр, өсөнсө эшелонда "тарап сығыу" һәм билгеләгән рубеждарҙа нығыныу төркөмө бара. 3 майҙа, ҡараңғы төшөүгә, 14-се һәм 15-се гв. атлы дивизиялары Ратенов ҡалаһы янындағы ҡасабаларҙа ҡаршылыҡ күрһәткән дошман көстәрен тар-мар итә. Немецтарҙың аҙ һанлы төркөмдәре Хафель йылғаһы аша сығып ҡасып өлгөрһә лә, улар икенсе ярҙа тулыһынса юҡ ителә.

7-се гв. атлы корпусы командование ҡуйған хәрби бурысты уңышлы үтәй: Хафель йылғаһы ярҙарына сыға һәм Ратенов-Мегелин-Премниц рубежында оборонаға күсә. 6 майҙа корпус частары үҙҙәренең боевой тәртиптәрен ҡалдыра һәм, фронт резервына сығарылып, тупланыу урындары итеп билдәләнгән Ратенов, Премниц, Неннхаузен районларына табан йүнәлә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Беҙҙең күпселек проблемаларыбыҙ тарихыбыҙҙы белмәүҙән, үткәнебеҙгә әһәмиәт бирмәүҙән, тарихтағы хаталарыбыҙҙан һабаҡ алмауҙан килә. Ҡараңғыла һәрмәнәбеҙ ҙә, утыбыҙҙы һүндерергә тырышыусыларҙы ғәйепләп әрләйбеҙ.*

**Яҙыусы, шағир һәм журналист, тиҫтәнән ашыу шиғыр, проза һәм публицистика китабы авторы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай 1960 йылдың 29 ғинуарында Баймаҡ районының Буранбай ауылында тыуған. 1985 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлағандан һуң, ул төрлө осорҙа Баймаҡ районының "Октябрь байрағы", Өфө ҡалаһының "Киске Өфө" гәзиттәрендә, "Ағиҙел", "Шоңҡар" журналдарында, Башҡортостан радиоһында һәм телевидениеһында эшләй. Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай - тәрән фекерләүгә, бай тематикалы әҫәрҙәре, көтөлмәгән асыштары һәм һүҙ әйтә белеүе менән үҙенсәлекле әҙип. 65 йәше тулыу айҡанлы ҡәләм оҫтаһы менән ҡорған әңгәмәлә уның ижадына төрлө яҡлап байҡау яһаныҡ.**

# ЯҠТЫЛЫҠ СЫҒАНАҒЫБЫҘ -

**Әхмәр, һин - шағир, прозаик һәм публицист булараҡ киң билдәле шәхес. Белеүемсә, бик ҡыҫҡа ғына ваҡыт колхозда эшләп алғас, хеҙмәт юлыңды башкөллө ижади эшкә бағышлағанһың. 65 йәшеңде быйыл "Ағиҙел" журналының беренсе һанында донъя күргән (дауамы 2-се һанда сыға) "Буранбай" романы менән билдәләйһең. Минә ҡалһа, һинең үҙеңдән бигерәк, әҙәбиәт һөйөүселәргә ҙур бүләк ул. Был әҫәрҙе яҙыу идеяһы нисек тыуҙы?**

- Бер мәл атаҡлы тарихсыбыҙ, яҡташым Әнүәр Әсфәндиәров өйөнә саҡырҙы. Буранбай сәсәнгә ҡағылышлы бөтә тарихи документтарҙы архивтарҙан йыйған икән. Күбеһе суд ҡарарҙары күсермәләре яҙылған протоколдар, хаттар, аңлатмалар, мөрәжәғәттәр һ.б. Документтар кирбес ҡалынлыҡ. Сәсәндең шәжәрәһен дә ошо нигеҙҙә төҙөгән. Унда минең 1785 йылда тыуған Үтәбай ҡартатайым Буранбай сәсәндең бер туған ҡустыһы тип килтерелгән. Фамилиялары - аталарының исеменән Ҡотосов, Ҡотостоң атаһы Һөйөндөк. Буранбайҙың 1767 йылда тыуған йәнә бер ҡустыһы Йосоп, ә Наил, Әхиәт, Ғаяз Ғәйетбаевтар шул тармаҡҡа ҡарай.

Был хаҡта белә инем, хәҙер инде шундай тарихсы үҙе саҡырып, документтар ярҙамында раҫлағас, ғорурлыҡ тойғоһо барлыҡҡа килде. Әңгәмәбеҙ аҙағында Әнүәр ағай шулай тине: "Һинә Хоҙай үҙе ҡушҡан Буранбай сәсән хаҡында әҫәр яҙырға. Буранбай хаҡында легендаларға, имеш-мимештәргә таянып, тарихи мәҡәләләр, әҙәби әҫәрҙәр күп яҙалар. Әммә уларҙың күбеһе Буранбайҙың тарихи ерлеген бөтөнләй башҡа урынға бәйләй, уны Ҡаһым түрә менән 1812 йылғы һуғышта, Себер каторгаһында йөрөтә. Быны был ревизия мәғлүмәттәрендә сәсәндең Һаҡмар буйында һинең тыуған ауылың Кинйәбулатта (хәҙер Буранбай) тыуыуы аҡҡа ҡара менән яҙылған. Буранбай, үҙе теләһә лә, Ватан һуғышына бара алмаҫ ине, беренсенән, уның 1812 йылда йәше үткән була, икенсенән, 1811 йылда уҡ уға ҡарата суд эше асыла. Тағы ла: Буранбай, хатта йырында шулай йырланһа ла, Себерҙә каторгала булмаған, сөнки юлда ҡасып китә. Документтарҙың күсермәләрен үҙеңә ал да, минә төп нөхсәләрҙе кире алып кил..."

Тап шул йылда, йәғни 2002 йылда, "Йәшлек" гәзитенең 12-се һанында (2 февраль) Әнүәр Әсфәндиәровтың "Буранбайҙың яҙған хатын уҡып" тигән мәҡәләһе ике биттә баҫылып сыҡты. Буранбай сәсән менән бер ағасты тәшкил иткән беҙҙең нәҫел шәжәрәһен дә тарихсы шул һанда баҫтырҙы. Әйтергә кәрәк, Буранбай сәсән Ҡотосов хаҡында бөтә уйҙырмаларҙан азат булған, тарихи документтар менән генә нигеҙләнгән тәүге ғилми һүҙ ине был мәҡәлә.

**Ҡәләмдәштәреңдән: "Романды ҡасан тамамлайһың?" - тигән һорауҙы ла йыш ишетергә тура килде һинә. Ысынлап та, нишләп оҙаҡҡа һуҙылды ул?**

- Әнүәр ағай биргән документтарҙы өйрәнә башланым да, оло тетрәнеү кисерҙем. Бәктиһәң, Буранбай хаҡында легендаларҙан, уйҙырмаларҙан тыш, бер нәмә лә белмәгәнмен икән. Романды яҙыу оҙаҡҡа һуҙылыуы ла, шул тетрәнеүемә бәйле. Тарихи документтарҙы бер юлы уҡый ҙа башланым һәм инстиктив рәүештә һүҙмә-һүҙ тәржемә итеп, араһына сюжет линияһын индереп, әҫәр яҙырға ла тотондом. Был эшкә шул тиклем мауығып бирелеп киткәнмен, документтарҙы ксероксҡа үткәреп, Әнүәр ағайға кире алып барырға онотҡанмын. Ағайҙан ғәфү үтенеп, хатамды төҙәтергә тура килде. Буранбай сәсән тураһында тарихсының документтарҙан, легендаларҙан һәм фольклор әҫәрҙәренән торған "Буранбайҙың яҙған хатын уҡып" тигән китабы әллә ҡасан уҡ нәшриәткә тапшырылып, үҙе баҡыйлыҡҡа күскәндән һуң, 2016 йылда ғына, З.Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә донъя күрҙе.

Романдың 175 биттән торған тәүге варианты ошо рәүешле яҙылды. Яҙып бөткәс, бер аҙ "һыуындырып" һалып ҡуйҙым да, яңынан алып уҡыһам, унда Буранбай сәсәнде таба алманым. Йәғни тарихи документтар бар, әммә унда Буранбай үҙе юҡ, дөрөҫөрәге, кәүҙәһе генә бар, эске кисерештәре, күңел донъяһы, моңо тойолмай. Ул вариантты юҡҡа сығарҙым да, өр-яңынан яҙырға ултырҙым. Яҙыуы еңел булманы. "Буранбай" йырының аһәңе шул тиклем тәьҫирле, уны тоймайынса әҫәрҙең бер юлын да яҙа алманым. Механик рәүештә яҙырға ултырһаң, әҫәрҙең эсенә, туҡымаһына инә алмай яфаланаһың. Хәҡиҡәтте алдап булмағандай, яһалма кәйеф-тойғо менән өҫтәл артына ултырыуым да бер ниндәй һөҙөмтә бирмәне. Әгәр ҙә ныҡышып башлаһам, Буранбай сәсән әҫәрҙән мине дыңырлатып ҡыуып сығарҙы. Был, үҙенә күрә, тәһәрәтләнмәйенсә намаҙ уҡырға ярамай, тигән һымаҡ килеп сыҡты.

**Кемдер, бәлки, тағы тарих, тағы үткәндәр, тип инҡар итер романды. Тарихын белмәгән милләттең киләсәге юҡ, тиергә ҡала ундайҙарға. Архив документтар менән эшләгәндә, ун туғыҙынсы быуат баштары ваҡиғалары эсенә инеп киткәндә, ниндәй уй-тойғолар кисерҙең, ваҡыт аша сәйәхәт ниндәй уйҙарға һалды?**

- "Киләсәкте тоҡандырыр өсөн үткәндең көлөнән ҡуҙ эҙләйем" тигән тажик яҙыусыһы Сәҙритдин Айни. Беҙҙең күпселек проблемаларыбыҙ тарихыбыҙҙы белмәүҙән, үткәнебеҙгә әһәмиәт бирмәүҙән, тарихтағы хаталарыбыҙҙан һабаҡ алмауҙан килә. Ҡараңғыла һәрмәнәбеҙ ҙә, утыбыҙҙы һүндерергә тырышыусыларҙы ғәйепләп әрләйбеҙ. Яҡтылыҡ сығанағыбыҙ тарихыбыҙҙа бит.

Тарихи документтарҙы өйрәнгәндә шуны аңланым: хәҙер егерме беренсе быуат башы һәм уны ун туғыҙынсы быуат башы менән сағыштырһаң, бер нәмә лә үҙгәрмәгән. "Кем үҙенең үткәнен белмәй, уны яңынан кисерергә мәжбүр" тигән Будда. Беҙ һаман да бер үк тырманың башына килтерәбеҙ ҙә баҫабыҙ. Тырма һабы маңлайыбыҙға "шаҡ" итеп ҡалғас ҡына иҫебеҙгә киләбеҙ ҙә ул, әммә күпкә һуңлайбыҙ. Әгәр ҙә тарихи һабаҡтар алынһа, кешелек тәүбәгә килеп, күп кенә тетрәнеүҙәрҙән азат булыр ине. Мәшһүр Шәйехзада Бабич шиғырындағыса, "Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ, тупраҡ беҙҙең анабыҙ" тигән аңлау бөгөн дә актуаль булып ҡала килә.

**Мәшһүр Буранбай сәсән тураһында романға тотоноуың осраҡлы түгел. Үрҙә әйтеп үтелде инде, һин - уның нәҫеле. Ижадыңдың инеше ҡайҙан? Баймаҡ районы Буранбай ауылы феноменын нисек аңлатыр инең?**

- Буранбай сәсәнгә бәйле документтар, легенда-риүәйәттәр шул тиклем күп, әле "Ағиҙел"дең ике һанында баҫылған һәм баҫыласаҡ (2-се һанында) өлөшө тәүге китабымды тәшкил итә. Тәүге китапта ваҡиғалар, асылда, үҙебеҙҙең ерлектә бара. Унда документтарҙан тыш, легенда-риүәйәттәрҙе лә, фольклор әҫәрҙәрен дә файҙаландым. Тарихи-фәлсәфәүи әҫәр булғас, художестволы деталдәргә фәлсәфәүи ҡараш та талап ителде. Әйтәйек, әҫәрҙең "Без-без итеп һурабыҙ", "Сапмай хәле юҡ", "Йәшерен йырым бар", "Кәкере ҡайындар", "Уйҙар ҡамауында" тигән бүлектәрендә Буранбай сәсән шәхесенең үҙе йәшәгән замана күҙлегенән әле уҡыусыға таныш булмаған сифаттарын асырға ынтылдым да инде. Уҡыусы нисек баһалар?

Икенсе китабымды сәсәндең ҡаҙаҡ далаһына бәйле тормошона арнармын тип уйлайым. Хоҙай насип итһә. Быны өсөн Ҡаҙағстанға командировкаға бармайынса ла булмаҫ. Әнүәр ағай минә юҡҡа ғына фатиха бирмәгәндер тием, Үтәбай ҡартатайым Буранбай сәсәндең туғаны булғас, был әҫәргә мин үҙебеҙҙең нәҫел китабын, шәжәрәмде яҙғандай тотондом.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев ауылдашым, мәшһүр шағир Рәйес Түләк менән икебеҙҙең берләктә сығарған китабыбыҙға яҙған баш һүҙендә шулай тигәйне: "Әхмәр Үтәбай менән Рәйес Түләк - бер үк ауылдың йылы тупрағында аунап, бер үк һуҡмаҡтарҙа йүгереп йөрөп, бер үк йылғала һыу инеп, бәләкәстән дуҫ булып үҫкән кешеләр. Уларҙың сабый һуҡмаҡтары Баймаҡ еренә уйылған, тыуған ауылдары - Буранбай, эскән һыуҙары, йөҙөргә өйрәнгән йылғалары - Һаҡмар. Яҙмышында ошо өс һүҙҙең - Һаҡмарҙың, Буранбайҙың, Баймаҡтың бергә килеп үрелеүе - башҡорт балаһы өсөн ни тиклем оло бәхет. Күпме аҫыл йырҙарыбыҙ йырланған Һаҡмар буйҙарында тиңдәшһеҙ эпосыбыҙ "Урал батыр" яҙып алынған, халҡыбыҙҙың ер һәм азатлыҡ өсөн туҡтауһыҙ көрәшендәге күпме дәһшәтле ваҡиғалар ҡайнаған, һәр ҡарыш ере батырҙарҙың ҡайнар ҡаны һәм арҙаҡлы ҡурайсыларҙың, йырсыларҙың, сәсәндәрҙең моңо менән һуғарылған Баймаҡ тупрағында, милләтебеҙҙең ҡаһарман шәхесе, моң шишмәһе булған Буранбай шәжәрәһе тамырланған, уның исемен йөрөткән. Буранбай тигән ауылда тыуып үҫеү - кеше өлөшөнә яҙмыш тарафынан бирелгән ғүмерлек ҡыуаныс бит ул..." Ижадыңдың инеше ҡайҙан, тигән һорауыңа халыҡ шағирынан да шәберәк итеп әйтеп булмаҫтыр.

Буранбай феноменына килгәндә, 2018 йылда "Ватандаш" журналы башланғысында "Буранбай ауылы феномены" тигән темаға сара үткәйне ауылыбыҙҙа. Унда беҙ, Өфөлә йәшәгән буранбайҙар, тыуған ауылыбыҙға ҡайттыҡ. Был хаҡта мәҡәлә шул уҡ йылдың 7-се һанында баҫылып сыҡты. Уны табып уҡый алаһығыҙ. Шәхсән үҙемә килгәндә, мин тыуған ауылым Буранбай феноменында биш фактор күрәм.

Төп сәбәп "Буранбай" йырындалыр. Уның аһәңендә илаһилыҡ бар. Буранбай сәсәндең замандашы Ишмөхәмәт сәсән Мырҙағаев Буранбайҙы баҡсалағы һандуғасҡа тиңләгән. Йыш ҡына: "Нинә шундай ауыл була тороп, клубығыҙ иҫке?" - тиҙәр. Мин уларға, Ишмөхәмәт сәсәндең һүҙенә таянып: "Һандуғас бер ваҡытта ла сыйырсыҡ ояһына инмәй..." - тип яуап бирәм.

Тарихи фактор. Ни өсөн Буранбай эҙәрлекләүҙәргә дусар булған? Батша державаһы башҡорт ерҙәрен межалаған, йәғни ерҙәрҙең сиктәрен билдәләгән. Буранбай ерҙе һаҡлау өсөн Кинйәбулат ауылын дүрт өлөшкә бүлгән, йәғни "бәпәйләткән". Был урындарҙа ауыл һалынып ята, тип межалай алмағандар, шуның өсөн дә Буранбай эҙәрлекләүҙәргә дусар булған. Буранбайҙың миҫалына башҡа старшиналар ҙа эйәргән. Ул саҡта беҙҙең ауылдан хәҙерге Ғәҙелбай, Манһыр, Әпек, Яңы Кинйәбулат (хәҙерге Беренсе Этҡол ауылының Ҡышлауар йылғаһының һул ярында ултырған өлөшө), Буранбай (хәҙерге Баймаҡ ҡалаһы) ауылдары бүленеп сыҡҡан. Әйткәндәй, башҡорт донъяһының Мөжәүир хәҙрәт феномены Буранбай ауылына бәйле, хәҙрәттең ата-олаталары Манһырҙа хәҙерге Буранбай ауылынан күсеп килгән.

Йәнә бер фактор - башҡорт йәмғиәтенең һаҡланыуы. Бер генә миҫал. 1914 йылда Билал Азаматов Ватан һуғышынан Зоя (Зөләйха) тигән поляк ҡыҙын эйәртеп алып ҡайта. Ҡыҙ Ислам динен ҡабул иткәнсе, башҡортса һөйләшергә өйрәнгәнсе, күрше Ямаш ауылында йәшәгән. Ауылға уны имтихан бирҙертеп кенә үткәргәндәр. Ауылыбыҙ халҡы дин менән традицияны бөгөнгө көнгә тиклем алып килеп еткергән. Беҙҙең ауылда дини йола менән милли йолалар бер-беренән айырылмай, киреһенсә, бер-береһен тултырып килә.

Тағы ла бер мөһим нәмә - Таңһылыу еңгәй Аралбаева хеҙмәте. Ауылдан сәнғәт оҫталары сыға икән, ул - Фәттәх Аралбаевтың ҡаҙанышы. Егермегә яҡын ҡурайсыбыҙ, йырсыбыҙ, бейеүсебеҙ республика конкурстарында еңеү яулаған икән, Фәттәх Аралбаевтың хеҙмәте сағылышы был. Ә Фәттәхте башҡа туғандары менән бергә аталары, атаҡлы ҡурайсы, йырсы Фәррәх ағай менән әсәләре Таңһылыу еңгәй тәрбиәләне. Беҙ бәләкәй саҡта уларҙың малайҙары, уйынды өҙөп, иҙән йыуырға, һыу ташырға тип

✓ *Ниндәй генә ауыр хәлдәргә, кисерештәргә тарығанда ла, үҙемде шундай инаныуға көйләп өйрәнгәнмен: минең атай-олатайҙарым ниндәйен һынауҙарға, фажиғәләргә дусар булғанда ла, бирешмәгәндәр.*



# ТАРИХЫБЫҘҘА

ҡайтып китә торғайны. Таңһылыу еңгәй улдарын егәрле, намыҫлы итеп тәрбиәләне, ул мәктәпте Фәттәх тә үтте.

Тағы ла бер сәбәп. Көслөгә һәр ваҡыт һыйыналар. Бер заман беҙҙең ауылға сыңғыҙҙар күсеп килә башланы. Дауыт олатай Әбйәлилов хатта ҡыш көнө өйөн трактор менән һөйрәтеп алып килде. Һығымта: насар ергә күсенмәйҙәр.

Бына Буранбайҙың феномены ҡайҙа ул! Атай-олатайҙарыбыҙҙың боронғо традицияларын һаҡлап ҡалыу ҙа феноменға тиң. Мәҫәлән, Мөхлис олатайым Үтәбаев (ҡартатайымдың бер туған ҡустыһы) алдында берәү ҙә сиирмешкә сиртергә, тәмәке тартырға, уның юлын ҡыйырға ҡыймай торғайны.

Өфө ҡалаһының Ә. Исҡужин исемендәге Балалар сәнғәт мәктәбе директоры Әхиәт ҡусты Ғәйетбаевтың да фекере бик үҙенсәлекле яңғыраны был сарала: "Элек-электән Абдрахман, Фәррәх, Ғүмәр, Азамат олатайҙар ҡурайҙа һыҙҙырып уйнай, йырлай торғайны. Миңә шул саҡта ҡурай тетрәткес музыка ҡоралы булып тойола ине. Беҙҙең ауылдан Зәйнулла Раев тәүгеләрҙән булып музыка мәктәбендә уҡыны. Йыш ҡына концерт ҡуя инек, шунда буранбайҙар гел беренсе урын ала торғайны. Хәҙерге ваҡытта сәнғәт училищеһы, институты тамамлаған профессиональ ҡурайсылар араһында иң күбе - беҙҙең ауыл егеттәре.

2007 йылда беҙҙең ауылдан һикһәндән ашыу кеше килеп, Өфөнөң хәҙерге "Торатау" конгресс-холл бинаһында тотош концерт программаһы менән сығыш яһаныҡ. Был сара ауылдаштарыбыҙ өсөн дә, Өфө, республика халҡы өсөн дә оло ваҡиға булып ҡалды. Концертты һаман да һағынып иҫкә алалар. Буранбай феноменының тағы бер сәбәбе: ауылыбыҙ халҡының итәғәтле булыуынан да киләлер ул. Насар ғаиләлә бала йырламай бит ул.



► **Һин, Әхмәр, блогер булараҡ та танылыу алғанһың. "Бәйләнештә" селтәрендәге битеңдә ун меңгә яҡын дуҫың бар. Дуҫтар һаны 10 мең менән сикләнмәһә, бәлки, уларҙың һаны тағы ла күберәк булыр ине. "Мең дә бер күҙәтеүем", үҙенә күрә, табыш та, интернет өсөн ҡулай айырым бер жанр ҙа...**

- "Блогер" һүҙен яратмайым. Нисектер ул һүҙ миңә "болғауыс", "болғар" тигәндәй яңғырай. "Мең дә бер күҙәтеүем" яҙмаларыма килгәндә, уларҙың башланғысы - "Киске Өфө" гәзитенең "Бер кәлимә фекер" рубрикаһында. Ул рубрикала, башлыса, беҙ баш мөхәррир Гөлфиә Янбаева менән яҙыштыҡ. Гөлфиә апай шул яҙмалары нигеҙендә 2013 йылда "Елле фекерҙәр елгә осмаһын" тигән китабын сығарҙы.

Интернет хаҡында айырым әйтеп үткем килә. Уның барлыҡҡа килеүен мин кешелек донъяһындағы эволюцияға тиңләр инем. Әлбиттә, интернет донъя кимәлендә мәхшәр уты тоҡандырыуға ла һәләтле. Әммә һәр бер ыңғай күренештең кире яғы булған кеүек, кире күренештең дә ыңғай яҡтары бихисап. Мәҫәлән, мин шул уҡ "Мең дә бер күҙәтеүем" яҙмаларымды алып барам, минең мендәрсә уҡысыларым, үҙ аудиторияам, авторҙарым, дәғүәселәрем, дуҫтарым бар. Шул уҡ ваҡытта мин социаль селтәргә сираттағы күҙәтеүемде яҙып ҡуйыу менән Америкала булһынмы, Хәйбуллаламы, Африкаламы, Сахалиндамы йәшәгән бер башҡорт кешеһе шундуҡ уны уҡып, шундуҡ үҙенең мөнәсәбәтен, фекерен белдерә ала. Беҙ ошо мөмкинлекте милләтебеҙҙе ойоштороу өсөн һис ниғә алыштырғыһыҙ сара икәнлеген дә аңларға һәм файҙаланырға тейешбеҙ. Быңдай мөмкинлек беҙгә әгәр ҙә XX быуатта бирелһәме!

► **Тағы бер табышың - "Ашҡаҙар" радиоһында яңғыраған "киптерелгән роман" жанрына ҡараған яҙмаларың. Улар хаҡында нимә әйтерһең?**

- "Мең дә бер күҙәтеүем" һымаҡ, "Киптерелгән роман" яҙмалары башланғысы - шул уҡ "Киске Өфө" гәзитендә. "Киптерелгән роман" тигән төшөнсә минеке түгел, Ғәбит Садиҡовтыҡы. Гәзиттә мин һандан-һанға "Милли идеяға торош" тигән рубрика алып барҙым. Был рубрикала тәрән мәғәнәгә эйә булған башҡорт халыҡ мәҡәлдәренә һәм әйтемдәренә аңлатмалар яҙҙым. Был яҙмаларымды бигерәк тә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары үҙ итте һәм дәрестәрендә файҙаланды. Хәҙер ҙә файҙаланалар. Мәрхүмә Рәсимә апай Ураҡсина минең ошо яҙмалар нигеҙендә дәрес программалары төҙөргә лә хыялланды, тик өлгөрә алманы. Миҫал өсөн ике генә әйтемгә ҡыҫҡаса аңлатма биреп үтәм.

Әйтәйек, "Дошманыңдың бысағы менән кейеҙ киҫ". Тура мәғәнәһендә дошманыңың бысағы менән кейеҙ киҫеп тороусыны күҙ алдына килтерһәң, бик көлкө тойола. Ә әйтем аҫтына һалынған мәғәнәһе шунда: кейеҙ киҫкәндә бысаҡ үтмәҫләнә. Тимәк, "дошманыңың бысағы менән кейеҙ киҫеүсе" кеше уның дошманлығын юҡҡа сығарып дуҫы итә. Сөнки дошманын еңгән кеше түгел, дошманын дуҫы иткән кеше көслө.

Икенсеһе - "Ата-әсәйеңдең ҡәбере убала булһын". Был йәшәү маҡсатын, тормош программаһын билдәләүгә тиң һүҙҙәр. Ни өсөн тигәндә, кемдәрҙе убаға ҡуялар? Билдәле, хандарҙы, батшаларҙы. Тимәк, кеше ата-әсәһен шул тиклем, баҡыйлыҡҡа күскәс тә, убаға ҡуйырлыҡ итеп ҡәҙерләргә бурыслы. Кеше үҙен дә хан балаһы кимәленә еткерерлек итеп тоторға, шул кимәлгә өлгәшергә бурыслы. Халҡыбыҙҙың мәҡәл-әйтемдәренә һалынған тәрән йөкмәткеле мәғәнәләрҙе беҙгә асырға ла асырға әле.

► **Һуңғы йылдарҙа балаларға матур башҡорт исемдәре ҡушыу йолаға әйләнеп бара. Үкенескә, диңгеҙ аръяғында йәшәгән халыҡтарға, кино геройҙарына хас яңғыраулыҡлы, ләкин беҙҙең ҡолаҡҡа ятышһыҙҙары ла йыш осрай. Ә һинең ҡыҙыңдың исеме Тамсы. Мәғәнәле, матур, үҙебеҙсә. Мин ундай исем йөрөткән башҡа кешене белмәйем. Бер генә һүҙҙән торған иң тос әҫәрең түгелме икән ул? Әмир, Әбйәлил улдарың да, үҙеңә оҡшап, ижад кешеләре...**

- Шәп әйттең, Рәсүл. Ҡыҙым Тамсы - минең бер генә һүҙҙән торған романым да. Ҡыҫҡалыҡҡа килгәндә, минең бер генә һүҙҙән торған шиғырым да, "Бер юллыҡ шиғыр" тигән уйҙырманамәм дә бар. "Ҡыҫҡара барған шиғырҙар" тигән шиғырҙар циклымда иһә һәр строфа һайын юлдар һаны берәүгә кәмей бара, шул уҡ ваҡытта йөкмәтке тосая. Циклдың һуңғы юлы: "Ейәнем - эй, йәнем"

Беҙҙең халыҡта, асылда, ғәрәп һәм фарсы телдәренән килеп ингән исемдәр өҫтөнлөк итә. Һуңғы ваҡытта, һин әйткәнсә, диңгеҙ аръяғынан үҙләштерелгәндәре лә осрай башланы. Ә бит Ислам дине килгәнсе лә беҙ исемһеҙ булмағанбыҙ. Шуға күрә саф үҙебеҙсә, башҡортса ҡушылған исемдәребеҙ булған һәм уларҙың күбеһе әле лә һаҡланып ҡалған. Тамсы - ана шундай исемдәрҙең береһе. Уны ревизия мәғлүмәттәрендә лә осратҡайным.

Донъяла исем һәм есем тигән төшөнсәләр барлығын яҡшы беләбеҙ. "Исемеңә күрә есеме" тигән әйтем исем менән есем берҙәмлеге хаҡында. Ошо уҡ формуланы бер үк ваҡытта логика ҡануны буйынса "Есемеңә күрә исеме" тип тә бороп әйтә алабыҙ. Улыма - Әбйәлил, ҡыҙыма Тамсы исеме ҡушып, был исемдәрҙең уларҙың үҫеше, уңышҡа өлгәшеүе өсөн нисек йоғонто яһағанына шаһит булғандан һуң, мин балаға ҡушылған исемдең шәхес формалашыуында ролен бик яҡшы тоям.

Балаларымдың исемдәре иң тәүҙә әҙәби әҫәрҙәремдең персонаждары булып яҙылды, аҙаҡ уларға ҡуштым. Өлкән улым Әмирҙең исеме "Мөғжизәле планета" тигән хикәйәмдә бар. Бер туған ҡустымдың исеме лә Әмир булды, ул бик иртә донъялыҡтан китте. Әхиәт ҡустым Ғәйетбаевтың тиҫтере, дуҫы, класташы ине ул. Шул тиклем илгәҙәк, шаян, мөләйем ҡустым, әгәр ҙә иҫән булһа, мотлаҡ шағир йә актер һөнәрен һайлар ине. Әллә шуға микән, Әмир улым да сәнғәт юлынан китте. Бөгөн ул - Салауат башҡорт дәүләт драма театры актеры. Үткән йылда Башҡортостандың атҡаҙанған артисы тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булып ҡыуандырҙы.

Әбйәлил улымдың исеме иң тәүҙә "Бер юллыҡ шиғыр" тигән уйҙырманамәмдә яңғыраш алды. Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһын "Алтын мизал"ға тамамлағас, Әбйәлил улым Санкт-Петербург урман хужалығы университетында уҡыны, унда ҡыҙыл диплом лайыҡ булды. Артабан, урман хужалығында ике йыл эшләгәндән һуң, Әмир ағаһы юлынан китеп, Мәскәүҙәге М.С.Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһына (институтына) уҡырға инде. Бөгөн ул - М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры.

Тамсы ҡыҙымдың исемен иң тәүҙә "Сәхрә" тигән хыялнамәмдә ҡулландым. Аҙаҡ, ҡыҙым тыуғас, әҫәремдән ул ысынбарлыҡҡа әүерелде.

► **Әхмәр, алтыш биш йыл ғүмер - ул күпме?**

- Уҫал ғына итеп шаяртып әйткәндә, алтмыш биш йәш аҙ ҙа түгел, күп тә түгел, бер өйрәнгәс, бер ни түгел. Кешенең физик, йәғни биологик һәм күңел йәше була. Йәғни кеше үҙен нисә йәшлек итеп тоя, ул шунсама йәштә лә. Күп кенә урындарға, ауылдарға, коллективтарға барып сыҡһам, ундағы кешеләр ҡапыл йәнләнеп китә һәм йышыраҡ килеүемде үтенә. Миңдәге оптимизм, күрәһең, атай-олатайҙарымдың рухынан, тарихыбыҙҙан киләлер. Тормош бер туҡтауһыҙ өҫтөбөҙгә бихисап проблемаларын өйөп кенә тора. Хәл итеп кенә өлгөр. Ниндәй генә ауыр хәлдәргә, кисерештәргә тарығанда ла, үҙемде шундай инаныуға көйләп өйрәнгәнмен: минең атай-олатайҙарым ниндәйен һынауҙарға, фажиғәләргә дусар булғанда ла, бирешмәгәндәр. Тарихтың барлыҡ ҡаршылыҡтарын йырып сығып, нәҫелебеҙҙе, ырыуыбыҙҙы, халҡыбыҙҙы бөгөнгөгә алып килеп еткереп, XX быуат башында Рәсәйҙә тәүге булып республикабыҙҙы төҙөп, федератив ҡоролошҡа нигеҙ һалып, быуындар эстафетаһын дауам итеп, мине тыуҙырғандар. Минең барлығым, юғары белем алып республикабыҙҙың баш ҡалаһында йәшәүем, ижад итеүем, балалар үҫтереүем - былар барыһы ла атай-олатайҙарымдың рухи ҡаҙанышы һәм мин, уларҙың рухи эшмәкәрлегенең һөҙөмтәһе булараҡ, ҡаршымда осраған ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар алдында бөгөлөп төшөм икән, был хәләтем уларҙың фиҙаҡәрлеген, ҡаһарманлығын юҡҡа сығарыуға тиң гәмәл буласаҡ.

Барыһы ла - ауырлыҡтар ҙа, еңеллектәр ҙә, шатлыҡтар ҙа, ҡайғылар ҙа, хатта ғүмер ҙә - ваҡытлыса. Мәңгелек йәшәйеш хаҡына бик аҙына ғына түҙәбеҙ инде. Бер кешенең ғүмере, мәңгелек кимәле менән үлсәгәндә, секундтың триллиондан бер өлөшө лә түгел. Шул уҡ ваҡытта шул ҡыҫҡа ғына ваҡыт араһында бер кеше халҡының, кешелектең ғүмерен йөҙәр, меңәр йылдарға һуҙа, балҡыта ала. Ә ауырлыҡтар килеп тыуа икән - улары Хоҙайҙың һынауы!

Шуға күрә лә миңә алтмыш биш тулды, тип, ҡалған йылдарымды, айҙарымды, көндәремде, сәғәттәремде, минуттарымды, секундтарымды һанап, теге әкиәттәгеҫә, мейес башына менеп ятырға йыйынмайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенә ҡайһы бер яңылыҡтар индерергә йөрьәт иткән әҙип ғүмеренең сираттағы үрен күләмле роман менән билдәләй. "Барыһы ла - ауырлыҡтар ҙа, еңеллектәр ҙә, шатлыҡтар ҙа, ҡайғылар ҙа, хатта ғүмер ҙә - ваҡытлыса" тиеүендә уның тормошто күргән, күпте белгән кешенең фәлсәфәүи ҡарашы ярылып ята. Быуындар сылбырын дауам итеп, атай-олатайҙар аманатына тоғро ҡалыу, үҙ халҡыңа хеҙмәт итеү бурысы тураһында фекерләй һәм был юҫыкта аҡһаҡалдарға хас һүҙ әйтә Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай. "Буранбай" романының беренсе китабы "Китап" нәшриәтенең быйылғы эш планына индерелгән. Алла бирһә, әҫәрҙең икенсе өлөшө лә оҙаҡ көттөрмәй яҙылыр һәм донъя күрер, тигән ышаныста ҡалабыҙ. Һәм... Яҙыусының яңы романынан өҙөктө "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына ла тәҡдим итәбеҙ.**

**Рәсүл БАЙГИЛДИН**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ ***Тик үҙ илендә ҡасҡын булып йөрөүен генә үҙ-үҙенә кисерә алмаясаҡ. Тоғро яҡташтары, ырыуҙаштары, ҡатындары Мәҙинә, Тутыйғош менән бер нисә тапҡыр осрашты ла икән ти. Әммә танһыҡтары ҡанмаҫ барыбер ҙә.***



# БУРАНБАЙ

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ

(Тарихи-фәлсәфәүи романдан өҙөк)



## Кәкере ҡайындар

Буранбайҙы Рәз тарафына оҙата барған Ихсанға Ишмөхәмәт сәсән шундай бурыс йөкмәткәйне. Улар Ҡыҙыл йылғаһынан Рәзгә барыһына ла таныш булған күс юлы буйлап түгел, тик бик аҙҙарға билдәле булған боронғо йәшерен һуҡмаҡтар аша һыбай үтергә тейеш. Ихсан ай яҡтыһында йөҙ аҙым самаһы алдараҡ алғасҡы булып бара, әгәр ҙә юлында эт-ҡош осраһа, кире борола һалып килеп, йә ҡорҡолдаҡ тауышы сығарып, Буранбайҙы иҫкәртергә бурыслы. Ҡыҙыл, Биҙгенде, Әхмәр, Ғәйсәр йылғаларын кисеп үтеп, Үләнде, Суртанды, Ҡарабалыҡлы, Мауыҙҙы тигән күлдәрҙе берәм-берәм артта ҡалдырып, тау һыртынан уратып бара биргәс, алдарында осраған тағы ла байтаҡ шишмәләрҙе кисеп үттеләр. Ҡалын урмандарға килеп төртөлгәс, йәшерен һуҡмаҡтан ситкә сығып, урман шишмәһе янында туҡтап ял итеп, үҙәк ялғап алырға булдылар. Шунда ғына һөйләшергә форсат табылды. Аңдып тороусыларҙан да һаҡланыу әмәле ине уларҙың өнһөҙ барыуы. Төндә тауыштың алыҫҡа яңғырап ишетелгәнен, Ишмөхәмәт сәсән әйткәнсә, Урал һандуғасы Буранбай үтә лә яҡшы белә булыр. Ауыҙҙарынан сыҡҡан һәр һүҙҙе шишмә үҙенә эләктерә һалып йотоп, үҙенсә йырға әйләндереп түбәнгә алып китә торҙо.

"Юлда барғанда Буранбай ағайға юҡ-бар һорау биреп башын ҡатырма. Өнһөҙ барһағыҙ, эт-ҡошҡа ла тәл булмаҫһығыҙ..." тигәйне ағаһы Ихсанға. Бик-бик һөйләшкеһе килгәйне исеме үҙенән йөҙәр саҡрым алда йөрөгән, йырҙары йәшен тиҙлегендә башҡорт иленә таралған атаҡлы Буранбай сәсән менән. Шуға күрә Буранбайҙың туҡталып үҙәк ялғап алырға тигән тәҡдименә уғата ҡыуанды Ихсан. Уға алдан әҙерләгән һорауын бирергә тип ауыҙын асыуы булды, Буранбай алдан өлгөрҙө.

- Ошо урында беҙ, Ихсан улым, ике тараф китеп, хушлашабыҙ. Һин кире ауылыңа ҡайтаһың, мин - Рәзгә табан. Артабанғы юл айыуҙар төйәгенән, ҡалын урмандар аша үтә, - тине өлкән юлдашы көтмәгәндә. - Айыуҙарға табыш, ем булырға теләгән кем мине ҡалын урман араһында аңдып ултырһын...

- Юҡ, Буранбай апа, мин һине Рәзгә тиклем оҙата барам, - Ихсан әле үткән юлдары тарафынан ҡул иҙәне. - Ишмөхәмәт ағайым шулай ҡушты...

- Юҡ, Ихсан туғаным, мин ике һөйләй белмәйем... - Был һүҙҙәрҙе Буранбай өҙөп етди итеп әйтте, егеткә ҡаршылашып торорлоҡ әмәл дә ҡалдырманы. - Ҡайтҡас, Ишмөхәмәт ағайыңа әйтерһең, кирегә Һаҡмар яғына боролғанда мин Балапанға тағы ла һуғылырмын. Ҡош теле ебәрермен...

- Ишмөхәмәт ағайым һине Рәзгә тиклем оҙата бармағас, әргә алмаҫмы, эттән алып, этҡә һалып һүкмәҫме, Буранбай апа? - Ихсан һаман да һуңғы һаламға йәбешергә теләгәндәй, Буранбайға ҡарап-ҡарап алды. - Айыу килеп сыҡһа ла, икәү икәү булырбыҙ...

- Ә һинең, Ихсан улым, айыуҙың айыуға ташланғанын күргәнең булдымы? - Буранбай кесе юлдашына бығаса һис тә ҡыланмағанындай, йылмайып баҡты.

- Юҡ та, - булды уның кинәйәһенә нимә тип яуапларға ла белмәгән Ихсан. - Ҡарға күҙен ҡарға суҡымай инде ул...

- Хаҡ һүҙең, Ихсан туғаным, - Буранбай һаман да кинәйә йомғағын тәгәрәтә бирҙе, - айыуға ла айыу һунар итмәй...

- Аңламаным, Буранбай апа... - Ихсан уның һүҙҙәренә төрлөсә фараздар диңгеҙендә йөҙә ине булһа кәрәк, шуғалырмы, берсә етди төҫ алды, берсә йылмайҙы, шулай ҙа әйтеп ҡуйҙы. - Ярар, ауылға ҡайтҡас, Ишмөхәмәт ағайымдан һорашырмын...

Ошоноң менән уларҙың әңгәмәһе тамам да булды. Буранбайҙы Рәз буйына тиклем оҙата алмағанына ҙур ҡыйынһыныу тойғоһо менән Ихсан Балапан яғына ҡайтып киткәс, Буранбай оло донъя менән япа-яңғыҙы тороп ҡалды. Сибайҙан Талҡалаға табан ҡуҙғалғандан алып, аҙаҡ Игорь Глазуновтың фатирында сирле кешегә һалышып ятҡанында мейеһен туҡтауһыҙ быраулаған, бәғерен ҡанатып тырнаған тынғыһыҙ уйҙарынан, хафалы борсолоуҙарынан башы тубалдай булғайны былайҙа.

Шартлай яҙҙы ул. Донъялар түңкәрелеп киткәндәй: әллә башы әйләнә, әллә ер тетрәйме? Әллә заман ахыры тигәндәре ошомо? Ҡиәмәт көнө яҡынлашамы? Ысҡынып ҡына китһәсе ул уйҙары башынан. Үлеп кенә ҡотолоп булырлыҡ әмәле. Әгәр ҙә уларҙан ҡотола алмаһа, үҙе донъялыҡтан ысҡынып китер төҫлө. Тик баҡыйлыҡҡа барып ҡына ҡотолоп буламы икән бындай хәсрәтле ғазаптарҙан? Әммә был иң анһат юлдыр, тик ҡотолоумы икән? Бындай көфөр уйҙарым өсөн берүк ғәфү итһен ине мине, Илаһым!

Ихсан менән хушлашып, урман юлына төшкәс кенә ул яңғыҙлыҡтың ни тиклем ауыр икәнлеген аңлағандай булды. Һәр бер һүҙенән, ҡарашынан күңел торошон үтәнән-үтә күргән Ишмөхәмәт юҡҡа ғына уның артынан Ихсанды эйәртеп ебәрмәгән. Сәсән сәсәнде аңлағандыр. Бәлки, уға егетте кире ауылына ҡайтарып ебәрергә лә кәрәк булмағандыр. Ярай әле Ишмөхәмәт уға шәп ат эйәрләткән, ярай әле аты өркәк түгел, ярай әле таянырға өҙәңгеләре, тотонорға эйәр ҡашағалары бар. Әгәр ҙә ошо уйҙары шойҡанына түҙә алмайынса, эйәренән ҡолаһа, ерҙең аҫты өҫкә килер, барлыҡ донъя емерелер, саңға буталыр, мең сыраҡҡа онталыр, сәрпәкләнер һымаҡ.

Үлемдән оят көслө. Эйәрҙән ҡолап ҡалыу - башҡорт өсөн ғәрлек. Ул үлемгә тиң. Әммә үлемдән ҡурҡҡан өсөн генә түгел, ҡандаштарына, ырыуҙаштарына, күҙенә мөлдөрәп ҡарап торған һөйөклө ҡатындарына, ғәзиз балаларына, туғандарына кәрәк булған өсөн дә ул атынан ҡолап ҡалырға тейеш түгел. Шуның өсөн дә ул атының ялына ғына түгел, тормош арғымағының ялына сытырман йәбешергә бурыслы. Әммә ул, бахыр йәнле кеше кеүек, һуңғы һаламға йәбешеп, өйрәле лә бер көн, итле лә ике көн тип йәшәй алмай. Күптәр шулай йәшәй. Буранбай иһә улар кеүек була алмай. Улар кеүек булһа, Буранбай була алмай. Башҡалар кеүек тә, үгеҙ үлһә ит, арба ватылһа - утын, тип тә йәшәр ине, ул сағында Раббыһы ғәфү итмәйәсәк. Вазифаһы башҡа Буранбайҙың.

Әммә уны сайҡалып китерлек ауыр уйҙарға бирелерлек сәбәптәрҙең һуңғы арала арта барыуы, көндән-көн сыҙамлыҡ-сабырлығының һуңғы сиккә етеп барыуы ғына ниндәйҙер ғәҙәттән тыш саралар күреүҙе талап итә. Тик ниндәй саралар һуң улар? Ана шул әмәлдәрҙе таба алмайынса, йәнкәйҙәренең үрһәләнеүҙәре!

Ярай әле, уға һыйынырға урманы, йәшеренергә шырлыҡтары, сарсауын ҡандырырға көмөштәй шишмәләре, һағышын таратырға ҡурайы, йөрәгенән сыҡҡан йыр-моңдары бар. Тик үҙ илендә ҡасҡын булып йөрөүен генә үҙ-үҙенә кисерә алмаясаҡ. Тоғро яҡташтары, ырыуҙаштары, ҡатындары Мәҙинә, Тутыйғош менән бер нисә тапҡыр осрашты ла икән ти. Әммә танһыҡтары ҡанмаҫ барыбер ҙә. Уға ҡәҙимге, тулы ҡанлы тормош етешмәй. Ҡатындарын, балаларын алып далаға ҡасып сығыу ҙа мөмкин түгел. Сик буйындағы хеҙмәттең нисек ҡуйылғанын белә. Үҙе үк ваҡытында дистанция начальнигы вазифаһында шуларҙы ойоштороп йөрөнө. Юҡ, яҡындарын оло ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып был аҙымға бара алмай ул. Балалары кендек ҡандары тамған ерҙә ғүмер кисерергә тейеш.

Бына әле лә ҡояш ҡалҡып килгәндә, Рәз йылғаһын кисеп үтеп, Юлбарыҫ Бикбулатовтың ауылы яғына табан боролдо. Ат менән барыу хәүефле тойолдо. Менгеһен һуғарып, шырлыҡ уртаһындағы асыҡ урынға арҡанлап ебәрҙе лә, артабан йәйәү китте. Йөҙ аҙым да үтеп өлгөрмәне, көтмәгәндә ҡаршыһына сандыр кәүҙәле бер ҡарт килеп сыҡты. Икеһе лә тертелдәне. Осрашыуҙары көтмәгәндә булды, ҡасҡын юлында осраусының күҙенә салынмаҫ өсөн йәшеренергә лә өлгөрмәй ҡалды. Буранбай ҡарттың күҙҙәренә тура ҡараны, тик үҙенә генә билдәле булған тойомлауы аша һығымтаһын да яһаны: ышанысллы кеше, бындайҙар һатмаясаҡ.

- Әссәләмәғәләйкүм, ағай, таңнамаҙҙан ниндәй мәшәҡәттәр менән йөрөп ятыш был урманда? Көтөүсе түгелһеңдер бит? - Буранбай ҡартҡа ике ҡулын һуҙып күреште.

- Вәғәләйкүмәссәләм, ҡусты кеше, - ҡарт ҡасҡындың ҡулын оҙаҡ ебәрмәй тотто. - Ошоға тиклем урманда көтөүен йөрөтөүселәрҙе күргәнем юҡ ине, һүҙ юҡта һүҙ булһын, тиһеңме? Әллә шаяртаһаңмы? Беҙҙең яҡта әүәләүәлдән көтөүҙе шырлыҡ араһында түгел, ялан урында, болонлоҡта йөрөтә торғайныларсы. Әллә һеҙҙең тарафта шырлыҡ араһында мал көтәләрме?

Буранбай юлында осраусы ҡарттың мәрәкәсел икәнлеген аңлап өлгөрҙө, шуға күрә уның ыңғайына һыпырып, мәрәкә йомғағын тәгәрәтә генә бирҙе.

- Юҡ та, ағай, беҙҙең яҡта ла малды далала көтәләр ҙә, төнөн шырлыҡҡа ҡыуып индереп бикләйҙәр...

Ҡарт та ыңғайы бер Буранбайҙың кинәйәле шаяртмаһын аңлап өлгөрҙө. Шуға микән йөҙөнә айырата етдилек сығарып һорай ҡуйҙы.

- Кемһең? Ҡайҙанһың?

- Мин ил, донъя гиҙеп йөрөүсе берәҙәкмен. Атым Исмәғил, үҫәргәндәрҙән булам... - Буранбай моҡсайынан ҡорот киҫәге сығарып ҡартҡа һондо. - Ошо ҡороттан башҡа ризыҡ менән һыйлай алмайым ҡунағымды...

- Ҡунағынды?! - Ҡарт бот сабып көлөп алды, шулай ҙа ул Буранбай һонған ҡороттоң ситен семтеп ҡапты. - Рәхмәт һыйыңа, аштан оло булмайым. Тик, Исмәғил туғаным, нисек инде тамъяндар биләмәһендә үҫәргән кешеһе үҙен хужа итеп тоя ала? Тағы ла шаяртаһың...

- Урман берәҙәктең йорто инде. Ул мине ашата, туйындыра, ышыҡлай. Бөтә урмандар ҙа - минең биләмәм. Ағастар ырыуҙарға бүленмәй, ҡайындар, уҫаҡтар, ҡарағайҙар - барыһы ла бер үк өммәттән... Буранбай таныш булмаған ҡарт менән әңгәмәһе ошолай көтмәгәндә мәрәкәле юҫыҡта башланып киткәненә ифрат шат ине. Шуға күрә ҡапыл аяҡ салып үлән өҫтөнә ултыра һалып алды. Ҡарт та уның ыңғайына ергә сүкте...

- Һин белеһәңме, берәҙәк ҡустым, урмандың хужаһы кем икәнлеген? - Ҡарт күҙен ҡыҫып уҡ ҡуйҙы.

- Белмәйем, кемдеке?

- Айыуҙыҡы...

- Айыуҙыҡы? - Буранбай ҡартҡа нимә тип яуапларға ла белмәне. Ихсан менән ошо хаҡтағы бәхәсен иҫенә төшөрөп йылмайып уҡ ҡуйҙы. - Шулай күпме ни был тарафта айыуҙар?

- Ҡырҡ ағасҡа бер айыу... - Мәрәкәсел ҡарт күҙен ҡыҫып ҡуйырға ла онотманы. - Ике аяҡлылары ла бар айыуҙарҙың...

- Ә улары кемдәр инде?

- Һарылар араһынан Ҡоттобай...

- Уныһы кем тағы?

- Шунда бер әҙәм...

- Ул әҙәмдең исеме лә барҙыр, моғайын?

- Ҡоттобай тинем дә...

- Уны был урмандың ҡайһы ҡайыны төбөндә осратырға була?

- Бөтә урында ла...

- Ҡоттобай был төбәктең, Рәз, Әрүәк, Ҡағы йылғалары буйындағы һәр ҡаяны, мәмерйәне беләме?

- Күҙҙәрен бәйҙәһәң дә, апарып сығара...

- Ташъяр мәмерйәһе ҡайһы урында?

- Анау ятҡан Рәз йылғаһы үренә табан. Бынан дүрт-биш саҡрым булыр, бер һыуһын аттарлыҡ...

- Баянан бире ҡарап торам, анда-һанда серәкәйҙәр күренеп ҡала, тик һеҙҙең серәкәйҙәр тешләшмәй икән, ағый?

- Һа, беҙҙең серәкәйҙәр кешеһенә ҡарап "сем" итә...

- Нисек кешеһенә ҡарап?

- Изге йәндәрҙең ҡанын һурмайҙар...

Улар байтаҡ аралашып алды. Буранбай тел сарлаған арала үҙенә кәрәкле мәғлүмәтте алғайны инде. Шулайҙа тота килеп, һикереп аяғына баҫып, ҡартты ташлап китә алманы. Ҡарттың үҙенә оҡшатып күҙен ҡыҫып кинәйәле мәрәкәле әңгәмәһен дауам итте. Ус эсендә кеүек ятҡан тауҙарға ҡулын төбәп һораша башланы.

- Ағай, ә бына беҙҙең алда ятҡан тау теҙмәләре нисек атала?

- Ҡырҡ арҡа, беҙ уны Ҡыраҡа тибеҙ...

- Ә уң ҡулдағы таш өйөмө?

- Рәз ташы. Уны Ҡағы ташы тип тә әйтәләр. Бына беҙ буйында ултырған Рәз йылғаһы ла уның итәгенән башлала...

- Ә Ҡыраҡа итәгендәге ауыл нисек атала?

- Минең ауыл булыр ул, Шығай...

- Ә анаааау алыҫта күренгән тауҙар теҙмәһен нисек атайһығыҙ?

- Бишитәк ул, уның аръяғында Иҙел аға...

- Мынау уң ҡулда суҡайып торғаны ниндәй ҡая?

- Туҡал тауы...

- Был тирәлә Шығайҙан тыш тағы ла ниндәй ауылдар бар?

- Рәз ташының аҫтында Рысыҡай, бире табан килһәң, Үткәл. Иҙел буйында Сермән, Ҡаһарман, Аҙнағол ауылдары...

- Ожмахтай ерҙәрҙә йәшәйһегеҙ икән, ағай кеше...

- Собханаллаһ...

**(Дауамы бар).**

*✓ Ижад итеү - ул ниҙелер уйлап табыу, ҡайһы өлкәлә булһа ла ниндәйҙер яңылыҡ индерә алыу. Әлбиттә, быныӊ өсөн кешенеӊ аӊ-зиһене үҫешкәнлеге, фекер тәрәнлеге һәм киӊлеге лә мөһим.*



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Рәсәй һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы, яҙыусы-сатирик, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре Венер ИСХАҠОВ ғүмеренең 30 йылын республика матбуғатына бағышлаған. Бер нисә китап авторы. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры быйылғы 105-се юбилей миҙгелен Венер Айҙар улының "Йырланмаған йырым һин" повесы буйынса ҡуйылған спектакль менән асты. Ошо уңайҙан яҙыусыны әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

# ЯҢЫ ХЫЯЛ БӨРӨЛӘНДЕ...



➔ **Венер Айҙар улы, һеҙҙе халыҡ юмористик әҫәрҙәр оҫтаһы тип белә. Ә бит был жанрҙа һәр кем яҙа алмай. Ҡасандан сатира йүнәлешендә ижад итә башланығыҙ? Ғөмүмән, һәр кемде ижадҡа алып килгән этәргес көсө була. Һеҙ ошо мәлде, сәбәпте ҡайҙа күрәһегеҙ?**

- "Һәнәк" журналында эшләй башлағас, юморескалар яҙыуға тотонорға тура килде, сөнки баҫманың стиле шуға ҡоролған. Уның биттәрендә ваҡиғалар ниндәйҙер йылмайыу, сатира аша уҡыусыға еткерелә. Ябай ғына бер фельетон да үҙе бер әҫәр кеүек тыуа һәм уның үҙенә күрә төйнәлеше, сиселеше, хәл ителеше булырға тейеш. "Һәнәк"тә эшләгәндә был жанрҙы үҙ иттем, ул миңә оҡшап китте.

Юмористик әҫәрҙәрҙең геройҙары - башлыса реаль кешеләр. Бер ваҡыт дуҫ егет алып килгән бал менән редакцияла сәй эсеп ултырабыҙ. Шул мәл институтта эшләгән бер ағай килеп инде, ул бал буйынса белгес икән. Танышҡас, унан өҫтәлебеҙҙәге татлы был ризыҡтың ниндәй төрө икәнен әйтеүен һораныҡ. Ҡунағыбыҙ балды тәмләп ҡараны ла: "Йүкә балы шикелле ул, сәскә балы шикелле ул", - тип аныҡ ҡына яуап бирә алманы. Ошо хаҡта "Белгес" хикәйәһен яҙҙым. Тағы бер юмористик әҫәрем - "Өй эйәһе" - ауылдашым тураһында ине. Ауылға ҡайтҡанымда бер ағай (ул да ҡалала йәшәй) осраны ла: "Ҡустым, анау юморесканы һин яҙҙыңмы?" - тип һораны. "Эйе", - тием, ә эстән, хәҙер был миңә асыуланыр инде, тип уйлап торам. Ул юмореска геройының бер туған ағаһы ине. "Ысынлап та, ҡустым менән килен шундайыраҡ хәлдә булдылар. Маладис, дөрөҫ яҙғанһың", - тине әңгәмәсем. Әлбиттә, үпкәләүселәр ҙә булды. Мәҫәлән, "Профессор дәресе" тигән юморескам билдәле бер кеше хаҡында ине. Ул үҙен танып, баш мөхәрриргә: "Венер Исхаҡов фән әһелдәренән көлә", - тип әйтеп ебәргән. Аңлаған кеше аңлай, аңламағандар үпкәһен туғандары, башҡалар аша ла еткерә.

➔ **Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында "Йырланмаған йырым һин" повесы буйынса ҡуйылған һинең спектакль аншлаг менән үтте. Был ваҡиғаны үҙең, уҡыусыларың нисек ҡабул итте?**

- Театрҙың баш мөхәррире Динара Ҡәйүмова минең әлеге повесты уҡып, "Шул әҫәреңде тулыһынса ебәр әле, режиссерҙарға тәҡдим итеп ҡарайым", тигәс, тәүҙә ышанмайыраҡ та торҙом. Сөнки ҡасан да булһа театрҙа минең әҫәрем ҡуйылыр тигән уй башҡа инеп сыҡҡаны ла юҡ ине. "Йырланмаған йырым һин" повесының сәхнәгә күтәрелеүе, халыҡтың эркелеп йөрөүе, ҡайһы берәүҙәрҙең, "бик фәһемле, уйға һала", тип баһа биреүе, әлбиттә, күңелдә ҡыуаныс тойғоһо, киләсәккә дәрт уята. Әйткәндәй, минең үҙемдең дә бит артист булырға теләгем бар ине. Тик, сәнғәт институтының ишеген асҡас, артабан үтергә ҡыйыулығым етмәне. Премьеранан һуң тамашасыларҙың гөрләтеп ҡул сабыуы, "автора", "автора" тип ҡысҡырыуы, сәхнәгә күтәрелеүем ошо бойомға ашмаған хыялымдың бер саткыһы һымаҡ тойолдо. Спектакль сәнғәт, ижад темаһына, сәнғәт кешеләренең тормошона арналыуы менән отошлолор, тим. Әлбиттә, бында сценарий авторы Динара Ҡәйүмованың, ҡуйыусы режиссер Айрат Абушахмановтың талантына баш эйергә кәрәк.

➔ **Әҫәрҙең йөкмәткеһе нимәнән ғибәрәт? Артистар һеҙ әйтергә теләгән фекерҙе тамашасыға еткерә алдымы?**

- Унда уйлап сығарылған бер деталь дә юҡ тиерлек, һәр береһе - тормоштан алынған, үҙем ишеткән, күргән ваҡиғалар. Хәсән исемле егет сәнғәт институтында вокал бүлектә уҡый. Уға уҡытыусылары ҙур киләсәк юрай. Әммә ул студент сағында уҡ Нәжибә исемле һатыусы ҡыҙға өйләнә. Диплом алғас, Хәсәнде Италияға ике тапҡыр стажировкаға ебәрергә теләйҙәр, әммә ҡатынының ҡаршылығы арҡаһында ул сит илдә белемен камиллаштыра алмай. Талантлы егет филармонияла эш башлай, тик ҡатынының көнләшеүе сәбәпле сәхнәнән китергә мәжбүр була. Шулай итеп, йәш йондоҙ үҙенең яратҡан эшен юғалта. Быны менән, һәр кем тормош юлдашы итеп уның талантын таныған, һөнәрен яратҡан, үҙен хөрмәт иткән кешене һайларға тейеш, тип әйтергә теләйем.

Шуныһы ҡыуаныслы - театрҙа өлкән быуынды алыштырырҙай талантлы йәштәр эшләй. Хәсән Вәлиевтың йәш сағын Алмаз Йосопов урыны-еренә еткереп башҡарыуы менән тамашасының күңелендә уйылып ҡалды. Музыкаль мелодрама булғас, ул бер нисә йыр башҡара, шуның менән үҙен моңло йырсы итеп тә танытты. Яһил Нәжибәне иһә Илүзә Күсәбаева һәләк оҫта башҡара. Өлкән Хәсәнде - Азамат Ғафаров, педагог Йәүҙәт Мусинды - Фидан Ғафаров, башҡа ролдәрҙә Светлана Хәкимова, Миңзәлә Хәйруллина, Алһыу Бәхтиева, Римма Ҡаһарманова, Гөлфиә Рафиҡова, Руслан Хайсаровтар уйнай... Тап улар миндә, артабан да сәхнә менән дуҫлыҡты дауам итергә кәрәк, тигән хыял да тоҡандырҙы әле бына...

**Байгилде МОТАЛЛАП яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҺӘР КЕШЕ ИЖАДСЫ БУЛА АЛА

**Боронғо дини китаптарҙа (Тәүратта, Ҡөрьән-Кәримдә) әҙәми затты Аллаһы Тәғәлә бар иткән тигән мәғлүмәт бар. Тәүратта Аллаһ Әҙәмде ер туҙанынан (из праха земного) яһауы хаҡында әйтелһә, Ҡөрьән-Кәримдә тәү бабабыҙҙың балсыҡҡа бер тамсы һаҫыҡ (еҫле) һыу ҡушып хасил ителеүе тураһында бәйән ителә. Кешелек ул замандарҙа организмдың химик һәм биологик составы тураһында мәғлүмәтһеҙ булғас, ер туҙаны йә иһә балсыҡ, еҫле һыу төшөнсәләре ҡулланыла. Ғөмүмән, дини китаптар бик образлы тел менән яҙылған, беҙ уның беренсе ҡатын ғына күрәбеҙ. Ә ошо образлы мәғлүмәттәр артында ниндәй күренештәр, төшөнсәләр булыуын һәр кем асыҡлай алмай. Шуға күрә дини сығанаҡтарҙы бер әкиәти әҫәрҙәргә тиңләп ҡараусылар етерлек әле.**

Миҫал өсөн Тәүратта Аллаһтың әҙәми затты үҙенең образына тура килтереп яһауы хаҡында әйтелә. Шуға күрә Аллаһтың үҙен дә кеше (аҡ һаҡаллы ҡарт) рәүешендә һүрәткә төшөрөүселәр була. Ә Әҙәмдең Аллаһ образына тура килеүе ниҙе аңлата һуң? Аллаһ - йыһандың Бөйөк Аҡылы, урта быуат философтары уны Абсолют Рух, тип тә атай. Ул - йыһандағы барса нәмәне хасил иткән Бөйөк Ижадсы. Тимәк, әҙәм балаларына ла, аҡылын ҡулланып, ижад итеп йәшәү мөмкинлеге бирелгән, тап ошо фекер кешенең Илаһи затҡа оҡшаш булыуын аңлата ла инде.

Ә беҙҙең мөхиттә кемдәрҙе тәү нәүбәттә ижад итеүсе итеп ҡарайҙар? Бына улар - шағирҙар, яҙыусылар, рәссамдар, артистар, композиторҙар, башҡа сәнғәт әһелдәре. Эйе, быны инҡар итеп булмай, әле һаналып киткән һөнәр эйәләре үҙ өлкәләренең ижади кешеләре булараҡ танылыу таба, ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшә. Ә башҡа кешеләр ижадсы була алмайҙармы һуң? Яуап бер - аҡыл-зиһене үҫешкән һәр кем, үҙенең тәбиғи үҙенсәлектәренә һәм һәләттәренә ярашлы, ижад юлына сыға ала. Ошо фекерҙе дәлилләп тороу ҙа кәрәкмәй, был - аксиома.

Әйҙәгеҙ, үрҙә әйтелгәндәрҙең хаҡ икәнен күрһәткән миҫалдар килтерәйек. Үтә лә ябай тип иҫәпләнгән һөнәр - ҡәҙимге балта оҫтаһы. Уларҙың барыһы ла бер ҡалып менән эшләгәндәй тойола. Әммә шундай балта оҫталары бар - улар һалған өйҙәр, тәҙрә ҡапҡастары, ҡапҡалар шундай итеп эшләнгән, әйтерһең дә, күҙҙең яуын алырҙай сәнғәт әҫәре! Был - ижад емеше.

Йәнә бер миҫал. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ябай урам һепереүсе ижад эйәһе була аламы? Була икән. Бынан бер нисә йыл элек Үҙәк телевидениенан Мәскәүҙең бер урам һепереүсеһе тураһында телетапшырыу күрһәткәйнеләр. Ни өсөн уны тапшырыу геройы иткәндәр? Ул үҙенә беркетелгән ихатаны гөл-баҡсаға әйләндергән: бығаса йәшеллек булмаған ихатала сәскә клумбалары эшләткән, ағас-ҡыуаҡтар ултырттырған, ихатаны уның чертеждары буйынса коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре өр-яңынан үҙгәртеп ҡорған; балалар өсөн яңы уйын майҙансығы эшләнгән; бинаның стеналары, ишектәре матур итеп буятылған, подъездар ремонтланып, стеналарына биҙәктәр төшөрөлгән; сүп һауыттарына сәскәләр төшөрөлгән, улар өсөн айырым мөйөш эшләнгән һ.б. Былар барыһы ла ябай урам һепереүсе башланғысы менән башҡарылған. Ошондай урам һепереүсене нисек итеп ижади шәхес тип әйтмәйһең инде?

Иҡтисадта, ауыл хужалығында һәм сәнәғәттә Совет власы йылдарында үҙ өлкәһендә яңылыҡ индереүселәр, уйлап табыусылар, йәғни рационализаторҙар хәрәкәте киң тарала, улар индергән яңы ысулдар, приборҙар, инструменттар һ.б. етәкселек тарафынан хуплана һәм яҡшы баһалана. Бына бер миҫал. Ябай ауыл егете Ғәзимулла Хәйбуллин Өфөлә токарь һөнәрен үҙләштерә, 1969 йылдан 1992 йылға тиклем "Гидравлика" заводында эшләй. Оҫта токарь булыуы өҫтөнә рационализаторлыҡ менән мауыға. Авиация двигателдәренең гидравлик системаһын етештереү буйынса тиҫтәләгән шәхси тәҡдимдәрен индерә, уларҙы үҙенең эшендә һынай. Һөҙөмтәлә ул индергән алымдар СССР-ҙың башҡа предприятиеларында ла ҡулланыла башлай. Г.Х. Хәйбуллинға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә.

Табиптар араһында ла ижади эшмәкәрҙәр бик күп, был иң элгәре ғалим-табиптарға ҡағыла. Алтын ҡуллы хирургтар, иҫ китмәле, ғәйәт ҡатмарлы опрерациялар яһап, кеше һаулығын төҙәтә, үлемдән ҡурсалай. Улар шул уҡ хирургия өлкәһендә яңы алымдар уйлап таба, үҙҙәренең чертеждары буйынса яңы инструменттар эшләтә.

Уҡытыусы - йәмғиәт һәм дәүләт өсөн иң кәрәкле, ил киләсәген билдәләүсе һөнәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың күбеһе ҡалыплашҡан методтар сиктәренән сыҡмай, һәр дәресе шаблон буйынса уҙа. Тик белем биреүгә ижади ҡараған уҡытыусылар ғына үҙ эшендә яңы алымдар ҡуллана, уларҙың шәхси уҡытыу системаһы барлыҡҡа килә. Ошондай педагогтарҙың уҡыусылары уҡытыусыларын ныҡ хөрмәт итә, уларҙың уҡыу мотивацияһы шул тиклем көслө, яратҡан уҡытыусылары менән дәрестән һуң ҡалып, сәғәттәр буйына үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған темаларҙы өйрәнә. Алдынғы уҡытыусыларҙың педагогик ижад емештәре - республика, Рәсәй һәм халыҡ-ара предмет олимпиадаларында еңеүселәр һәм призлы урын алыусылар. Педагог-новаторҙарҙың киң билдәлеләренең береһе, беҙҙең яҡташыбыҙ, химия уҡытыусыһы Лиза Ҡыям ҡыҙы Агадуллина ине. Уның йөҙҙән ашыу уҡыусыһы Башҡортостанда һәм Рәсәйҙә химия буйынса олимпиадаларҙа еңеүсе йә иһә призер булды. Уға Башҡортстандың һәм Рәсәйҙең халыҡ уҡытыусыһы исеме бирелде. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Рәсәй мәғарифының белем биреү системаһында уҡыу пландары, программалары унификацияланды, барса уҡытыусылар ҙа бер үк дәреслектәр, бер үк дидактик методтар ярҙамында уҡытырға мәжбүр була. Етмәһә, эш хаҡы түбән булыу сәбәпле, педагог 1,5 - 2 ставкаға эшләй, ә бындай көсөргәнешле эш ижадҡа ваҡыт та, көс һәм теләк тә ҡалдырмай.

Ижад итеү - ул ниҙелер уйлап табыу, ҡайһы өлкәлә булһа ла ниндәйҙер яңылыҡ индерә алыу. Әлбиттә, быныӊ өсөн кешенеӊ аӊ-зиһене үҫешкәнлеге, фекер тәрәнлеге һәм киңлеге лә мөһим. Ижадта теләк-мотивацияның роле ҙур, үҙеңдең тормошоңда һәм эшеңдә яңынан-яңы маҡсаттар ҡуя белеү фарыз. Йәнә шул: тәбиғи һәләттәрең бар икән, уларҙы үҫтереү өсөн бик күп нәмәләрҙе өйрәнергә, туҡтауһыҙ уҡырға һәм үҙүҙеңде камиллаштырырға һәм көс һалырға кәрәк була. Балаларҙың ижади мөмкинлектәрен бәләкәй сағынан уҡ асыу, уларҙы ниҙелер уйлап табырға өйрәтеү, һәр кемдең ниҙелер булһа ла яңырта ала икәндәренә инандырыу хаҡында ҡайғыртырға һәм, иң мөһиме, уларҙы үҙ йәше мөмкинлектәре сиктәрендә ижади түңәрәктәргә йәлеп итеү бик тә урынлы булыр тип ышанайыҡ. Балаларҙы ижади эшкә ни тиклем иртәрәк өйрәтәһең, ул һуңынан шул тиклем ҙур ҡаҙаныштарға илтәсәк.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

**✓ *Башҡорт солоҡсолоғоноң үҙенсәлеге шунда: урмандағы эштәр ике кеше көсө менән генә башҡарыла. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, башҡорт солоҡсоһо урманға күмәкләп йөрөмәй.***



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҺАБЫН ҒҮМЕРҘЕ ҠЫҪҠАРТА

■ Һабында һәм башҡа гигиена саралары составындағы химик антибактериаль өҫтәмәләр ғүмер оҙайлығын ҡыҫҡарта. Ҡомаҡтарҙа үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, имеҙеүсе инә ҡомаҡ антибактериаль өҫтәмәләрҙең береһенә - трихлокарбан тәьҫиренә дусар ителһә, уның балаларының ғүмере ярайһы уҡ ҡыҫҡа була. Быуаҙ инә ҡомаҡтарҙы ике төркөмгә бүлеп, бер төркөмдөң аҙығына трихлокарбан өҫтәгәндәр. Уларҙың ҡанындағы был матдә 0,6 процент булған, 15 минут душ ингәндән һуң кешенең ҡанында был матдәнең күләме лә ошо һанға тиң. Химик өҫтәмә менән туҡланған ҡомаҡтарҙың ғүмер оҙайлығы кәмерәк булған. Химикат ата ҡомаҡтарҙың енси ағзалары үҫешенә лә насар йоғонто яһай.

■ Ас көйөнсә мөһим ҡарарҙар ҡабул итергә ярамай, тип раҫлай Макс Планка институты ғалимдары. Улар фекеренсә, асығыу тойғоһо кешене уйланылмаған ҡабалан аҙымдарға этәреүе ихтимал. Баҡтиһәң, ашҡаҙан буш ваҡытта ҡарар ҡабул итеүгә баш мейеһенең бөтөнләй икенсе өлөшө яуап бирә икән. Ғалимдар емеш-еләк себенендә тәжрибә үткәреп ҡараған һәм ас ваҡытта хәүефкә барыу механизмы эшләүен асыҡлаған. Ваҡ себендәр инстинктив рәүештә углекислы газдан ҡурҡа, әммә асыҡҡан мәлдәрендә улар газға ҡарамайынса аҙыҡҡа яҡынлаша. Ғалимдар фекеренсә, был - нервылар системаһының ике өлөшөнөң компромисы һөҙөмтәһе, бындай компромисҡа кешенең нервылар системаһы ла һәләтле.

■ Англияла үткәрелгән һорау алыуҙарға ышанһаң, тышҡы матурлыҡтың бөтөн күрһәткестәре буйынса 30 йәштән өлкәнерәк ҡатын-ҡыҙҙар йәш ҡыҙҙарҙы күпкә үтеп китә. Тикшеренеү авторҙары әйтеүенсә, "матурлыҡ" төшөнсәһенә үҙенде башҡаларға дөрөҫ күрһәтә белеү, шулай уҡ аҡыл, холоҡ инә. Респонденттарҙың 70 проценты был исемлеккә ҡатын-ҡыҙҙың үҙенә булған ышаныһын өҫтәй. Уларҙың 46 проценты матурлыҡты матур кейенә белеүҙә, тип иҫәпләй. Әйткәндәй, һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың 65 проценты билдәләүенсә, йәш өлкәнәйә барыу менән улар тирә-йүндәге кешеләрҙең уларҙың тышҡы ҡиәфәте тураһындағы фекеренә ҡолаҡ һалыуҙан туҡтай, сөнки үҙҙәрен күпкә ышаныслыраҡ тоя һәм үҙҙәренең матурлығын һаҡлай белә.

■ Мәскәү дауаханаларында махсус компьютер системаһы медикаменттар тәғәйенләй башлаясаҡ. Берҙәм медицина мәғлүмәти-аналитик система (ЕМИАС) төрлө йүнәлештә эшләгән табиптарҙың бер-береһенең ҡарарын иҫәпкә алыуын һәм препараттарҙы дөрөҫ тәғәйенләүен күҙәтергә тейеш. Мәҫәлән, ул дарыуҙарҙың функцияһы һәм тәғәйенләнеше буйынса бер-береһен ҡабатламауына, бер юлы бер нисә дарыу ҡулланғанда аллергия һәм башҡа насар тәьҫирҙәр тыуҙырмауына булышлыҡ итәсәк. Юғары иҡтисади мәктәптең Һаулыҡ һаҡлау иҡтисады институты директоры Лариса Попович әйтеүенсә, табиптар пациентты бер йүнәлештә генә дауалай, ә уның башҡа ауырыуҙары, башҡа табиптар билдәләгән дарыуҙар ҡабул итеүе бөтөнләй иҫәпкә алынмай. Табипҡа дарыуҙы дөрөҫ һайларға ярҙам итеүсе был система күп илдәрҙә танылыу тапҡан. АҠШ-та хатта пациенттар был ҡоролма ярҙамында үҙенә-үҙе дауа һайлай ала. Белгестәр билдәләүенсә, был вариант Рәсәй өсөн түгел, илдә былай ҙа халыҡ үҙен-үҙе дауалау менән йыш булыша.

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ӘЛЛӘ ДӨРӨҪ, ӘЛЛӘ УЙҘЫРМА БЫЛ...

## солоҡто айыуҙан һаҡлауҙың боронғо ысулдары

**Солоҡсолоҡ - ул халҡыбыҙҙың тарихы. Сит тарафтарҙан килгән ҡунаҡтар был турала ихлас ҡыҙыҡһына. Ә беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, был шөғөл тураһында ғорурланып һөйләргә яратабыҙ. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ваҡыты менән яңылыш һөйләп тә ҡуябыҙ, буғай. Әйҙәгеҙ, әлеге һөйләшеүҙә солоҡто айыуҙан һаҡлау ысулдарына байҡау яһайыҡ.**

Билдәле булыуынса, борон-борондан айыу солоҡто туҙҙырған. Солоҡсо үҙ сиратында уны айыуҙан һаҡлау өсөн төрлө ысулдар ҡулланған. Китаптарҙа был турала апаруҡ ҡына мәғлүмәт тупланған. Ә хәҙер мәҡәлә-нең төп маҡсатын билдәләйек - ә китапта яҙылғандар дөрөҫлөккә тап киләме икән? Шуны әйтергә кәрәк, был тәңгәлдә күңелде өйкәп торған һорауҙар байтаҡ ҡына. Бына, әйтәйек, мин ваҡыты менән ҡайһы бер китапта һүрәтләнгән ысулға ҡарап торам да, был ысынлап шулай булды микән, тип аптырап ҡуям. Шунан шик тыуа күңелдә. Беҙҙең ата-бабалар был ысулды ысынлап ҡулландымы икән? Уйҙырма түгел микән улар? Был һөйләшеүгә гәзит уҡыусылар, тәү сиратта, солоҡсолар әүҙем ҡушылыр, тигән өмөттә ҡалам.

**Хәҙер беренсе һүрәткә күҙ һалайыҡ. "Был ысул кәштә тип атала, башҡорттар уны айыуҙы енәйәт өҫтөндә тотоу өсөн ҡуллана", тип яҙа автор.**

Күреп тораһығыҙ, кәштә тигән ҡоролма өлкән быуынға таныш магазин үлсәүен хәтерләтә. Автор был ысулды ошолай аңлата *(йәйә эсендәге һорауҙар минеке)*. "Солоҡ ауыҙының ҡаршыһына кәштә ҡуялар *(арҡыры ағасты әйтәм, бындай ауыр ағасты нисек өҫкә күтәрмәк кәрәк тә уны ҡарағай олонона нисек нығытып бәйләмәк кәрәк? Ә һүрәттә бәйләү тураһында мәғлүмәт юҡ, арҡыры ағас ҡарағайҙың теге яғында тора)*. Кәштәгә емтек һалалар *(Тимәк, айыу солоҡ туҙҙырырға килмәй? Ул емтеккә ҡыҙығып киләме ней? Ниндәй емтек һалына икән? Боланмы? Үгеҙме? Тауыҡ ботомо?)*. Айыу ағасҡа менә һәм кәштәгә ултыра *(Аңлатма үтә ябай - менә һәм ултыра)*. Кәштә ағастан айырыла *(Ул нисек айырылып китә икән?)* һәм айыу һауала эленеп ҡала *(Ауырлығы ярты тоннаға хәтлем булған айыу кәштәгә менеп ултырғас, кәштә аҫҡа табан китергә һәм ҡарағай олонона төкөргә тейеш була түгелме һуң?)*. Әгәр айыу әҙ генә өлгөрмәһә, ул ағасты ураҡҡан ҡаҙыҡтарға *(Ҡаҙыҡтар нисек итеп осло яғы өҫкә ҡаратып ергә ҡатыла икән?)* ҡолап төшә. Артабан айыу ергә һикереп *(Ергәләге ағасҡа һикерергә мөмкинселек булғанда ул ни өсөн ергә һикерергә тейештер инде?)* ҡаҙыҡтарға ҡаҙалып үлә. Һикермәһә, солоҡсолар уны уҡ менән атып ала" *(Солоҡсо урман төпкөлөнән кире ауылға ҡайтып, уҡ-һаҙағын алып, кеше йыйып алып килгәнсе айыу ике-өс көн буйына уларҙы кәштәлә көтөп ултыра микән?)*.

Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Борон кәштә булдымы икән? Әллә булманы микән? Күреп тораһығыҙ, ышаныслы һәм төплө яуап юҡ. Ә минең һығымта ошолай - башҡорт солоҡсолоғонда кәштә исемле ҡоролма булмаған! Үҙемдең һығымтаны ошолай иҫбатлай алам. Беренсенән, башҡорт халҡы борон-борондан һәр нәмәне мөмкин тиклем ябай итеп эшләргә тырышҡан. Беҙҙең халыҡҡа ҡатмарлаштырыу хас күренеш түгел. Кәштә эшләрлек кимәлдә беҙ егәрле лә түгелбеҙ, буғай. Тейһә - тейенгә, теймәһә - ботаҡҡа, тигән ҡараш менән йәшәп өйрәнгәнбеҙ бит беҙ. Икенсенән, башҡорт солоҡсолоғоноң үҙенсәлеге шунда: урмандағы эштәр ике кеше көсө менән генә башҡарыла. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, башҡорт солоҡсоһо урманға күмәкләп йөрөмәй. Ул солоҡ юныу, таҙғаҡ эшләү, туҡмаҡ бәйләү, бал алыу, түмәр-умарта күтәреү кеүек эштәрҙе ярҙамсыһы менән башҡара. Шик юҡ, кәштәне ике кеше эшләй алмай. Шуға бындай ҡоролманың булыуы ла бик икеле. Өсөнсөнән, был ҡоролма кеше ғүмере өсөн үтә




*ТАБИП КӘҢӘШЕ*

# ЯБАЙ, ЛӘКИН МӨҺИМ ҠАҒИҘӘЛӘР

**Сәләмәт йәшәү рәүеше алып барғандар өлкән йәшкә тиклем һаулығын һаҡлап ҡала ала. Ә бына шуға нисек өлгәшергә һуң?**

Был турала бөгөн бик күп яҙыла, ләкин һәр кем үтәй ала торған ябай ғына ҡағиҙәләр, үкенескә, күпселек тарафынан һанға һуғылмай. Ә бит һаулыҡ һәр кемдең үҙ ҡулында һәм сәләмәт булыр өсөн әллә ниҙәр эшләргә лә кәрәкмәй, фәҡәт үҙеңде тәртиптә тотоп, яҡшы ғәҙәттәргә күнегеү генә кәрәк.

**Белгестәр сифатлы оҙон ғүмерле булыуҙың бер нисә төп ҡағиҙәһе менән таныштыра:**

***Беренсеһе - яҡшы йоҡо.*** Һау-сәләмәт булыу һәм үҙеңде һәйбәт тойоу өсөн йоҡоно туйҙырыу бик мөһим. Йоҡо оҙайлығы һәр кемдең шәхси ихтыяжына бәйле, тик шулай ҙа бының өсөн тәүлегенә 7 сәғәт бүлеү яҡшы. Йоҡо-



һоҙлоҡ гормондар боҙолоуына килтерә, даими рәүештә кәйеф булмай.

***Икенсе ҡағиҙә - дөрөҫ туҡланыу.*** Ул оҙон ғүмерлектең иң мөһим талаптарының береһе. Углеводтар һәм хайуан майы менән мауыҡмау хәйерле, аҡһым һәм күҙәнәккә бай ризыҡтар (йәшелсә, емеш-еләк) ҡулланыу көнөнә 500 грамдан да кәм булмаһын. Көрпәле ризыҡтар, йогурт, сәтләүектәргә өҫтөнлөк бирегеҙ.


4


5

ҡурҡыныслы. Ҡарағайға үрмәләү түгел, һүрәткә ҡарау менән әллә нисек булып китә. Аллам һаҡлаһын, яңылыштан осло ҡаҙыҡтарға ҡолап китһәң... Кәштә башына килеп төшһә... Арҡыры ағас ысҡынып ҡуйһа... Дүртенсенән, һәр солоҡло ҡарағайға кәштә эшләп булмай. Ярай, бер нисәүһенә эшләрһең дә, тей. Ә айыу кәштәһеҙҙәрен рәхәтләнеп туҙҙырасаҡ. Бишенсе дәлил иң мөһиме - бөгөн урманда бындай ҡоролманың ҡалдыҡтары юҡ. Әгәр элек кәштә булған булһа, бөгөн, һис шикһеҙ уның ҡалдыҡтары сереп ятыр ине. Кемдер уларҙы барыбер күрер ине. Бына, әйтәйек, миңә уларҙы осратырға насип булманы. Алтынсынан, бөгөн өйрәнеү өсөн мәғлүмәт юҡ. Атайым кәштәне ошолай эшләгәйне, олатайым эшләгән кәштә ошолайыраҡ ине, тип һөйләгән солоҡсо юҡ. Күп һораштым мин был турала. Әммә берәү ҙә кәштә тураһында мәғлүмәт бирә алманы. Бәлки, ундайҙар һеҙҙең арала барҙыр, хөрмәтле гәзит уҡыусылар?..

Әшулай ҙа һүрәт бар бит, тип кемдер әйтеп ҡуйыр. Был хәлдә мин ошолай аңлата алам. Был автор урманға бармаған! Кәштәне үҙ күҙҙәре менән күрмәгән! Һүрәтте кеше һөйләүе буйынса төшөргән! Быны иҫбатлауы ауыр түгел. Солоҡсоға игтибар менән ҡарағыҙ әле. Ул һис кенә лә башҡорт кешеһенә оҡшамаған! Уны башҡорт тип әйтергә һис кенә лә тел әйләнмәй. Ней кейеме тура килмәй, ней кәүҙәһе, тигәндәй. Солоҡсо тип әйтер инең, ней әркәтәүҙе биленә бәйләмәгән, ней ләңгеһен алмаған. Ҡорт ҡарарға ялан-баш менеп барған була бит әле, берәү әйтмешләй, нишана *(быныһы артығыраҡ булды, буғай).* Етмәһә, сәсе килеп торол етек. Башында түбәтәйе булһа, ней асыу. Һеҙ минең менән, моғайын, килешерһегеҙ. Әгәр автор үҙ күҙҙәре менән башҡорт солоҡсоһона һәм кәштәле ҡарағайға ҡарап торһа, уның һүрәте бөтөнләйе менән башҡа булыр ине! Был автор урманда булмаған, тигән шик белдерергә урын бар шул. Күреп тораһығыҙ, солоҡло ҡарағай эргәһендә бер ағас та, бер ҡыуаҡ та, хатта бер үлән дә юҡ. Әйтерһең дә, был ҡарағай ҡола яланда яңғыҙы ғына үҫеп ултыра.

**Икенсе һүрәттәге ысул баҫма-бәүелсәк тип атала.** Был ысулды автор ошолай аңлата. "Яҡында үҫкән йәшерәк ағасты солоҡ ауыҙы янына тартып һиртмәк һыҙайҙар. Айыу ағас ҡыуышына менә һәм эленеп торған баҫма-бәүелсәккә баҫа. Ул, тәмле ризыҡҡа ымһынып, ҡапҡасты аса башлай. Айыу һиртмәккә тейеүе була, баҫма-бәүелсәк менән бергә ситкә сирғып китә. Хәҙер айыу баҫма-бәүелсәктән төшә алмай. Һикерер ине, ағасты уратып ҡатылған осло ҡаҙыҡтарҙан ҡурҡа".

Был ысулға ла һорауҙар күп. Бына һеҙ төп һорауға яуап биреп ҡарағыҙ әле - ни өсөн бер сәбәпһеҙ-ниһеҙ айыу баҫма-бәүелсеккә менеп ултырырға тейеш? Бына, әйтәйек, минең был һорауға яуап юҡ. Бәлки, гәзит уҡыусылар араһынан кемдер берәү төплө итеп аңлата алыр? Әйткәндәй, айыу ағасҡа көслө тырнаҡтары менән йәбешеп менә. Ә һүрәттә ул ағасты, һабантуйҙа ҡолғаға менеп барған егет һымаҡ, ҡосаҡлап алған.

Ғалим булараҡ шуны әйтер инем - фән өлкәһендә үҙе барып күрмәй, тотоп ҡарамай, ҡат-ҡат тикшермәй, кеше һөйләгәндә генә яҙып алған өйрәнеүҙәр йыш осрап тора. **Минең уйымса, ошондай еренә еткереп өйрәнелмәгән эштәрҙең береһе булып туҡмаҡ тураһындағы мәғлүмәт тора (өсөнсө һүрәт).** "Боронғо ысулдарҙың иң боронғоһо һәм киң таралғаны - туҡмаҡ", тип яҙа был автор. Был, әлбиттә, дөрөҫ һығымта. Әммә авторҙың һүрәте дөрөҫ түгел. Уның хаталарын һанап китәйек. Берҙән, туҡмаҡ үҙ төҙөлөшө буйынса мискә һымаҡ булмай. Тимәк, тип ышаныслы һығымта яһарға була, был автор ысын туҡмаҡты үҙ күҙе менән күрмәгән! Икенсенән, "мискә" (уны туҡмаҡ тип атап булмай) дөрөҫ бәйләнмәгән. Әгәр ул һүрәттә күрһәтелгәнсә бәйләнһә, айыу уның менән нишләп һуғышып торһон? Бауҙы өҙҙө - "мискә" аҫҡа осто. Өсөнсөнән, ысын туҡмаҡ ҡапҡаҡ тапҡырында тора. Ә һүрәттә йыуан бүрәнә ҡапҡаҡтан күпкә аҫта урынлашҡан. Шуға ул айыуға ҡамасауламай. Айыу уны олондоң икенсе яғынан урап үтә ала. Солоҡ өҫтә булғас, нишләп айыу аҫта торған бер бүрәнә менән һуғышырға тейеш әле?

**Әхәҙер дөрөҫ туҡмаҡ тураһында һөйләшәйек. Ул үҙ төҙөлөшө буйынса ҙур сукмарҙы хәтерләтә (дүртенсе һүрәт).**

Һәр нәмәнең рәт-сираты булған кеүек, туҡмаҡ эшләүҙең үҙ тәртибе бар. Ул ороһо булған (русса кап була) ҡайындан эшләнә. Туҡмаҡты бәйләүҙең мәғәнәһе шунда: **ул бәйләнгән бау эскә йәшерелә (бишенсе һүрәт).** Бындай осраҡта айыу уны үткер тырнаҡ-тештәре менән өҙә алмай. Бөгөн ошо туҡмаҡ район ветсанцияһы эргәһендәге музейҙа һаҡлана. Осҭаның был туҡмаҡты эшләп биргән мәлендә мин үҙем шәхсән ҡатнаштым. Ороло ҡайынды һайлап алыуҙан башлап эштең аҙағына хәтлем йөрөнөм.

**Һүҙемде тамамлап…**

**Үҙ тарихыбыҙҙы аҙерәк тәртипкә килтереп алырға кәрәктер ул. Бында төп һүҙҙе, әлбиттә, солоҡсолар әйтергә тейештер. Уларға, әүҙемерәк булһағыҙ ине, тип өндәшке килә. Ә өйрәнеүселәр иһә, үҙ сиратында, мөмкин тиклем тулы мәғлүмәт туплап, уны дөрөҫ итеп китап биттәренә сығарһа ине.**

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**ауыл хужалығы фәндәре докторы.**
**Бөрйән районы.**

***Өсөнсөһө - йөрәгегеҙ хаҡында хәстәрлек күрегеҙ.*** Йөрәктең һаулығы өсөн дә дөрөҫ туҡланыу бик кәрәк. 30 йәштән һуң мотлаҡ рәүештә йылына бер тапҡыр электр кардиограммаһы үтеп, йөрәк эшмәкәрлеген контролдә тотоғоҙ.

***Дүртенсе: кәүҙә ауырлығын контролдә тотоу.*** Әгәр артыҡ бер нисә кг ауырлыҡ бар икән, кисекмәҫтән унан арыныу сараһы күрегеҙ. Был бөтөн ағзаларға, шул иҫәптән быуындар һәм һөйәктәргә баҫымдан һаҡлай. Өлкән йәштә енел кәүҙәле булыу кәүҙә һөлдәһенә ауырлыҡ килтермәй.

***Бишенсе ҡағиҙә - сынығырға тырышығыҙ.*** Был иһә иммунитетты нығыта. Ниндәй көн торошона ҡарамаҫтан, һыуыҡ йә ямғырмы - саф һауаға сығып йөрөргә ғәҙәтләнегеҙ. Үҙегеҙҙе йылыға өйрәтмәгеҙ, бүлмәгеҙҙә форточканы асып йоҡлағыҙ. Туҡланыу рационын А витамины һәм бета-каротин менән байытығыҙ.

***Алтынсыһы - хәрәкәт!*** Ялҡаулыҡты янығыҙға ебәрмәгеҙ, күберәк йөрөргә (көнөнә 30 минут булһа ла), хәрәкәтләнергә тырышығыҙ, юғиһә, ҡыбырҙамай ултырыу йә ятыуҙан организмда кислород ҡытлығы тыуа, ҡан тамырҙары һығылмалығын юғалта. Күберәк йөрөргә! Күп ҡатлы йорттә йәшәһәгеҙ, лифттан баш тартығыҙ, баҫҡыстан йәйәү төшөп-күтәрелеү бына тигән физик күнекмә ул. Шулай уҡ, әгәр яҡын араға барырға кәрәк булғанда, йәмәғәт транспортына ла ултырырға тырышмағыҙ, йәйәү атлағыҙ.

***Етенсе ҡағиҙә, бәлки, ҡайһы берәүҙәргә аптыратыр, ләкин ул эшегеҙҙә артыҡ фиҙаҡәрлеккә бирелеп китеүҙән тыйылыу.*** Был илке-һалҡылыҡты аңлатмай, әлбиттә, шул уҡ ваҡытта, үҙегеҙ онотоп, баштан-аяҡ эшкә сумыуҙан, һуңға тиклем ҡалып ултырыуҙан йәки өйгә эш алып ҡайтыуҙан тыйылыу хәйерле, сөнки даими артыҡ көсөргәнештән ҡанға күпләп стресс гормондары бүленә. Адреналин менән кортизол йоҡларға ҡамасаулай.

***Һигеҙенсе бурыс - ваҡыт табып, мөмкин тиклем табипҡа күренеп тороу, сөнки күпселек сирҙе ваҡытында асыҡлау уны дауалауҙы еңеләйтә.*** Ваҡыт-ваҡыты менән тейешле анализдар тапшырығыҙ, ҡан баҫымығыҙҙы контролдә тотоғоҙ, флюорография үтегеҙ. Ҡатын-ҡыҙҙарға иһә даими рәүештә гинеколог менән маммологҡа күренеп тороу талап ителә. Иң һәйбәте, быларҙың бөтәһен дә диспансерлаштырыу ваҡытында эшләү уңайлыраҡ та буласаҡ.

***Туғыҙынсы ҡағиҙә - тәмәкенән баш тартыу.*** Тәмәке кеше ғүмерен 10 йылға ҡыҫҡарта, тип белмәйенсә әйтмәйҙәрҙер, моғайын. Был насар ғәҙәттән баш тартыу йөрәк, үпкә сирҙәре, яман шеш кеүек хафаларҙан һаҡлай. Әгәр бөтә ошо талаптарҙы теүәл үтәгән хәлдә, унынсы ҡағиҙә үҙенән-үҙе тормош юлдашығыҙға әүерелер, сөнки уның шарты - бәхетле булыу. Ә бәхетлеләр көләргә ярата, был да кеше һаулығы тураһында һөйләй бит. Ыңғай хистәр кешенең психологик хәлен көйләй һәм шул уҡ ваҡытта йылмайыу менән көлөү бит - йөҙөгөҙ өсөн яҡшы гимнастика ла буласаҡ.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙынсы хат "Әхлаҡ үрҙәре һәм уларға булған мөнәсәбәт"

Бына нимә тураһында телгә алғы килә. "Урыҫтарҙыҡы тураһында яҙмалар" һәм "Кисәнге, бөгөнгө һәм иртәнге тураһында диалогтар"ҙа мин урыҫ холҡонон бөгөн нисектер игтибар биреү ҡаралмаған ҡайны бер һыҙаттарын һыҙыҡ өҫтөнә алып ҡуйғайным: яҡшылыҡ, алсаҡлыҡ, сыҙамлыҡ, милли тәкәбберлек юҡлығы һ.б.

"Ә "Яҙмаларҙа" урыҫ кешеһенең кире яҡтары ҡайҙа булған?" - тип һорарға хаҡлыһығыҙ. Урыҫтарға тик яҡшы һыҙаттар ғына хас булып, башҡа халыҡтарҙа был юҡмы ни? Уҡыусы, теләге булһа, һуңғы һорауға "Яҙмаларҙа" уҡ яуап табасаҡ: мин унда тик урыҫ халҡы тураһында ғына әйтмәйем.

Ә инде урыҫтарҙың етешһеҙлектәренә ҡағылышлы тәүге һорауға килгәндә, уларҙа етешһеҙлектәр бөтөнләй юҡ, тип иҫәпләмәйем: киреһенсә, уларҙа был күп, әммә...

Халыҡты уның етешһеҙлектәренә ҡарап баһалай алабыҙмы икән? Сөнки сәнғәт тарихы яҙылғанда, уға иң юғары өлгөштәр, иң яҡшы әҫәрҙәр генә индерелә. Урта ҡул йәки насар әҫәрҙәр буйынса живопись йәки әҙәбиәт тарихын төҙөп булмай.

Әгәр беҙ берәй ҡаланы белергә теләһәк, тәү сиратта уның иң яҡшы биналары, майҙандары, һәйкәлдәре, урамдары, иң матур урындары менән танышабыҙ. Медицина йәки әхлаҡи яҡтан айырым кешеләр менән танышһаҡ - икенсе мәсьәлә.

Беҙ бит халыҡҡа ҡараш тураһында һөйләйбеҙ. Халыҡ сәнғәт ижады кеүек: "Яҙмаларҙа" минең һәр халыҡҡа ҡарашым шундай.

Һәр халыҡ тураһында ул тотоп йәшәгән әхлаҡи үрҙәр һәм идеалдарға ҡарап һүҙ йөрөтөргә кәрәк. Һәр халыҡҡа ҡарата, иң аҙ һанлыларына ла, яҡшы мөнәсәбәттә булырға кәрәк! Ошо иң хаҡ, иң яҡшы ҡараш.

Дөйөм алғанда, ниндәй ҙә булһа насарлыҡ теләү һәр ваҡыт аңлашылмаусанлыҡҡа илтә. Яҡшылыҡ теләү иһә, киреһенсә, дөрөҫ танып белеүгә юлдар аса.

Самолет "һауаға ҡанаттарын терәгән" өсөн түгел, ә өҫкә ҡарай, күккә уҡталған өсөн ергә ҡоламай... Халыҡта иң мөһиме - уның идеалдары.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

# ТВ ПРОГРАММАҺЫ





## 3 ФЕВРАЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.25, 0.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.55 Премьера. "Время героев". [16+]
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.40 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Уголь". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 3.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [12+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 "100 имён Башкортостана". [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). КХЛ.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**1.00 Спектакль "Прерванная свадьба". [12+]**
**4.00 Телецентр. [12+]**
**5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

## 4 ФЕВРАЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Уголь". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Д/ф "Никогда больше". [12+]**
**23.00 Бишбармаҡ. [12+]**
**2.15 Спектакль "Зятья Гюргюри". [12+]**
**4.45 Письма солдатам. [12+]**

## 5 ФЕВРАЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Уголь". [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Круто ты попал...". К 65-летию Игоря Матвиенко". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00, 4.30 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байыҡ представляет… [12+]**
**2.30 Спектакль "Белый пароход". [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

## 6 ФЕВРАЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Уголь". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 12.15, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**16.45 Замандаш. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск). КХЛ.**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]**
**4.00 Телецентр. [12+]**

## 7 ФЕВРАЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Т/с Премьера. "Первый номер". [18+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Один в один". [12+]
0.30 "Истории Большой Страны". [12+]
1.30 Х/ф "Пусть говорят". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Ҡурай даны. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**16.45 Ради добра. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Мегасело. [12+]**
**21.00 К юбилею журналиста Азамата Саитова. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**2.45 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**5.15 Мама. [12+]**

## 8 ФЕВРАЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Круто ты попал...". К 65-летию Игоря Матвиенко". [16+]
11.05 Поехали! [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Наше всё". [12+]
13.05 Д/ф "Торговцы счастьем".[16+]
14.00 Д/ф "Империя: Петр I". 300 лет со дня смерти Петра I". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Народный ледниковый". [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.10 Премьера. "Закрытый показ". [16+]
2.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Дашкина любовь". [16+]
0.40 Х/ф "Радуга жизни". [12+]
4.06 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45, 3.45 Мегасело. [12+]**
**8.30 Хазина. [6+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Преград. Net. [6+]**
**11.30 Ат уйнатып. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт группы Хазина. [12+]**
**19.00 Ради добра. [12+]**
**19.15 Вопрос+Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Байыҡ представляет… [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.00 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**23.15 Башҡорт йыры представляет… [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Спектакль "Крах и отчаяние". [12+]**
**2.45 Бишбармак-. [12+]**
**4.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 "100 имён Башкортостана". [12+]**

## 9 ФЕВРАЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.30 Т/с "Участок". Кинопоказ. "30 лет вместе". [12+]
15.50 Юбилейный концерт Игоря Матвиенко. [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Территория". [18+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.30, 2.20 Х/ф "Мечтать не вредно". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00, 1.30 Д/ф "Операция "Аргонавт". [16+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.04 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 Ради добра. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30 Дорога к храму. [6+]**
**16.00 Честно говоря. [12+]**
**16.45 Спектакль "Горка". [12+]**
**18.15 Газпромтрансгаз Уфа. [12+]**
**18.30 Мегасело. [12+]**
**19.15 Әлләсе… [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Словом я обращаюсь своим". Расуль Сагитов. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Башҡорт йыры. [12+]**
**2.00 Спектакль "Дама без камелий". [12+]**
**4.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Февраль (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (4) дүшәмбе | 7:22 | 9:02 | 13:30 | 16:06 | 17:59 | 19:39 |
| 4 (5) шишәмбе | 7:20 | 9:00 | 13:30 | 16:08 | 18:01 | 19:41 |
| 5 (6) шаршамбы | 7:18 | 8:59 | 13:30 | 16:10 | 18:03 | 19:43 |
| 6 (7) кесе йома | 7:17 | 8:57 | 13:30 | 16:12 | 18:05 | 19:45 |
| 7 (8) йома | 7:15 | 8:55 | 13:30 | 16:14 | 18:07 | 19:47 |
| 8 (9) шәмбе | 7:13 | 8:53 | 13:30 | 16:16 | 18:09 | 19:49 |
| 9 (10) йәкшәмбе | 7:11 | 8:51 | 13:30 | 16:17 | 18:11 | 19:51 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БЕЛЕП ҠУЙ!

# ЯҢЫ ЙЫЛ - ЯҢЫ ЗАКОНДАР



• Быйыл ғинуарҙан ир менән ҡатын айырылышҡан осраҡта түләйәсәк дәүләт пошлинаһы 650 һумдан 5 меңгә тиклем артты. Шулай уҡ граждандар исемен, фамилияһын йәки атаһы исемен алыштырыу өсөн дә элекке 1 мең 600 һум урынына 5 мең һум түләргә тейеш буласаҡ.

• Ғинуарҙан Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрынан (ЕГРН) ҡағыҙҙағы күсермә алыу өсөн - 1740 һум, электрон күсермәгә 700 һум түләтелә. Ә бына ҡуртым килешеүен Дәүләт реестрында теркәтеүгә дәүләт пошлинаһы ябай граждандарға - 4 меңгә, ә юридик берәмектәргә 44 меңгә төшәсәк.

• Ошо айҙан курорт йыйымына алмашҡа туризм һалымы киләсәк. Әгәр йыйымды ошоға тиклем турист үҙе түләһә, һалымды ҡунаҡхана хеҙмәттәре менән тәьмин итеүсе түләйәсәк. Ысынында иһә финанс йөгө ҡунаҡханала йәшәүселәр иңенә төшә, сөнки һалым суммаһы бүлмәләр хаҡына индерелә. 2025 йылда уның күләме (ставка) йәшәү хаҡының 1 процентын тәьмин итә, ләкин тәүлегенә 100 һумдан да кәм булмаясаҡ.

• Марттан алып "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы аша банктарҙан кредит, шул иҫәптән кредит карталары һәм Халыҡ-ара финанс ойошмаһынан займдар алыуға үҙ-үҙеңә тыйыу һалыу мөмкин буласаҡ. Хеҙмәттәр түләүһеҙ. Сентябрҙән быны МФЦ бүлексәләрендә лә эшләргә була. Әгәр үҙтыйыуға ҡарамаҫтан, кредит шулай ҙа хупланһа, был финанс ойошмаһы проблемаһы - заемсы аҡсаны кире ҡайтармаҫҡа ла мөмкин.

• Быйылдан башлап Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған өсөн күпселек төр штрафтар күләме 1,5 тапҡырға арттырылды. Мәҫәлән, тиҙлекте сәғәтенә 20-40 км-ға арттырған өсөн 750 һум, ә инде иҫерек килеш автомобиль йөрөткән өсөн 45 мең һум түләтелә.

• Марттан башлап бөтөн уҡыусылар ҙа социаль-психологик тест үтә башлаясаҡ. Маҡсаты - уҡыусы балаларҙың йәмғиәткә ҡаршы төркөмдәр йоғонтоһона йәлеп ителеү ихтималлығын ваҡытында иҫкәртеү.

• Сентябрҙән бөтөн вуздар ҙа юғары белемдең яңы системаһына күсә. "Бакалавриат", "специалитет", "магистратура" төшөнсәләре юҡҡа сығарыла. Улар урынына "нигеҙ юғары" һәм "махсуслашҡан юғары" белем атамалары индерелә.

• 30 марттан дәүләт органдары электрон почта аша килгән мөрәжәғәттәргә яуап биреүҙе туҡтата. Был спам менән көрәш ысулы тип аңлатыла. Чиновниктарға хәҙер ҡағыҙға яҙылған хат менән йә булмаһа, "Дәүләт хеҙмәттәре" аша мөрәжәғәт итергә кәрәк буласаҡ, ә яуапты улар хатта күрһәтелгән адрес буйынса электрон почтаға ебәрәсәк.

• Ғинуарҙан күсемһеҙ милек менән эштәр өсөн сығымдар арттырылды. Теркәү өсөн пошлиналар ҡиммәтләнде. Элек фатирға йә йортҡа милекселек хоҡуғына күсеү - 2 мең, ә ер участкаһына 350 һум торһа, хәҙер хаҡтар икеләтә арттырылды. Өҫтәүенә, ашығыс эш өсөн дә икеләтә тариф ҡаралған

• Марттан алып тораҡ пункттары, баҡсасылыҡ ширҡәттәре биләмәһендәге участкалар милекселәренә үҙ милектәрен әүҙем файҙаланыу талап ителәсәк. Участка һатып алғандан һуң ул өс йыл эсендә тәртипкә килтерелергә тейеш. Мәҫәлән, участканы сүп-сарҙан, ҡый үләндәренән таҙартыу, һаҙлыҡлы урындарҙы киптереү кеүек эштәр башҡарыла. Ер файҙаланылмаған һәм тәртипкә килтерелмәгән осраҡта уның суд ҡарары аша тартып алыныуы ихтимал.

• "Дача амнистияһы" 2031 йылдың 1 мартына тиклем оҙайтылды. Бында ҡасандыр алынған һәм төҙөкләндерелгән ер участкаһы менән йортто, әгәр тейешле документтары булмаһа, кадастр һәм һалым иҫәбенә ҡуйыу хаҡында һүҙ алып барыла.

• Иҫәптә тормаған йортта йәшәү 1 марттан тыйыласаҡ.

• 13 ғинуарҙан фатирҙы бүләк итеү фәҡәт нотариус аша башҡарыла. Был милекселәрҙе алдаҡсыларҙан һаҡларға ярҙам итәсәк. Ләкин нотариус хеҙмәттәре өсөн, ниндәй төбәктә булыуына һәм фатир хаҡына ҡарап, 10 меңдән 30 меңгә тиклем түләргә тура киләсәк.

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

АҢЛАТАБЫҘ!

# ИКЕНСЕ ТӨБӘККӘ КҮСКӘНДӘ...

**Ғаилә икенсе төбәккә күсеп китһә, берҙәм пособие нисек түләнә? Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе белгестәре аңлата.**

***Пособие алыу хоҡуғы һәм уның күләме билдәле бер төбәктәге йәшәү минимумына ҡарап билдәләнә:*** ғаилә йәшәү минимумы икенсе төрлө күләмдә булған төбәккә күсеп китһә, пособие түләү туҡтатыла. Әгәр ғаилә талаптар буйынса тап килһә, яңы урында пособиены ҡабаттан юлларға кәрәк.

***Адрес:*** пособие алыу өсөн Дәүләт хеҙмәттәрендә йәшәү урынын раҫларға кәрәк. Бының өсөн ағымдағы теркәлеү адресын күрһәтегеҙ. Социаль фонд уны тикшерәсәк. Әгәр мәғлүмәт булмаһа йәки йәшәгән төбәгегеҙ берҙәм пособие юллау төбәге менән тап килмәһә, Социаль фонд өҫтәмә документтар һорай.

***Шәхси мәғлүмәттәр:*** мәғлүмәттәрегеҙҙең дөрөҫлөгөн тикшерегеҙ, юғиһә, һеҙгә пособие тәғәйенләнмәйәсәк.

***Пособие алыу өсөн реквизиттар:*** әгәр пособие алыу өсөн банк иҫәбе һайлаһағыҙ, уға ғариза биреүсенең МИР картаһы бәйләнгән булырға тейеш.

# ДӘҮЛӘТ ЯРҘАМЫ

**Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан 5157 кеше һәм уларҙың ғаилә ағзалары шифахана-курорт дауалауын алды. Был төр ярҙамды БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы тәьмин итә.**

Бөгөнгө көндә МХО-ла ҡатнашыусылар үҙҙәре өсөн уңайлы вариантты һайлай ала: шифаханала үҙ аллы ял итергә, яҡындары менән дауаланыу курсын бүлешергә йәки дауаланыу хоҡуғын тормош иптәшенә йәки ата-әсәгә (уллыҡҡа алыусыларға) тапшырырға мөмкин.

- Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға социаль ярҙам күрһәтеү беҙҙең өсөн төп бурыстарҙың береһе булып тора. МХО-ла ҡатнашыусылар шифахананы үҙҙәре һайлай һәм дауаланыу өсөн путевка бронләй ала. Санатор-курорт дауалауҙың дауамлылығы бер кеше өсөн - 14 көн, ике кеше өсөн 7 көн тәшкил итә. Бынан тыш, хәрби хеҙмәткә саҡырылған ваҡытта республикабыҙҙа теркәлеп, МХО-ла һәләк булған йәки хәбәрһеҙ юғалған яугирҙың туғандары бер тапҡыр шифахана-курорт дауалау хоҡуғы менән файҙалана ала, - тип комментарий бирә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - Башҡортостан Республикаһының ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская.

Путевка юллау өсөн түбәндәге документтарҙы күрһәтергә кәрәк: паспорт йәки РФ ҡануниәтенә ярашлы шәхесте раҫлаусы башҡа документ; СНИЛС; ИНН; МХО-ла ҡатнашыу тураһында белешмә; һаулыҡ торошо тураһында медицина белешмәһе һәм шифахана-курорт картаһы.

# ЕР УЧАСТКАҺЫ УРЫНЫНА...

**2024 йылда республикала 1204 кеше 250 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған аҡса алған. Программа ғәмәлдә булған ваҡыттан алып был ярҙам менән 4438 кеше файҙаланған.**

Был ярҙам төрө 2020 йылдың 13 октябрендә ғәмәлгә индерелде. Бушлай ер участкаһы алырға хоҡуғы булған ғаиләләргә һайлау мөмкинлеге бирелде. Улар ер урынына аҡсалата компенсация ала. Былтыр был хоҡуҡ менән 1204 ғаилә файҙаланған.

- 2025 йылда был хоҡуҡ менән 2023 йылдың 31 декабренә тиклем сиратта торғандар файҙалана аласаҡ, - тип белдерҙе БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская. - Аҡсалата алыу тураһындағы ғаризаны беҙҙең министрлыҡҡа йәки урындағы үҙидара органдарына яҙырға кәрәк.

**Бер тапҡыр аҡсалата түләүҙе түбәндәге маҡсаттарҙа ҡулланырға мөмкин:**

- һатып алынған (шул иҫәптән төҙөлөп ятҡан) торлаҡ бинаһы өсөн түләү;
- индивидуаль торлаҡ бинаһын төҙөү (шул иҫәптән элек башланған төҙөлөштө тамамлау өсөн);
- айырым торлаҡ йорт һатып алыу өсөн кредит (ипотека) килешеүе буйынса бурыстың төп суммаһын һәм проценттарҙы түләү.
- шәхси торлаҡ төҙөү йәки шәхси ярҙамсы хужалыҡ итеү өсөн ер участкаһын алыу;
- торлаҡ һатып алыуға йәки төҙөүгә ипотека кредиты алғанда тәүге иғәнә түләү.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**31 ғинуар "Хыялый"** (С. Әбүзәр, А. Йәнбәков), лирик комедия. 12+

**1 февраль "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+

**2 февраль "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова, А. Абушахманов), мелодрама. 16+

**4 февраль "Ете быуын. Һаҡлаусылар",** (Р. Харисова). 16+

**5 февраль "Ҡара йөҙҙәр",** (М. Ғафури, А. Абушахманов, инсц. Ш. Ғилманова). 16+

**6 февраль "Хыялға ҡаршы",** (А. Баймөхәмәтов, инсц. А. Ишбулдина, И. Ҡаҙаҡбаев), героик булмаған повесть. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**31 ғинуар "Йәшәгән, ти..."** (Ладо, Р. Хакимов), драмеди. 16+

**1 февраль "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт",** (С. Айтматов, М. Ҡулбаев), ҡисса. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**31 ғинуар "Снеговик и солнышко",** (А.Малахов). 0+

**1 февраль "Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова, А. Волков), 0+

**2 февраль "Красная шапочка"** (Ш. Перро әкиәте буйынса, А. Волков), 0+

**6 февраль "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский), спектакль-синестезия. 6+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2 февраль Фәдис Ғәниевтың** ҙур концерты. 12+

**6 февраль ҡурайсы Рушан Биктимеровтың** юбилей концерты. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**4 февраль "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М.Кәрим). 6+

**6 февраль "Бер, ике, өс..."** (О.Жанайдаров). 18+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**4 февраль "Операға саҡырыу!",** концерт. 6+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**1 февраль "Әсәй, бына һиңә килен...дәр"** (И. Зәйниев), комедия. 12+

**2 февраль "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р.Шарт), комедия. 16+

**6 февраль "Прикоснись сердцем к подвигу"** (Чувашский эстрадно-фольклорный ансамбль "Сарби"). 6+

## БР Милли музейы

**1 февраль "Ғаилә шәмбеһе"** акцияһы сиктәрендә экскурсия. 15:00. 0+

## А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**1 - 6 февраль "Тапшырылмаған хаттар"** (С. Әбдрәхимова, С. Әфләтунов), мелодрама. Учалы районы буйлап гастролдәр. 16+

*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# ЯҘЫУСЫЛАР ЙОРТО ЯҢЫРА



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың Яҙыусылар союзы йортонда булды һәм бинаның тамамланыуға табан барған капиталь ремонт эше менән танышты.**

Ижади союз Өфөнөң тарихи бинаһында урынлашҡан. Коммунистик урамындағы Поликарповтар йорто - төбәк әһәмиәтендәге мәҙәни мираҫ объекты, шуға күрә реставрация эштәренә айырыуса һаҡсыл ҡараш талап ителә. Ремонт 2024 йылдың сентябрендә башланды. Төҙөүселәр бинаның ҡыйығын яңыртҡан, нигеҙен нығытҡан, гидроизоляция эшләгән, фасадты таҙартҡан һәм буяған, шулай уҡ бинаның тарихи йөҙөнә ярашлы архитектура-художество элементтарын тергеҙгән. Эске биҙәкләү эштәрен февраль аҙағына тиклем тамамлау күҙаллана. Башҡортостан Башлығы шулай уҡ республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығына Яҙыусылар союзы йорто алдында халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең иҫтәлегенә йүкә скверын булдырыу бурысын йөкмәтте. Барыһына ла билдәле "Өфө йүкәләре" йырының һүҙҙәрен шағир тап ошо бинала, кабинетының тәҙрәһе янында үҫкән ағастарға ҡарап ижад иткән. Ошонда уҡ Башҡортостан яҙыусыларының хеҙмәтенә арналған һәйкәл ҡуйыу мәсьәләһен хәл итеү зарурлығы ла билдәләнде.

# ӘҘИПТЕҢ ҺҮРӘТЕ...

**Башҡортостанда Яныбай Хамматовтың 100 йыллығына яҙыусы төшөрөлгән маркалы почта конверттары сығарыла. Был хаҡта республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова һөйләне.**

"Федераль почта элемтәһенең Башҡортостан идаралығы Яныбай Хамматов төшөрөлгән конверт сығарырға әҙерләнә, уның тиражы - 50 мең дана", - тине Әминә Шафиҡова башҡорт яҙыусыһы Яныбай Хамматовтың тыуыуына 100 йыл тулыуға бағышланған сараларҙы әҙерләү һәм үткәреү буйынса ойоштороу комитеты ултырышында. Уның һүҙҙәренсә, конверттарҙың февраль башында нәшер ителеүе көтөлә, беренсе партия Башҡортостанға килә. "Яңыбай Хамматов" почта конвертының презентацияһы һәм почта мисәтен һуғыу тантанаһы 13 февралдә республиканың Милли китапханаһында Федераль почта элемтәһе идаралығы һәм Яҙыусылар союзы ҡатнашлығында була.

# ЯУГИР ЙЫРЫ

**Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова социаль селтәрҙәге сәхифәһендә республиканың атҡаҙанған артисы, Сибай концерт-театр берләшмәһе солисы, Махсус хәрби операция яугиры Фларид Бирғәлин башҡарыуында яңы йыр сығыуы хаҡында хәбәр итте.**

"Сибай артистары "Шайморатов генерал"ды йырлай-йырлай яуға китте һәм күптәрҙе илебеҙ һағына баҫырға дәртләндерҙе. Бөгөн улар хаҡында йырҙар ижад итәләр...",- тип яҙҙы Әминә Шафиҡова. Билдәләнеүенсә, барлыҡ музыкаль майҙансыҡтарҙа "Йәш егеттәр дәррәү күтәрелде" йырының (Рима Баймырҙина һүҙҙәре, Эмил Абдрахманов көйө) премьераһы булды. "Был йыр минең өсөн яугирҙарыбыҙҙың гимны кеүек яңғырай. Быйыл күптән көтөлгән тыныслыҡ килер тип өмөтләнәбеҙ, - тип яҙҙы Фларид Бирғәлин. - Ул 2024 йылда сығырға тейеш ине, ләкин яҙмыш үҙе 2025 йылды һайлаған, күрәһең. Ә йыр 2023 йылдың сентябрендә тыуҙы. Миңә ошо йырҙы бүләк иткән өсөн "Яңы Йыр" студияһынан Эмиль Абдрахмановҡа рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм. Уны оҙаҡ ҡына яҙҙыра алманыҡ, үҙегеҙ аңлап тораһығыҙ, шарттар мөмкинлек бирмәй. Был матур йыр өҫтөндә оҙаҡ эшләнек! Бына шундай тарих!"

# МУЗЫКА ДӘРЕСТӘРЕНДӘ...

**Рәсәйҙең Мәғариф министрлығында музыка дәрестәрендә ниндәй йырҙар өйрәтеү мәсьәләһен хәл итеү өсөн эксперттар исемлеге төҙөлдө.**

Эксперттар араһында - яҡташыбыҙ, опера йырсыһы Илдар Абдразаҡов, шулай уҡ дирижёр, Мария һәм Ҙур театрҙарҙың генераль директоры Валерий Гергиев, Щукин исемендәге театр институты ректоры Евгений Князев, Гнесинка ректоры Александр Рыжинский кеүек билдәле мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, депутаттар, чиновниктар, музыка мәктәптәре һәм институттары уҡытыусылары бар. Йәйгә патриотик эстрада йырҙары исемлеге әҙерләнә. Проект менән таныштырыу августа булыр тип көтөлә. Әйткәндәй, был идея 2024 йылдың 28 ноябрендә Союздар йортонда "Үҫеп килеүсе быуынды тәрбиәләү системаһында Тыуған ил тураһында йырҙар" темаһына үткән түңәрәк ҡорҙа барлыҡҡа килде. Осрашыуҙа ҡатнашыусылар бер тауыштан уҡыусылар мотлаҡ "Я русский", "Офицеры", "Батяня-комбат" кеүек патриотик йырҙарҙы өйрәнергә тейеш тигән ҡарарға килде. Яңыртылған музыка дәрестәре программаһы 2025 йылда уҡ индерелеүе ихтимал.

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# ҺЫЙҘЫҠ КҮЛДӘК ТЕКТЕРЕП...

**Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе башҡортсаға ауҙарыу буйынса фекер алышыу социаль селтәрҙә йыш осрай, үҙебеҙсә яңғыраған яңы һүҙҙәр тәҡдим ителә. Ошо хәл бик тә ҡыуандыра: тимәк, телебеҙҙе үҫтереүгә, яҡлауға ынтылыш бар. Иҫкергән һәм һирәк ҡулланылған һүҙҙәргә яңы һулыш биреү ҙә туған телебеҙ байлығын яҡлау-һаҡлауға хеҙмәт итә.**

**Һыҙлыҡ.** "Ваҡ ҡына итеп ныҡ ҡурылған майлы ит йә ит майы" тигән мәғәнәһе яҡшы билдәле. Теште тәрбиәләүҙә ҡулланылған әйбергә ҡарата ла ошо һүҙ бик тура килә. *Ҡауырһын һыҙлыҡ. Теш ҡаҙнаһын яраламаҫ өсөн, һыҙлыҡты һаҡ тотоналар.*

**Һыҙғыс.** Бер нисә мәғәнәгә эйә һүҙ.

**1.** Тәүгеһе - "скрипканың смычогы" - телдә күптән нығынған. *Мәҫәлән: Скрипкаға яңы һыҙғыс кәрәк.*

**2.** Ә "һыҙғыс" тип шырпыны атау диалектҡа хас. *Һунарсы һыҙғысы. Һыҙғысты ҡоро урында тоталар.*

**3.** Шулай уҡ "линейка" тигән һүҙҙе "һыҙғыс" тип атау ҙа беҙҙеңсә булыр. *Тегенсе һыҙғысы. Һатыусы һыҙғыс менән тауар үлсәй.*

**Һыйғыр.** "Һығылмалы" тигәнгә мәғәнәһе бик яҡын һүҙ. *Һыйғыр сыбыҡ. Һыйғыр ағас һынып бармаҫ.*

**Һыйҙыҡ.** Ҡайһы бер һөйләштә ҡәҙерлегә, йәғни, ҡунаҡҡа, тантанаға кейә торған әйбергә ҡарата ҡулланылған һүҙ. *Һыйҙыҡ кейем. Сығарылыш кисәһенә һыйҙыҡ күлдәк тектереү.*

**Һыйҙаш.** Ҡунаҡтар бер-береһенә ҡарата һыйҙаш була. *Табында таныш һыйҙаштар йәнәшә ултырҙыҡ. Һыйҙаш менән ихлас аралаштыҡ.*

**Шулай итеп, һыйғыр телле, йор һүҙле булайыҡ, дуҫтар.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҮЛӘ АШАҒАНСЫ...

## бүлә аша

Йөрәк ашъяулыҡ түгел, һәр кем алдында йәйеп булмай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡытайҙың бер батшаһы әтәс һуғыштырыу тамашалары ойоштороrға яратҡан. Уның өсөн уның хеҙмәтселәре илдәге иң көслө һәм иң матур әтәстәрҙе һайлап килтерер булған. Бындай тамашалар батшалыҡта көн дә тиерлек булып торған һәм оло байрамға әйләнгән. Бер ваҡыт батшаға эре тоҡомло, сағыу, матур ҡауырыйлы, ҡанаттары һәм аяҡтары көслө бер әтәс бүләк итәләр. Батша уны ҡыуанып ҡабул итә һәм: "Был әтәскә тиңләшерлек башҡа әтәс булмаясаҡ! Ул барыһын да еңергә тейеш. Синцзыны саҡырығыҙ, ул әҙерләһен әтәсте алышҡа", - тип бойороҡ бирә. Синцзыны батшаға алып киләләр. Үҙенә йөкмәтелгән бурысты тыңлағас, Синцзы әтәсте ентекләп ҡарай һәм уны алышҡа яраҡлы тип таба ла күнектерә башлай. Ун көн үткәс, Синцзыны батша үҙ янына саҡырта: "Ун көн үтте. Был ваҡыт эсендә һин әтәсте әтәстәр ярышына әҙерләп бөтөргә тейеш инең. Был донъялағы иң шәп әтәс һәм һуғышта уға тиңләшеүсе булырға тейеш түгел! Шулай итеп, әтәс әҙерме?" - тип, батша тәкәббер ҡарашын күнектереүсегә йүнәлтә. "Юҡ, әҙер түгел, - ти Синцзы.- Әтәс артығы менән үҙ-үҙенә ышаныусан һәм һауалы. Тәкәбберлеге күкрәгенә һыймай. Шуға ла уны майҙанға сығарырға иртәрәк әле..." "Һин быларҙы ҡайҙан беләһең?"- тип аптырай батша. "Батшам... - тип йылмая Синцзы. - Әтәскә ҡарағыҙ әле. Ул алыштағы һөҙөмтәләре тураһында бөтөнләй уйламаған, ә үҙ-үҙе менән һоҡланған кеше һымаҡ тота үҙен. Ул шул тиклем маһайған, уны теләһә ниндәй башҡа әтәс еңә аласаҡ..." Батша әтәсенә аптырап ҡарап тора ла, күнектереүсе менән килешә.**

**Тағы ун көн үтеп китә. Батша үҙенең баяғы әтәсен танылған бер хакимдың әтәсе менән һуғыштырырға теләп, түҙемһеҙләнеп, Синцзыны саҡыра: "Байтаҡ ваҡыт үтте бит, минең әтәсем алышҡа әҙерҙер, моғайын?" - тип һораулы ҡарашын күнектереүсегә төбәй. "Юҡ, батшам, ул әҙер түгел. Әтәстә әле сыҙамлыҡ һәм түҙемлек юҡ, ул әле теләһә ниндәй күләгә артынан ташлана, теләһә ниндәй тауышҡа яуап бирә. Ашығыусанлығы һәм түҙемһеҙлеге арҡаһында ул алышта еңеләсәк", - ти Синцзы. Батша бер ни тип тә яуап бирмәй һәм уйға ҡала. Ун көндән һуң тамам түҙемлеге шартлаған батша Синцзыны килеп етергә бойора. Синцзы алдына килеп баҫҡас, асыуын көскә тыйып, әтәстең алышҡа әҙер булыу-булмауы тураһында һорауын бирә. "Юҡ, батшам, тағы көтөргә кәрәк, - ти Синцзы. - Әтәскә әле башҡалар менән алышҡа сығырға иртәрәк. Ул асыулы, агрессив, уның ҡарашы - нәфрәт, тәне көс менән тулы. Ундайҙар алыштар мәлендә бары тик имгәнеүгә генә дусар була".**

**Ошонан һуң тағы ун көн үтә. Батша өндәшмәй генә Синцзының үҙе килгәнен көтә. Ун беренсе көндөң кисендә Синцзы батша эргәһенә килә һәм әтәстең алышҡа әҙер булыуы тураһында хәбәр итә. "Ә һин уның әҙер булыуын нисек билдәләнең?"- тип һорай батша. "Батшам, әтәскә ҡарағыҙ әле. Ул хәҙер бик тыныс тота үҙен. Уның көсө тышҡа бәреп сыҡмай, ә ҡыҫылған пружина кеүек эстә туплана. Бындайҙар үҙенең дошманын күргәндә ҡаушап төшмәй. Уның менән алышҡа сығырға бер әтәс тә батырсылыҡ итмәйәсәк, сыҡҡанда ла, әйләнеп ҡасып китәсәк. Сөнки уның камиллығы ла, көсө лә - уның үҙ-үҙен тотошонда, сабырлығында, дәрәжәһендә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25004

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
30 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 197

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.